БАШҠОРТОСАН РЕСПУБЛИКАҺЫ КӨЙӨРГӘҘЕ РАЙОНЫ
МУНИЦИПАЛЬ РАЙОН ХАКИМИӘТЕНЕҢ МӘҒАРИФ БҮЛЕГЕ

«Башҡортостан Республикаһы Көйөргәҙе районы муниципаль районның Яңы Таймаҫ ауылы Р.Солтангәрәев исемендәге гимназияһы»

| **Ҡаралды** | **Килешелде** | **Раҫлайым** |
| --- | --- | --- |
| МБ ултырышы<br>Протокол № 1<br>31 август 2023 й.<br>МБ ет.________ | МБ ултырышы<br>Протокол № 1<br>31.08 август 2023 й.<br>УТЭ буйынса директор урынбаҫары Байғотлина Л.Х. ________ | Бойороҡ № 120 - од<br>« 1 » 09 2023 й.<br>гимназия директоры Әбсәләмов Р.Р.<br>________ |

# “Башҡорт әҙәбиәте” уҡыу предметының эш программаһы

## 5-9-сы класс уҡыусылары өсөн

## 2023-2024 уҡыу йылына

Башҡарҙы:
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Әҙеһәмова Гөлназ Флүр ҡыҙы

Яңы Таймаҫ 2023 й.

# АҢЛАТМАЛЫ ЯҘЫУ

Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған төп дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-9-сы кластары өсөн «Туған (башҡорт) әҙәбиәте» предметы буйынса белем биреү өлгө эш программаһы (артабан – Программа) уҡыу предметының һәр йыл буйынса йөкмәткеһен, уҡыусыларҙы Туған (башҡорт) әҙәбиәте уҡыу предметы саралары менән уҡытыу, тәрбиәләү һәм үҫтереү буйынса төп методик стратегияларҙы билдәләй».

Программаның норматив хоҡуҡи базаһы:

-Рәсәй Федерацияһы Конституцияһы;

-«Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында» 2012 йылдың 29 декабрендәге № 273-ФЗ Федераль закон (үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр менән);

-«Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» 1991 йылдың 25 октябрендәге № 1807-1 Россия Федерацияһы законы закон (үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр менән);

-Төп дөйөм белем биреүҙең федераль дәүләт белем биреү стандарты (Рәсәй Федерацияһы Мәғариф министрлығының 2021 йылдың 31 майындағы № 287 бойороғо менән раҫланған);

-Төп дөйөм белем биреүҙең төп өлгө программаһы (дөйөм белем биреү буйынса федераль уҡытыу-методик берләшмәһе ҡарары менән хупланды, 2022 йылдың 18 мартындағы № 1/22 протокол);

-Тәрбиә биреүҙең өлгө программаһы (дөйөм белем биреү буйынса федераль уҡытыу-методик берләшмәһе ҡарары менән хупланды, 2022 йылдың 23 июнендәге №1/22 протокол).

Программа Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәй Федерацияһының башҡа төбәктәрендә башланғыс дөйөм белем биреү программаларын туған (башҡорт) телдә уҡытыуҙы ғәмәлгә ашырыусы дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн эшләнгән һәм предмет өлкәһе уҡытыу туған телдә алып барылған «Туған тел һәм әҙәбиәт» менән эшләүсе уҡытусыларға методик ярҙам күрһәтеүгә йүнәлтелгән.

Дәреслектәр һәм эш программаларын төҙөүсе авторҙар уҡыу материалының күләмен һәм йөкмәткеһен киңәйтергә, уҡыусыларҙы үҫтерүгә һәм тәрбиәләүгә ярҙам итеүсе эш төрҙәрен тәҡдим итергә хоҡуҡлы.

Программа төп дөйөм белеү биреү федераль дәүләт стандарттары һөҙөмтәләре талаптарына ярашлы төҙөлдө (артабан – ФДББС). Унда шулай уҡ дөйөм белем биреүҙең универсаль уҡыу эшмәкәрлеген үҫтереү һәм формалаштырыу программаһының төп идеялары һәм ҡағиҙәләре, башланғыс дөйөм белем биреү өсөн өлгөлө белем биреү программалары менән күсәгилешлек иҫәпкә алына.

Программа нигеҙендә кешенең рухи тормошон, уның әҫәрҙә сағылдырылған эске донъяһын, ә уҡыусының үҙ донъяһы – төп ҡиммәт булараҡ ҡарарға мөмкинлек биреүсе гуманитар педагогика идеялары һәм гуманитар педагогик принциплар ята. Был концепцияла

әҙәбиәт дәресе кешенең һығылмалыҡ, вариативлыҡ, диалог ҡора белеүенә хас булған гуманитар фекерләү стиленә һәләтен стимуллаштырыу һәм үҫтереү, ә дөйөм әҙәби белем биреү – уҡыусыларҙы мәҙәниәт ҡаҙаныштарына йәлеп итеү, уларҙы ижади эшмәкәрлеккә индереү өсөн шарттар тыуҙырыу сараһы булараҡ ҡарала.

Программа эш программаларын төҙөү өсөн йүнәлеш булып тора: ул уҡыу курсының инвариант (мәжбүри) өлөшөн билдәләй, унан ситтә белем биреүҙең йөкмәткеһенең вариатив өлөшөн тәшкил итеүсе авторлыҡ һайлау мөмкинлеге ҡала. Эш программалары һәм дәреслектәрҙең авторҙары уҡыу материалын структуралаштырыуға, уны өйрәнеүҙең эҙмә-эҙлеклелеген билдәләүгә, йөкмәткене киңәйтеүгә, шулай уҡ белем, оҫталык һәм эшмәкәрлек алымдарын формалаштырыу, уҡыусыларҙы үҫтереү, тәрбиәләү һәм социалллләштереү юлдарын билдәләүгә үҙ ҡараштарын тәҡдим итә алалар.

Программала башланғыс дөйөм белем биреү программаларында тәҡдим ителгән барлыҡ төп эшмәкәрлек төрҙәрен үҫтереү ҡаралған. Әмма Программаның йөктәмкеһе, беренсенән, урта белем биреү системаһының предмет йөкмәткеһенә, икенсенән, уҡыусыларҙың психологик һәм йәш үҙенсәлекләренә бәйле.

Программа башҡорт телен белеүсе уҡыусылар өсөн эшләнгән.

Программаның йөктәмкеһе системалы-эшмәкәрлек алымына ярашлы төҙөлгән һәм төп дөйөм белем биреү программаһының «Туған тел һәм туған әҙәбиәт» предметы өлкәһе өлөшөнә ФДББС (федераль дәүләт белем биреү стандарттары) ҡуйған талаптар һөҙөмтәләренә ирешеүгә йүнәлдерелгән.

### Туған (башҡорт) әҙәбиәте предметына дөйөм характеристика

Образлы һүҙ сәнғәте булараҡ әҙәбиәт – тормошто танып белеүҙең үҙенсәлекле алымы, донъяның фәнни картинаһынан үҙенең эмоциональ йоғонтһоноң юғары дәрәжәһе, метафориклығы, күп мәғәнәле булыуы, тамамланмағанлығы, ҡабул итеүсенең актив ижадын күҙ алдында тотоуы кеүек мөһим айырмаларға эйә сәнғәт моделе.

Әҙәбиәт Рәсәй мәктәптәрендә төп гуманитар уҡыу фәне булараҡ, һәр яҡтан үҫешкән, гармоник шәхесте формалаштырыуға, гражданин һәм патриотты тәрбиәләүгә булышлыҡ итә. Мәҙәниәттең гуманистик ҡиммәтттәренә мөрәжәғәт итеү һәм ижади һәләтлеген үҫтереү – эмоциональ бай һәм интеллектуаль үҫешкән, үҙенә конструктив һәм шул уҡ ваҡытта тирә-йүндәге донъяға тәнҡит күҙлегенәнән ҡарарға өйрәнгән шәхес тәрбиәләүҙең кәрәкле шарты.

Әҙәбиәт дәрестәрендә уҡыусының һүҙ сәнғәте әҫәрҙәре менән танышыуы – ул ысын художество ҡиммәтәре менән генә танышыу факты түгел, а аралашыу (коммуникация), яҙыусылар менән диалог тәжрибәһе лә. Илебеҙ халыҡтарының һүҙ сәнғәте әҫәрҙәре менән танышыу уҡыусыларҙың аңында художестволы мәҙәниәттең байлығы һәм күп төрлөлөгө, күп милләтле Рәсәйҙең рухи һәм әхлаҡ потенциалы тураһында ҡараштарын киңәйтә.

Һүҙҙәр, тел билдәләре менән әҙәби әҫәрҙә һүрәтләнгән тормоштоң художестволы картинаһы тойғолар (эмоция) нигеҙендә генә түгел, ә интеллектуаль аңлап ҡабул ителә (рациональ). Әҙәбиәтте юҡҡа ғына фәлсәфә, психология менән сағыштырмайҙар, уны «художестволы тикшеренеү», «кешене өйрәнеү фәне», «тормош дәреслеге» тип атайҙар.

Уҡыу предметының йөкмәткеһе дәрестән тыш эшмәкәрлектә лә (конференция, байрам сараһы, квест һ.б.) тормошҡа ашырылырға мөмкин.

### «Туған (башҡорт) әҙәбиәте» уҡыу предметын өйрәнеүҙең маҡсаты һәм бурыстары

«Туған (башҡорт) әҙәбиәте» предметын өйрәнеүҙең **маҡсаты** – башҡорттарҙың мәҙәни-тел өлкәһен аңлаған, рухи яҡтан үҫешкән шәхес тәрбиәләү, уҡыусыны үҙ халҡының әҙәби мираҫына йәлеп итеү, уның сәнғәт текстарын ҡабул итеүгә, аңлауа һәм объектив баһаларға булған һәләтен үҫтереү, база коммуникатив күнекмәләрен камиллаштырыу.

«Туған (башҡорт) әҙәбиәте» предметын өйрәнеүҙең **бурыстары**:

-башҡорт халҡының төп мәҙәни ҡиммәттәренең береһе һәм тормышто танып белеүҙең ысулы булараҡ художестволы әҙәбиәткә мөнәсәбәт формалаштырыу;

-ҡабул итә белеүҙе үҫтереү, анализлау, тәнҡитле баһалау һәм уҡығанды интерпретациялау, әҙәби әҫәрҙә сағылдырылған художестволы тормош картинаһын эмоциональ һәм интеллектуаль кимәлдә аңлау;

-этаплап, әҙмә-эҙлекле аңлап уҡыу, уҡығанды аңлатыу, анализлау һәм тексты интерпретациялай белеү һәләтен формалаштырыу;

-һүҙлек запасын байытыу, уҡыусыларҙа тел һәм яҙма һөйләү нормалары, һөйләм этикеты ҡағиҙәләре нигеҙендә туған телде белеү культураһын уның функциональ мөмкинлекләренең бар тулылығында үҫтереү;

-әҫәрҙәрҙең төр һәм жанр, сюжет-композицион һәм тел үҙенсәлектәрен, һүрәтләү урынын, ваҡытын һәм ысулдарын билдәләү;

-нәфис текста яҙылғандың мәғәнәһенә төшөнөүҙең яҡынса алгоритмдарын үҙләштереү, уҡылғанға ҡарата үҙ баһаларын һәм фекерҙәрен күрһәтеү;

-үҙ позицияңды белдереү мәҙәниәтен, үҙ фекереңде дәлилләү һәм уны төрлө жанрҙарҙың телдән һәм яҙма әйтелешендә формалаштырыу һәләтен тәрбиәләү, ижади, аналитик һәм интерпретациялау характерындағы асыҡ телмәр төҙөү;

-«сит» позицияны аңлау культураһын тәрбиәләү, башҡа кешеләр ҡиммәттәренә, башҡа дәүерҙәр һәм халыҡтар мәҙәниәтенә хөрмәт менән ҡарау;

-үҙ-үҙеңде камиллаштырыу өсөн әҙәбиәт уҡыуҙың һәм өйрәнеүҙең мөһимлеген аңлау, ял ваҡытында уҡыу өсөн әҫәрҙәрҙе аңлы рәүештә һайлауға ынтылыш формалаштырыу;

-шәхестең уңышлы социализацияһы һәм үҙ-үҙен тормошҡа ашырыу өсөн кәрәк булған уҡыусыларҙың интеллектуаль ижади һәләттәрен үҫтереү;

-мөһим дөйөм белем биреү күнекмәләрен һәм универсаль уҡыу эшмәкәрлеген үҙләштереү (эшмәкәрлек маҡсаттарын формалаштырыу, уны планлаштырырыу, библиографик эҙләнеүҙе тормошҡа ашырырыу, кәрәкле мәғлүмәтте төрлө сығанаҡтарҙан шул иҫәптән Интернеттан һ.б. табыу һәм эшкәртеү).

## «Туған (башҡорт) әҙәбиәте» уҡыу предметын өйрәнеүҙең өлгөлө эш программаһының төп йөкмәтеке линиялары

Программала тәҡдим ителгән блоктарҙы ошондай логик һәм традицион хронологик тәртиптә урнаштырырға мөмкин:

Блок 1. Халыҡ ижады.

Блок 2. XI – XVIII быуаттар башҡорт әҙәбиәте.

Блок 3. XIX – XX быуаттар башы башҡорт әҙәбиәте.

Блок 4. Башҡорт совет әҙәбиәте.

Блок 5. Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте.

Блок 6. Рус әҙәбиәте.

Блок 7. Әҙәбиәт теорияһы һәм тарихы буйынса мәғлүмәт.

Программала (йөкмәткелә һәм тематик планлаштыруҙа) әлеге блокларҙы теүәл логик эҙмә-эҙлектә өйрәнеү мөмкин түгел. Халыҡ ижадын һәм башҡорт әҙәбиәтенең башланғыс осорон үҙләштереү өсөн ҡатмарлы тарихи дәүерҙе ҡабул итә һәм анализлай белеү кәрәк, быға урта звено уҡыусылары әҙер түгел. Быны башҡорт теле яҙмаһының бер нисә тапҡыр график нигеҙен үҙгәртеүе лә ҡатмарлаштыра, шуның менән бәйле фольклор һәм сәнғәт әҫәрҙәре текстарында ғәрәп, фарсы теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр күпләп өҫтөнлөк итә. Был проблеманы хәл итеү башҡорт лексикологияһын өйрәнеү менән генә сикләнмәй, башҡорттарҙың көнсығыш халыҡтары менән тарихи-мәҙәни бәйләнештәре хаҡында уҡыусыларҙың билдәле күҙаллауҙарға эйә булыуы мөһим.

2–5-се блоктарҙа нәфис әҙәбиәт исемлеге һәм уларҙың төп проблематикаһын һәм художестволы үҙенсәлеген яҡтыртыусы ҡыҫҡа аннотациялар бирелә. Әҫәрҙәрҙе өйрәнер алдынан яҙыусының тормош юлы һәм ижадына ҡыҫҡаса күҙәтеү яһала. Әҙәбиәт теорияһы һәм тарихы буйынса материалдар программаның һәр блогында тәҡдим ителә.

Рәсәй халыҡлары әҙәбиәте үҙ аллы уҡыу өсөн тәҡдим ителә, предметты өйрәнеү өсөн сәғәттәр һаны арттырылған осраҡта Рәсәй халыҡтары әҙәбиәтен дәрестән тыш эшмәкәрлеккә бүленгән ваҡыт сиктәрендә өйрәнергә мөмкин.

Үҙ аллы уҡыу һәм ятлау өсөн тәҡдим ителгән әҫәрҙәр исемлеге программаға ҡушымта (1-се ҡушымта) менән бирелгән.

«Туған (башҡорт) әҙәбиәте» предметының уҡыу планындағы урыны

ФДББС-ҡа ярашлы «Туған әҙәбиәт» предметы «Туған тел һәм туған әҙәбиәт» предметы өлкәһенә инә һәм өйрәнеү өсөн мәжбүри булып тора.

Предмет өлкәһе уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларында «Туған (башҡорт) әҙәбиәте» предметын өйрәнеүгә 5-9-сы кластарҙа – 170 сәғәт бирелә: 5-се класта – 34 сәғәт, 6-сы класта – 34 сәғәт, 7-се класта – 34 сәғәт, 8-се класта – 34 сәғәт, 9-сы класта 34 сәғәт.

«Туған (башҡорт) әҙәбиәте» предметын интенсив һәм тәрәнерәк өйрәнеү өсөн белем биреү учреждениеһы уҡыу предметын өйрәнеү өсөн бирелгән сәғәттәрҙең һанын белем биреү мөнәсәбәттәрендә ҡатнашыусылар формалаштыра торған уҡыу планының бер өлөшө иҫәбенә үҙ аллы рәүештә арттырырға хоҡуҡлы.

## «ТУҒАН (БАШҠОРТ) ӘҘӘБИӘТЕ» ПРЕДМЕТЫНЫҢ ЙӨКМӘТКЕҺЕ

5-се класс

**Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте**

1980-2022 йылдар башҡорт әҙәбиәте. Был осор халыҡтың ижтимағи һәм рухи тормошонда ҙур үҙгәрештәр, милли мәҙәниәтте артабан байытыу, бер үк ваҡытта рухи ҡиммәттәрҙе яңы күҙлектән баһалау һәм күсеш осоро һөҙөмтәһе булараҡ – критик реализм тенденцияларын тергеҙеү менән характерлана. Үҙгәртеп ҡороу һәм үзгәртеп ҡороу осоронан һуңғы йылдар тулҡынында проза, поэзия, драматургия, әҙәбиәт белеме һәм тәнҡит үҫә. Хәҙерге этапта Әхиәр Хәкимов, Булат Рафиҡов, Рәшит Солтангәрәев, Ноғман Мусин, Кәтибә Кинйәбулатова, Гөлфиә Юнысова, Рауил Бикбай, Наил Ғәйетбай, Флорид Бүләков һәм башҡа бик күптәрҙең әҫәрҙәре башҡорт әҙәбиәте үҫешенә ҙур өлөш индерҙе.

**XIX – XX быуат башы башҡорт әҙәбиәте**

XIX быуаттың икенсе яртыһындағы башҡорт әҙәбиәте (1860-1900 йылдар). XIX быуаттың икенсе яртыһынан рус әҙәбиәте йоғонтоһонда Көнбайыш әҙәбиәте өсөн хас жанрҙар: роман, повесть, драма, комедия һ.б. киң үҫеш ала. Хәҙерге этапта был жанрҙар башҡорт әҙәбиәтен Көнсығыш һәм Көнбайыштың данлы традициялары менән байытып, ныҡлы урын алып, үҫешен дауам итә.

XIX быуаттың икенсе яртыһындағы әҙәбиәттең үҙенсәлеге – мәғрифәтселек реализмы методының барлыҡҡа килеүе һәм үҫеше. Майҙанға мәғрифәтселек реализымының иң сағыу вәкилдәре – башҡорт шағирҙары Мифтахетдин Аҡмулла, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев, Риза Фәхретдиновтар сыға. Улар үҙ әҫәрҙәре, фәнни-методик хеҙмәттәре һәм уҡытыусылыҡ эшмәкәрлектәре менән мәғрифәтселек идеяһын алға һөрәләр.

Был осорҙа суфыйсылыҡ йүнәлешендәге әҫәрҙәр әле етәрлек була. Ғәли Соҡорой реалистик һәм мәғрифәт характерындағы бик күп әҫәрләр һәм фәнни хеҙмәттәр яҙһа ла, уның ижадында суфыйсылыҡ идеялары айырыуса асык сағыла.

Әлеге осор шиғриәте – М. Аҡмулла, Ғ.Соҡорой, М. Өмөтбай, Ноғман, Хөснийәр, Сөләймәндең шиғри әҫәрҙәре, проза – Р. Фәхретдинов, З. Һаҙый повестары һәм хикәйәләре, сәйәхәтнамә – Соҡорой һ.б. әҫәрҙәрендә яҡтыртыла. Драматургия, нигеҙҙә, ҡулъяҙма варианттарҙа йәшәп килә. Беҙҙең көндәргә килеп еткән ҡулдан яҙылган пьеса варианттары буйынса түбәндәгеләрҙе әйтергә була: күләме буйынса улар ҙур түгел, комедиялар өҫтөнлөк итә, күп осраҡта авторҙар күрһәтелмәгән.

XX быуат башы башҡорт әҙәбиәте (1900-1917 йылдар). XX быуат башы башҡорт әҙәбиәте үҙгендә – тәнҡитле реализм формалаштырыу проблемалары, романтик йүнәлеш билдәләре, жанр һәм стиль формаларын байытыу.

Әҙәби аренаға башҡорт әҙәбиәтен яңы үҫеш кимәленә күтәреүсе шағир, прозаик һәм драматургтарҙың яңы быуыны килә.

Мәжит Ғафури, Сафуан Яҡшығолов, Дауыт Юлтый, Шәйехзада Бабичтың шиғри әҫәрҙәре башҡорт шиғриәтенең алтын фондына индерелде. Прозала Авзал Таһиров, Мәжит Ғафури, Закир Һаҙый, Зыя Өммәти, Кәбир Туйкин, Мөхәммәтһаҙый Сәғҙи, Әхнәф Иҫәнбирҙин, Фәйзи Вәлиев, Булат Рафиҡиҙың хикәйәләре һәм повестары айырыуса танылыу таба. Башҡорт драматургияһы йылдам үҫә башлай.

Быға халыҡтың театр сәнғәтенә ҡарата ныҡлы ҡыҙыҡһыныуы ҙур йоғонто яһай, шуның һөҙәмтәһендә төбәктә «Ширҡәт», «Сәйәр» һ.б. кеүек ярым профессиональ театр труппалары ойошторола. Был театр труппалары өсөн пьесалар етмәй, сөнки башҡорт теленә тәржемә ителгән классик сит ил һәм рус драмаларынан тыш, ерле башҡорт колоритлы спектаклдәр ҙә кәрәк ине. Афзал Таһировтың «Студенттар» («Шәкерттәр»), Фазыл Туйкиндың «Ватан ҡаһармандары», «Тормош ҡорбандары», Ғәбдеррәүф Ниязбаевтың «Көслөләр һәм көсһөҙҙәр» («Брадәрән Ғәлимовтар»), Ғиләж Ғүмәрскийҙың «Һуғышта», Фәтхелҡадир Сөләймановтың (Абдулҡадир Инан) «Салауат батыр» һ.б. пьесалары шул тулҡында яҙылды һәм башҡорт халҡы араһында киң популярлыҡ яуланы.

**Башҡорт совет әҙәбиәте**

Башҡорт әҙәбиәтенең совет осоро (1918-1991 йылдар). Был осор башҡорт әҙәбиәт белгестәре тарафынан өйрәнелгән һәм был этапты осорҙарға бүлеүҙең төрлө варианттары тәҡдим ителә. Дәүерҙе дүрт осорға бүлеп ҡарап дөрөҫөрәк булыр:

-1917-1941 йылдар – башҡорт совет әҙәбиәтенең барлыҡҡа килеү һәм формалашыу осоро;

-1941-1957 йылдар – Бөйөк Ватан һуғышы һәм һуғыштан һуңғы йылдар осорондағы башҡорт әҙәбиәте;

-XX быуаттың 60-сы һәм 70-се йылдарҙағы башҡорт әҙәбиәте (1957-1980 йылдар);

-XX быуаттың 80-се һәм 90-сы йылдарҙағы башҡорт әҙәбиәте (1980-1991 йылдар).

1917-1941 йылдар. Был этап граждандар һуғышы йылдарын, егерменсе һәм утыҙынсы йылдарҙы үҙ эсенә ала. XX быуаттың 20-се һәм 30-сы йылдарындағы башҡорт әҙәбиәтендә поэзия, проза һәм драматургия милли әҙәбиәттең күренекле яҙыусылары – Мәжит Ғафури, Дауыт Юлтый, Ғайнан Хәйри, Афзал Таһиров, Төхвәт Йәнәби, Имай Насыри, Али Карнай, Сәғит Мифтахов ижадтарында яҡтыртыла.

1941-1957 йылдар. XX быуаттың икенсе яртыһы (хәҙерге башҡорт әҙәбиәте) башҡорт әҙәбиәтенең өлгөрөп еткән осоро булараҡ билдәләнелә. Бөйөк Ватан һуғышы һәм һуғыштан һуңғы йылдар осорондағы башҡорт әҙәбиәте илдәге сәйәси ваҡиғалар менән бәйле рәүештә, художестволы фекерҙе үҫтереү планында шаҡтай ҡатмарлы күренеш булараҡ ҡарала. Был

этапта проза, поэзия, драматургия, шулай уҡ балалар әҙәбиәте, тәнҡит һәм әҙәбиәт белеме ҡәтғи цензураға дусар була, шуға ҡарамаҫтан әҙәбиәт үҫә, быны Мөхәммәтша Буранғолов, Рәшит Ниғмәти, Ғариф Ғүмәр, Баязит Бикбай, Хәниф Кәрим, Сәғит Агиш, Сәләх Кулибай, Кирәй Мәргән, Ҡадир Даян һ. б. ижады раҫлай.

XX быуаттың 60-сы һәм 70-се йылдарҙағы башҡорт әҙәбиәте. Бында бик ҙур әҙәби мираҫ, барыһынан да бигерәк, жанр төрҙәре, темаларҙың байлығы һәм әҙәбиәтселәрҙең ижади потенциалы менән айырылып тора. Был осор илдең ижтимағи-сәйәси тормошонда, шәхестең рухын яңыртыҙа тәрән үҙгәрештәр менән характерланып, ысынбарлыҡты эстетик ҡабул итеүҙә, әҙәби үҫештең ҡатмарлы процесстарында сағылыш тапты. Һәҙиә Дәүләтшина, Мостай Кәрим, Зәйнәб Биишева, Назар Нәжми, Әнүәр Бикчәнтәев, Әкрәм Вәли, Динис Исламов, Яныбай Хамматов, Фәрит Иҫәнғолов, Хәким Ғиләжев, Муса Ғәли, Ибраһим Абдуллин, Нәжип Асанбаев, Рәми Ғарипов, Рәшит Назаров, Азат Абдуллина һ.б. әҙәрҙәренең күбеһе башҡорт әҙәбиәте классикаһына әүерелеп, бөтә илдә дан ҡаҙанды.

XX быуаттың 80-90-сы йылдарҙағы башҡорт әҙәбиәте. Был осор халыҡтың ижтимағи һәм рухи тормошонда ҙур үҙгәрештәр, милли мәҙәниәтте тағы ла байытыу, бер үк ваҡытта рухи ҡиммәттәрҙе яңынан баһалау һәм күсеш осороноң һөҙөмтәһе булараҡ – тәнҡитле реализм тенденцияларын тергеҙеү менән характерлана. Үҙгәртеп ҡороу һәм унан һуңғы йылдар туҡынында проза, поэзия, драматургия, әҙәбиәт ғилеме һәм тәнҡит йылдам үҫә. Был этапта Әхиәр Хәкимов, Булат Рафиҡов, Рәшит Солтангәрәев, Ноғман Мусин, Кәтибә Кинйәбулатова, Гөлфиә Юнысова, Рауил Бикбай, Наил Ғәйетбай, Флорид Бүләков һ.б. әҫәрҙәре башҡорт әҙәбиәте үҫешенә үҙ өлөшөн индерҙе.

**Инеш.** Туған әҙәбиәт – халыҡтың милли теле – башҡорт теле – нәфис әҙәбиәт теле кеүек төшөнсәләрҙе асыҡлау. Телдән (яҙыу үҫешкәнгә тиклем) йәки яҙма рәүештә һүҙ ярҙамында тормошто сағылдырыусы сәнғәттең бер төрө булараҡ нәфис әҙәбиәт. Әҙәби әҫәр үҙәгендә кеше образы тороуы, ижтимағи үҫеш процесында уның матди һәм рухи тормошо. Борон, кешеләр яҙыу танымағанда, ижад телдән үҫешкәндә – Башҡорт халыҡ ижадын, фольклорҙы таратыусы кешеләр булыуы, уларҙы сәсән исеме менән атауҙары. Яҙыу барлыҡҡа килеү менән яҙыусыларҙың да барлыҡҡа килеүе.

Нәфис әҙәбиәттән тыш, үҫемлектәр, хайуандар донъяһы, тарихи ваҡиғалар, фәнни асыштар тураһында һөйләүсе фәнни-популяр китаптар булыуы.

Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гимны менән таныштыу.

**Ризаитдин Фәхретдинов (1859–1936)**. Автор ижады хаҡында төп информация. Мәғрифәтсе, яҙыусы-ғалим, тарихсы, шәрҡиәтсе, дин әһеле һәм йәмәғәт эшмәкәре. Нәсихәттәр, «Белем».

**Мәжит Ғафури (1880–1934)**. Автор ижады хаҡында төп информация. Башҡорт АССР-ның халыҡ шағиры (1923), совет башҡорт һәм татар әҙәбитәттәре, поэзияһы классигы, фольклорсы, драматург. «Нурлы мәктәп» шиғыры.

**Рәшит Ниғмәти (1909–1959)**. Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡорт АССР-ның Халыҡ шағиры (1959), башҡорт совет балалар яҙыусыһы, драматург, тәржемәсе. «Хәйерле юл һеҙгә!» шиғыры.

Кеше тормошонда белемдең роле. Мәктәптә белем биреү һәм хеҙмәт тәрбиәһе темаһына мөрәжәғәт итеү. Яңы белемдәрҙе яҡты киләсәк менән арттырыу. Шиғырҙарҙа мәктәп һәм укытыусы образы. Йәйге каникулдар һәм əҫәрҙәрҙә уҡыуҙың беренсе көнөнөң һүрәтләнеше. Ватанға мөхәббәт темаһы, уҡыу һәм хеҙмәт темаһы.

*Әҙәбиәт теорияһы: лирик герой.*

**Раил Байбулатов (1937-2002).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡорт яҙыусыһы, тәржемәсе, драматург һәм журналист. «Ағас һәйкәл» хикәйәһе.

Дуҫлыҡ һәм үҙ-ара мөнәсәбәт темаһы. Донъяға ике ҡараш: битарафлыҡ, йөрәкһеҙлек һәм гуманизм, изгелек, хикәйәнең йәш геройҙарының йәлләү хисе. Ғаиләлә балалар тәрбиәләү. Балаларҙың һәм ололарҙың үҙ-ара бәйләнешенең ҡатмарлылығы. Хәҙерге тормоштоң актуаль проблемалары. Геройҙың хистәрен күрһәтеү, үҙ эшенде анализлау. Авторҙың кеше тормошонда белем һәм тәрбиә роле тураһындағы уйҙары. Хикәйә темаһы, сюжет, идея мәғәнәһе. Хикәйә исеменең мәғәнәһе.

**Мостай Кәрим (1919-2005).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡорт АССР-ның халыҡ шағиры (1963), яҙыусы һәм драматург, йәмәғәт эшмәкәре. «Уҡытыусыма» шиғыры.

**Назар Нәжми (1918-1999).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡортстан Республикаһының халыҡ шағиры (1992), публицист, драматург, мемуарист. «Беренсе дәрес» шиғыры.

Шәхес формалашыуҙа һәм үҫешендә тәүге уҡытыусының роле, беренсе дәрестең әһәмиәте. Белем, хөрмәт, яҡындарыңа мөхәббәт, мәңгелек ҡиммәттәр, әхлаҡи төшөнсәләр һәм оло тормошҡа аяҡ баҫырға ярҙам иткәндә уҡытыусылар күңеленең бер өлөшөн һалыуҙары өсөн шағирҙарҙың рәхмәт темаһы.

**Дауыт Юлтый (1893-1938).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡорт совет яҙыусыһы, драматург, журналист һәм йәмәғәт эшмәкәре. «Көҙ» шиғыры.

**Ғилемдар Рамазанов (1923-1993).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡорт совет шағиры, әҙәбиәт белгесе, тәржемәсе, филология фәндәре докторы. «Ураҡ өҫтө» шиғыры.

Тәбиғәттең матурлығы, ҡышҡа әҙерлек. Тәбиғәтте тасуирлау: төрлө төҫтәр берлеге, алтын япраҡтарҙың ғәжәйеп балҡыуы, көҙгө күктең һоро төҫ менән алмашыныуы, ҡурғаш

ямғыр болоттары. Төнгө тынлыҡҡа иҫәбенә ҡыҫҡарыусы көн. Йылдың һәр миҙгеленең матурлығын сағылдырыу.

Игенсенең маҡтаулы һәм яуаплы хеҙмәте темаһы. Урып-йыйыу шатлығын тасуирлау. Кеше тормошонда икмәктең роле һәм урыны. Игенсенең хеҙмәтен поэтикалаштырыу.

*Әҙәбиәт теорияһы:* сағыштырыу.

**Али Карнай (1904-1943).** Яҙыусы хаҡында ҡыҫҡаса хикәйә. Башҡорт яҙыусыһы һәм тәржемәсеһе, журналист, хәрби корреспондент. «Урманда» повесы. «Турғай» хикәйәһе.

Әҫәрҙәрҙә тәбиғәт образы. Тәбиғәт картиналарын тасуирлау аша авторҙың күңел торошон, кәйефен белдереү. Яҙыусының тәбиғәтте ҡабул итеүҙәге дөйөм һәм шәхси ҡарашы. Йөкмәткелә аллегория. Образдар, әҫәрҙәрҙең художестволы, персонаждарҙың характер үҙенсәлектәре. Йылан, Турғай һәм Ҡарға образдарында яҡшылыҡ һәм яуызлыҡ, мөхәббәт һәм нәфрәт, бер-береңә ярҙам итеү һәм көнләшеү, мәкерле һәм яҡты уйҙарҙың сағылышы. Тәбиғәттә, кеше күңелендәге матурлыҡтың ҙур ролен аңлау. Яҙыусының кеше һәм тәбиғәт бәйләнеше, уларҙың айырылғыһыҙлығы тураһында уйланыуҙары. Авторҙың художестволы образлылығының үҙенсәлектәре.

*Әҙәбиәт теорияһы: тасуирлау, аллегория.*

## Башҡорт совет әҙәбиәте. Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте

**Баязит Бикбай (1909-1968).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡорт шағиры, прозаик, драматург, либреттист. «Туған тел» шиғыры. «Рус теле» шиғыры.

Кеше һәм йәмғиәт тормошонда туған тел һәм рус телдәренең роле һәм әһәмиәте, уларҙың функциялары – социум йәшәйешенең мөһим яғы. Тел – рухи һәм мәҙәни ҡиммәттәрҙе һаҡлаусы. Күренекле кешеләрҙең һүҙҙәрен килтереү һәм уларҙы шәхси байлыҡтан йәмғиәттең рухи байлығына әйләндереү. Милләт-ара аралашыу теле аша төрлө халыҡтарҙың үҙ-ара аңлашыуына ирешеү.

**Рәми Ғарипов (1932-1977).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡортостан Республикаһының халыҡ шағиры (1992), тәржемәсе. «Туған тел» шиғиры.

**Ҡәҙим Аралбай (1941).** Башҡортостан Республикаһының халыҡ шағиры (2011). Авторҙың тормошо һәм ижады. «Башҡорт теле» шиғыры.

Туған телебеҙҙең матурлығы һәм байлығы. Туған телгә хөрмәт һәм мөхәббәт. Йәмғиәт тормошонда, уҡыусыларҙың шәхесен формалаштырыуҙа, рухи байлыҡҡа, мәҙәниәткә йәлеп итеүҙә телдең роле.

**Фәрзәнә Аҡбулатова (1960).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡорт яҙыусыһы, журналист. «Атай икмәге» хикәйәһе.

XX быуаттағы тормош-көнкүреш картиналары, уларҙың характерҙарҙы һәм хикәйә идеяларын аңлау өсөн әһәмиәте. Әҫәрҙең реалистик нигеҙе. Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында тылдағы балаларҙың һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауыр яҙмышы, уларҙың хыялдарын хикәйәләү. Изгелек, үҙ-ара аңлашыу идеяһы. Балалар һәм ололар мөнәсәбәттәре. Хикәйә геройҙарының рухи байлығы. Хикәйәлә балалар образы һәм уларҙы һүрәтләү үҙенсәлектәре. Кескәй геройҙарҙың сабырлығы һәм сыҙамлылығы. Балаларҙың эске, рухи матурлыҡ көсө. Хәл-ваҡиғаларға авторҙың мөнәсәбәте – авторҙың балалар яҙмышы өсөн ғазаптары. Кешегә ҡарата ҡыҙғаныу һәм хөрмәт кәрәклеген аңлау. Балаларҙы йәлләү хисе. Һәр бер кеше шәхесенең ҡабатланмаҫлығы һәм ҡиммәте. Хикәйәнең гуманистик пафосы һәм унының исеменең мәғәнәһе.

**Хәйҙәр Тапаҡов (1955).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Шағир, яҙыусы, публицист. «Бибинур «улусяй»» хикәйәһе.

Хәҙерге ҡала тормошо. Ата-әсәләрҙе ауылдан ҡалаға күсереү. Быуындар бәйләнеше. Аталар һәм балалар проблемаһы. Туған телдең роле. Милли традицияларҙан һәм гөрөф-ғәҙәттәрҙән ситләшеү проблемаһы.

**Ризаитдин Фәхретдинов (1859-1936).** Автор биографияһы тураһында төп мәғлүмәт. Сығышы. Үҫеш йылдары. Тәүге Өфө осоро. Ырымбур осоро. Икенсе Өфө осоро. «Китап һәм уҡыу» «Нәсихәттәр» китабынан өҙөк.

**Мәжит Ғафури (1880-1934).** Автор биографияһы тураһында төп мәғлүмәт. «Балалар һәм китап» шиғыры.

**Яҡуп Ҡолмой (1918-1994).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Шағир һәм журналист. «Ҡыҙыҡлы китап» шиғыры.

**Нәжип Иҙелбаев (1912-1991).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Шағир, яҙыусы, драматург, тәржемәсе һәм журналист. «Иң яҡын дуҫ» шиғыры.

Китапның бала тормошондағы роле. Китаптың баланың донъя тураһындағы ҡарашын киңәйтеү өсөн хеҙмәт итеүе. Китап – мәғлүмәт сығанағы һәм кешенең дуҫы.

**Динис Бүләков (1944-1995).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡорт яҙыусыһы һәм йәмәғәт эшмәкәре. «Яралы китап» хикәйәһе.

Халыҡтар берҙәмлеген хикәйәләү һәм Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында Ватанды азат итеү өсөн көрәш. Совет халҡының патриотизмы һәм рухи көсө. Әҫәрҙең идея-художестволы мәғәнәһе, реалистик үзенсәлектәр, әҫәрҙең структураһы.

**Башҡорт халыҡ ижады**

Башҡорт әҙәбиәтенең килеп сығышы халыҡ ижадынан башлана. Башҡорт фольклоры быуаттар дауамында телдән ижад ителә һәм быуындан-быуынға тапшырыла килә.

Боронғо башҡорттарҙың тәбиғәткә ҡараштары, әхлаҡи идеалдары, уларҙың тормошо һәм ынтылыштары башҡорт фольклоры темаларын тәшкил итә. Фольклор уларҙың белем сығанағы

була. Фольклорҙың үҙенсәлеген уның тапшырылыуының телдән һәм күп вариантлы булыуы, импровизациялылығы һәм коллектив башҡарылыуы тәшкил итә.

Башҡорт фольклор жанрҙары булып эпос, әкиәт, йыр, риүәйәт, легенда, бәйет, көләмәс, лаҡап, мәҫәл, мәҡәл, әйтем, йомаҡ, көләмәс-табышмаҡ, сатира, ғибрәтле хикәйәт, һынамыш, нәсихәт һ. б. тора.

Башҡорт халыҡ эпосы тәү-тормош община ҡоролошоноң емерелеү осоронда барлыкка килә һәм феодализм дәүерендә, сит ил баҫып алыусылары алдында ырыу төркөмдәренең тарҡатылған һәм эре ырыу-ҡәбилә ойошмаларына берләшеү осоронда иң бейек үҫешенә ирешә. Башҡорт халыҡ эпосының иң камил героик поэма формаларының берһе булып ҡобайыр тора.

**«Урал батыр» эпосы**

Башҡорт милли эпосы «Урал Батыр» – халыҡтың бөтмәҫ-төкәнмәҫ байлығы. Эпос геройының физәкәрлеге һәм юғары выжданлылығы, уның донъя үҫешенә баһалап бөтөргөһөҙ өлөшө. Халыҡ бәхете өсөн көрәш идеяһын раҫлау. Эпостың әхлаҡ проблемаһы. Эпоста яҡшылыҡ һәм яуызлыҡтың көрәше. Ике бер туған Урал һәм Шулгәнгә сағыштырма характеристика. Геройлыҡ тураһында халыҡ күҙаллауы. Патриотик һәм гуманистик мәғәнә.

Шиғыр үзенсәлектәре һәм ритмикаһы. Тарихи һәм мифологик нигеҙ. Әкиәт деталдәренең роле.

*Әҙәбиәт теорияһы:* эпос.

**Башҡорт халыҡ әкиәттәре**

«Урал батыр», «Аҡъял батыр», «Алпамыша батыр», «Ҡамыр-батыр». Батыр образы символикаһы. Ҡамыр батыр, Алпамыша батыр һәм уның дуҫтары. Әкиәттә һынау темаһы. Үҙ бәхетең һәм халҡың бәхете өсөн көрәш идеяһын раҫлау. Әкиәттәрҙең әхлаҡи проблемаһы.

«Аҙашҡан» сюжеттар. Әкиәт геройы һәм уның төрҙәре. Тылсымлы ярҙамсы һәм тылсымлы әйберҙәр, уларҙың тылсымлы әкиәттәрҙәге роле. Әкиәттәр теле. Фольклор әкиәтендә сәсән образы.

*Әҙәбиәт теорияһы:* композиция, сюжет (танышыу).

«Әминбәк» әкиәте. Төрлө һөнәрҙәр барлығы тураһында. Хеҙмәттең кеше тормошондағы әһәмиәте. Ата-әсәләрҙең улдарының һөнәр һайлауындағы роле һәм теләге. Әминбәктең фән һәм сәнғәт юлын һайлауы. Төрлө һөнәр эйәләренә хөрмәтле һәм изгелекле ҡараш тәрбиәләү.

*Әҙәбиәт теорияһы*: синонимнар, омонимнар.

«Ҡәмән менән Сәмән, картуф сәскән Сәлмән» әкиәте – өс бер туғанға сағыштырма характеристика Хеҙмәттең әһәмиәте тураһында халыҡ күҙаллауы. Халыҡҡа хеҙмәткә баһаһы. Әкиәттәрҙең әхлаҡи проблемаһы. «Өс» һаны – башҡорт фольклорының үҙгәрешһеҙ атрибуты.

«Айыу менән бал ҡорттары» әкиәте. Айыу менән кешенең бал ҡорттарына мөнәсәбәтен сағыштырыу. Ауыр минуттарҙа бер-береңә терәк булыу һәм ярҙам итеү. Изгелек һәм ғәҙеллек. Кешенең бал ҡорттарын ҡулға эйәләштереүе. Тәбиғәтте һаҡлау.

**Башҡорт халыҡ ижадының бәләкәй жанрҙары**

**Мәҡәлдәр. Әйтемдәр**

Фольклорҙың бәләкәй жанрҙарының төрлөлөгө. Иң популяр фольклор жанрҙары буларак мәҡәл, әйтем, йомаҡ. Тематиканың байлығы һәм төрлөлөлөгө, мәҡәлдәр һәм әйтемдәрҙе телмәргә һәм художестволы текст әҫәрҙәренә индереү формалары һәм алымдары. Мәҡәлдәр фекер тамамланыуы йәһәтенән, һөйләмдә роле буйынса әйтемдәрҙән айырмалы булыуы. Башҡа фольклор жанрҙары менән бәйләнеш. Телмәрҙе фольклорҙың бәләкәй формалары менән даими байытыу процессы. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр темаһы. Мәҡәлдәрҙең һәм әйтемдәрҙең афористик һәм хикәйәләү характерлы булыуы. Әйтемдәр. Образлы уйҙар. Йомаҡтарҙың метафора, һүҙ уйынының төрө булыуы.

*Әҙәбиәт теорияһы:* әҙәби төшөнсәләр һәм терминдар: мәҡәл, әйтем, афоризм; мәҡәлдәрҙең, әйтемдәрҙең төп жанр үҙенсәлектәрен билдәләү.

Йомаҡ

Йомаҡ – фольклорҙың бер жанры һәм зирәклекте, отҡортлоҡто билдәләүсе иң боронғо «текст» формаһы булараҡ. Йомаҡтар уйлап табыу процессының үҙенсәлектәре; фольклорҙа һәм хәҙерге әҙәбиәттә метафораның роле һәм йомаҡтарҙың урыны. Йомаҡ структураһының үҙенсәлектәре. Йомаҡ ҡойоу, яуабын табыу.

*Әҙәбиәт теорияһы:* метафора.

**Башҡорт халыҡ йырҙары. Таҡмаҡтар**

Музыкаль-һүҙ сәнғәте формаһы булараҡ йыр. Халыҡ йырҙарының төрҙәре, уларҙың темалары. Такмаҡ йыр фольклорының бер төрө булараҡ. Йыр һәм таҡмаҡтарҙа шиғыр һәм көй. Был жанрҙарҙың популярлығының сәбәптәре.

*Әҙәбиәт теорияһы:* шиғыр мелодикаһы.

**XI – XVIII быуат башкорт әҙәбиәте.**

Башҡорттарҙың яҙма әҙәбиәте, күпселек төрки халыҡтарҙыҡы кеүек үк, VII-VIII быуаттарҙа яҙылған Орхон-Йәнәсәй дастандарынан (поэма) башлана, улар ҡаяларҙа һәм айырым таштарҙа яҙылған, I һәм II Төрки Ҡағанаттарҙың, шулай ук Тонйуҡуҡ, Күлтәгин һәм Билге ҡағандар тарихын данлай. Был осорға төрки халыҡтары өсөн уртаҡ булған VII-XI быуаттарҙа ижад ителгән Йософ Баласағуниҙың «Котаҙғу белек», Мәхмүт Ҡашғариҙың «Диуану лөғәт әт-төрк», Әхмәт Йүгнәкиҙең «Һибатул хаҡаик» тигән әҙәби әҫәрҙәре ҡарай. Был шиғри традицияларҙың башланғысы, килеп сығышы. «Уғыҙнамә», «Алпамыша» һ.б. эпик

әҫәрҙәре беҙҙең эраның беренсе мең йыллығында башҡорт халҡының үҙенсәлекле мәҙәниәтен сағылдыра.

Болғар осоро башҡорт әҙәбиәте (XII – XIII быуат уртаһы). Иҙел буйы Болғар дәүләтенең алға киткән мәҙәниәте Урал-Волга буйы әҙәбиәтенә ҙур йоғонто яһай. Тәуарих, ҡисса, дастан, риүәйәт, хикәйәт һ.б. жанрында әҫәрҙәр, шулай уҡ Ҡол Ғәлиҙең «Ҡиссаи Йософ» поэмаһы ижад ителә. Башҡорт хикәйәте «Зөһрә һәм Алдар» шул осорҙоң башҡорт-болғар бәйләнештәрен сағылдыра. «Бошман Ҡыпсаҡ», «Аҡман-Тоҡман» һәм башҡа бер нисә эпик ҡомартҡы башҡорттарҙың Алтын Урҙа баҫып алыусыларына ҡаршы көрәшенә бағышланған.

Ҡыпсаҡ осоро башҡорт әҙәбиәте (XIII быуат уртаһы – XVI быуаттың беренсе яртыһы). Ҡайһы бер ғалимдар был осорҙо ике этапҡа бүләләр: XIII быуаттың икенсе яртыһы һәм тулыһынса XIV быуат. XV быуат һәм XVI быуаттың беренсе яртыһы башҡорт әҙәбиәтенең нуғай осоро тип билдәләнелә.

Бында милли әҙәбиәттең һәм дөйөм төрки әҙәби ағымың аҡырынлап айырылыуы, башҡорттарҙың телдән һәм яҙма әҙәбиәтенең үҫеү һәм үҙ-ара бәйләнеш үҙенсәлектәре, жанрҙарҙың ҡушылыуы һәм поэтик формаларҙың формалаштырыуы күҙәтелә.

Был осрҙа башҡорт әҙәбиәтендә танылған йыраузар Һабрау, Асан-Ҡайғы, Ҡаҙтуған, Шалғыйыҙ ижады, «Иҙеүкәй менән Мораҙым», «Мәргән менән Маянһылыу» ҡобайырҙары, «Һуңғы Һартай» риүәйәте, суфыйҙар ижады, тәуарих, ҡисса, ғәзәл, робағи жанрындағы әҫәрҙәр урын алған.

Төрки әҙәбиәте классикаһы булған күп кенә эпик ҡомартҡылар (Ҡотбтың «Хөсрәү һәм Ширин», Харәзмиҙең «Мөхәббәтнамә», Хөсәм Кәтибтең «Жөмжөмә Солтан», Сәйф Сараиҙың «Гөлстан бит-төрки» һәм «Сөһәйл вә Гөлдерсен» һ. б. поэмалары) XIII – XVI быуаттарҙағы башҡорт әҙәби фекер үҫешенә шаҡтай ныҡ йоғонто яһаған.

Россия осоро башҡорт әҙәбиәте (XVI быуат уртаһы – XVIII быуат). Башҡорттарҙың XVI быуат урталарында үҙ ихтияры менән Рус дәүләтенә ирекле ҡушылыуы халыҡтың социаль һәм мәҙәни тормошонда һынылышлы мөһим этап булып тора. Башҡорт әҙәби фекеренең үҙгәреүе, унын демократик була барыуы.

Башҡорт сәсәндәре беренселәрҙән булып үҙ әҫәрҙәрендә – ҡобайырҙарҙа Рәсәйгә ҡушылыуҙы сағылдырыуы һәм башҡорт халҡының дөрөҫ тарихи ҡарарын данлауы. Артабан сәсәндәреҙең ижады был осорҙоң бөтә башҡорт әҙәби фекерен үҫтереүҙә баһалап бөтөргөһөҙ роль уйнауы. Ҡобағош, Ҡарас, Ерәнсә, Байыҡ Айҙар сәсәндәр әҫәрҙәре менән генә түгел, ә аҡыл эйәләре, халыҡ фәйләсуфтары, педагогтар, тарихсылар һәм башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадын һаҡлаусылар булараҡ та билдәле булыуы.

Башҡорт шәжәрәләре нәҫел-нәсәп яҙмаһы ғына түгел, әҙәби әҫәр рәүешенә лә эйә. Уларҙың, нигеҙҙә, башҡорт ерендә барған ваҡиғаларҙы, халыҡ тормошондағы боролошло

тарихи миҙгелдәрҙе сағылдырыуы, ул осорҙоң төрлө жанрҙарында батырҙарҙың ҡаһарманлығын данлауы. Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһе прозаик эпос формаһында, Үҫәргән ырыуыныҡы – шиғри формала, ҡобайыр стилендә, Ялан Бөрйән ырыуы шәжәрәһе хат стилендә яҙылған булыуы һ.б.

Был әҙәби осорҙоң айырылғыһыҙ өлөшө – тәуарих һәм хикәйәт. Әлеге жанрҙар үҙҙәренең башланғыстарын урта быуаттарҙан уҡ алыуы, ләкин бында улар ерле мотивтар һәм милли үҙенсәлектәр менән һуғарылыуы.

Сәйәхәтнамә һәм хажнамәнең әҙәби фекерҙе үҫтереүҙә айырым роль уйнауы. Уларҙың күбеһенсә Мәккәгә хажға барғанда йәки сауҙагәрҙәрҙең төрлө илдәргә сәйәхәте ваҡытында яҙылыуы. Беҙгә килеп еткән беренсе башҡорт сәйәхәтнамәһе XVIII быуат аҙағына ҡарай. Иң күләмле һәм иң әһәмиәтле сәйәхәтнамә – Исмәғил сауҙагәр яҙған «Исмәғил аға сәйәхәте», ул 1751 йылдан алып 30 йыл дауамында күп илдәр буйлап сәйәхәт иткән һәм тыуған яғына ҡайтҡан.

XVII быуаттан алып публицистик жанрҙарҙың үҫә башлауы. Башҡорттарҙың Рус дәүләте батшаларына яҙған рәсми хаттары, ғариза, үтенес, шикәйәт, наказдары рәсми-эшлекле документтар булараҡ ҡына түгел, ә әҙәби-публицистик стилдәге әҫәрҙәр булараҡ та билдәле булыуы. Улар араһында бигерәк тә 1755-1756 йылдарҙағы башҡорт восстаниеһы идеологы Батыршаның хаты пафосы, социаль-тарихи йөкмәткеһе, документаллеге һәм нәфис һыҙаты менән айырылып тороуы.

Пугачев восстаниеһы осоронан күп һанлы рәсми-публицистик әҫәрҙәр килеп етеүе. Былар – башҡорт теленә тәржемә ителгән манифестар һәм Е. Пугачев ҡарарҙары, башҡорт восстаниеһы етәксеһе Салауат Юлаевтың халыҡ араһында таралған яҙма өндәмәләре, телмәрҙәре, көрәшкә саҡырыуҙары.

Ерле суфый шағир Ғәбдерәхим Усман Һәм Мәүлә Ҡолой ижадының бөтә Урал-Волга суфый әҙәбиәтен үҫтереүҙә ҙур роль уйнауы. Импровизатор шағир һәм башҡорт халҡының милли геройы Салауат Юлаев шиғриәте XVIII быуаттың иң яҡты лирикаһы булып тороуы. Шағир һәм ғалим Тажетдин Ялсығол әл-Башҡордиҙың XVIII быуат аҙағында башҡорт әҙәбиәте үҫешенә ҙур өлөш индереүе.

**Салауат Юлаев (1754-1800).** Биографияһы. Башҡорт милли геройы (батыр) һәм шағир-сәсән 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиән һуғышында ҡатнашыусы, Емельян Пугачевтың көрәштәше. «Ҡайтып киләм», «Яуҙа яраланғас...», «Йырҙарҙан» шиғырҙары... Идея һәм йөкмәткеһе. Дүрт юллыҡ йырҙар. Халык ижадында һәм әҙәбиәттә Салауат образы.

**Башкорт совет әҙәбиәте. Хәҙерге башкорт әҙәбиәте**

**Назар Нәжми (1918-1999).** Авторҙың тормошо һәм ижады. «Беренсе ҡар» шиғыры.

**Гөлфиә Юнысова (1948).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡортстан Республикаһының халыҡ шағиры (2015), тәржемәсе, драматург, журналист. «Ҡотло булһын Яңы йыл!» шиғыры.

**Сәрүәр Сурина (1957).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Шағирә, драматург, сценарист, журналист. «Ҡышты ҡаршылағанда» драмаһы.

**Хәсән Назар (1942).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡортстан Республикаһының халыҡ шағиры (2017), тәржемәсе, журналист. «Яуа ҡарҙар...» шиғыры.

Шиғри телмәр. Шиғырҙың лиризмы. Шиғыр ритмы. Тәбиғәткә күҙәтеүсән эстетик, оптимистик ҡараш. Кеше һәм тәбиғәт. Тарих һәм хәҙерге заман. Тәбиғәттең үҙгәреүсән, күренер-күренмәҫ күренештәренә мөрәжәғәт итеү.

Тәбиғәт тылсымын шағирҙарҙың эпитеттарҙы, юлдарҙы һәм сағыштырыуҙарҙы ҡулланып һүрәтләүе.

*Әҙәбиәт теорияһы:* троптар, эпитет, сағыштырыу, ритм.

**Рәми Ғарипов (1932-1977).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡортостан Республикаһының халыҡ шағиры (1992). «Башҡортостан» шиғыры.

**Ирек Кинйәбулатов (1938-2016).** Авторҙың тормошо һәм иҗады. Башҡорт шағиры һәм прозаик. «Дуҫлык төйәге» шиғыры.

**Рәшит Шәкүр (1937).** Башкортстан Республикаһының халыҡ шағиры (2021), ғалим-тюрколог, топонимист, публицист, филология фәннәре докторы, йәмәғәт эшмәкәре. Авторҙың тормошо һәм ижады. «Урал батыр иле – сал Урал» шиғыры.

**Кәтибә Кинйәбулатова (1920-2012).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Шағирә, прозаик, тәржемәсе. «Әсә күңеле» шиғыры.

Шиғырҙарҙың идея-тематик комплексы: тыуған Башҡортостан, сал Урал, әсә. Тыуған ер, тыуған ҡала һәм тыуған ауыл образдарының характеристикаһын төҙөү. Тыуған ергә мөхәббәт хисен һүрәтләү. Лирик герой образы. Әсә образының тыуған яҡтар менән бәйләнеше.

**Мостай Кәрим (1919-2005).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡорт АССР-ның Халыҡ шағиры (1963). «Өс таған» повесынан өҙөктәр.

Балалар тормошо һәм улар араһындағы дуҫлыкты һүрәтләү. Әҫәрҙең идеяһы һәм образдары. Балалар күҙлегенән тәбиғәтте һаҡлау проблемаһы.

## 6-сы класс

**Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте**

Инеш.

Башҡортостан Республикаһының Дәүләт флагы.

**Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина (1945).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Шағирә, яҙыусы, тәржемәсе. «Башҡортостан флагы» шиғыры.

**Сафуан Әлибаев (1941-2014).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡорт шағыры, балалар яҙыусыһы, тәржемәсе, журналист. «Мәктәп юлы» шиғыры.

**Ярулла Вәлиев (1921-1981).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡорт яҙыусыһы һәм журналист. «Беренсе көн» хикәйәһе.

**Яҡуп Ҡолмой.** «Мәктәп» шиғыры.

**Ризаитдин Фәхретдин.** «Мәктәп». «Нәсихәттәр» китабынан.

Шиғырҙың аң-белемгә, тәрбиәгә өндәүсе пафосы. Мәктәпкә юл – кеше тормошонда яуаплы этап. Мәктәптең яңы белем алыуҙағы роле тураһында идеяны кәүҙәләндереү.

**Ҡәҙим Аралбаев.** «Башҡорт ҡоролтайына» шиғыры.

**Рауил Бикбаев (1938-2019).** Башҡортостан Республикаһының халыҡ шағиры (1992), әҙәбиәт белгесе, филология фәндәре докторы һәм йәмәғәт эшмәкәре. «Халҡыма хат» поэмаһынан өҙөк.

**Зәйнәб Биишева (1908-1996).** Башҡорт АССР-ның халыҡ яҙыусыһы (1990), шағирә, драматург, тәржемәсе. «Башҡорт теле» шиғыры.

Телдең матурлығын, наҙлылығын, үҙенсәлеген поэтиклаштыра. Шағирҙарҙың тел үҙенсәлектәре. Халыҡтың мәҙәниәтен һәм гөрөф-ғәҙәттәрен шиғырҙарҙа сағылдырыу.

Туған тел – халыҡтың күп быуатлыҡ мираҫы. Башҡорт теленең күп төрлөлөгө, моңлолоғо һәм матурлығы. Лексиканың байлығы: фразеологизмдар һәм телмәр әйтелештәре, телдең бөйөклөгө һәм күп яҡлылығы.

**Динис Бүләков (1944-1995).** «Ҡара икмәк» хикәйәһе.

«Аҡбуҙ алышҡа сыға» китабынан балалар өсөн хикәйәләр һәм повестар. «Упҡын ситендә бейеү», «Саған япраҡ яңырта», «Эҫе ҡар». Балалар тормошон һүрәтләү. Үҫеп килеүсе быуындың әхлаҡи-этик үҙбилдәләнеше, үҙ урынын табыу проблемаһы. Ынтылыштарына характеристика, йәштәрҙең индивидуаль сифаттары, телмәр үҙенсәлеге. Д. Бүләковтың психологик оҫталығы.

**Гөлфиә Юнысова (1948).** «Ер улына», «Талы бөгөлөп тора» шиғырҙары.

**Фәниә Чанышева (1926-2018).** «Икмәк еҫе» шиғыры.

Уйланыуға ҡоролған шиғырҙар. Ауыл көнкүрешен һәм тормошто һүрәтләү. Икмәк хаҡында борсолоу һәм тирә-йүнгә мөнәсәбәт, ысынбарлыҡты тойоу хистәрен белдереү. Игенсенең хеҙмәтенә хөрмәт һәм мөхәббәт хистәре. Үткән һәм хәҙерге менән бәйләнеш. Лирик геройҙың эмоциональ торошон күрһәтеүсе һүрәтләү саралары.

*Әҙәбиәт теорияһы:* тасуирлау, һүрәтләү, хикәйәләү.

**Әнүр Вахитов (1932-1984).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Яҙыусы, шағир, әҙәбиәт белгесе, филология фәндәре кандидаты, тәржемәсе. «Өс бөртөк бойҙай», «Ир ҡанаты» хикәйәләре. Икмәккә ҡарата хөрмәт хистәре, балаларҙың Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы һәр бөртөккә һаҡсыл мөнәсәбәте. Икмәктең кеше тормошондағы мөһимлеген аңлау. Һуғыштан һуң кешеләрҙең изгелекле булыуын тасуирлау.

*Әҙәбиәт теорияһы: хикәйә жанры:* художестволы үҙенсәлектәре, хикәйә билдәләре.

**Халыҡтың ауыҙ-тел ижады– хәҙерге башҡорт әҙәбиәте**

**«Урал батыр»,**әкиәте. **«Кариҙел»** легендаһы.

Жанр булараҡ халыҡ әкиәте. Фольклор әкиәттәренең классификацияһы. Әкиәттең художестволы донъяһын булдырыуҙа художестволы шартлылыҡ һәм фантастиканың әһәмиәте.

Башҡорт халҡының героик һыҙаттарының әкиәттәрҙә һынланышы. Урал батыр – кешенең иң яҡшы сифаттарын туплаусы (хеҙмәт һөйөүсәнлек, кешелеклелек, йомартлыҡ, физик көс). Ватанға һәм халыҡҡа фиҙәкәр хеҙмәт итеү, батырлыҡ, гәҙеллек, үҙ-үҙеңде хөрмәт итеү – батыр характерының төп һыҙаттары.

*Әҙәбиәт теорияһы:* тылсымлы әкиәттәр, гипербола, даими эпитеттар, легенда.

**Бәйеттәр**

Халыҡ ижадының бер төрө булыу йәһәтенән бәйет. Темаһы һәм тарихи ерлеге. Бәйеттәрҙең үҙенсәлектәре. Поэтиклығы. Тематик айырмаһы. Бәйет шиғырының үҙенсәлеге. Бәйеттәрҙе яҙып алыу, башҡа жанрҙар кеүек, импровизация юлы менән сығарылыуы. «Герман һуғышы бәйеттәре», «Мәскәүҙән киттек, Берлинға еттек», «Дон далаларында» бәйеттәре.

бәйеттәр, архаизмдар, варваризмдар, диалетизмдар; таҡмаҡтар, *Әҙәбиәт теорияһы:* неологизмдар.

**Таҡмаҡ**

«Егеттәр». Бөйөк Ватан һуғышында башҡорт егеттәренең батырлығы.

**Көләмәс**

Фольклорҙың бәләкәй жанрҙарының береһе булараҡ көләмәс. Телмәрҙә һәм әҙәбиәттә көләмәстең популярлығы.

Төрлө жанрҙарны берләштергән әҫәрҙәр ижад итеүҙең сәбәптәре: әкиәт-йомаҡ, әкиәт-көләмәс.

**Ҡол Ғәли.** «Йософтоң матурлығы». Ҡиссанан өҙөк. Шәжәрә «Табын ҡәбиләһенең Ҡара Табын ырыуы шәжәрәһе». Шәжәрә тураһында.

Йәмғиәттең ғәҙеллеген эҙләү. Саф, эскерһеҙ мөхәббәт. Яҡшылыҡ һәм яуызлыҡ көрәшенең бөтә кешелек өсөн уртаҡ, гуманистик идеялары. Ваҡиғаларҙы дини-дидактик күҙлектән аңлатыу. Традицион сюжет. Образлылыҡтың тотороҡло формалары.

*Әҙәбиәт теорияһы:* Шәжәрә.

**Шәйехзада Бабич (1895-1919).** Ш. Бабичтың ижади юлы. Башҡорт әҙәбиәтендә Ш. Бабичтың урыны.Шиғриәтенең үҙенсәлектәре: халыҡсанлыҡ, ябайлыҡ, шиғырҙары төҙөлөшөнөң еңеллеге.

**Зәйнәб Биишева.** «Башҡортостан» шиғыры.

**Назар Нәжми.** «Башҡортостан» шиғыры.

Шиғырҙарҙың гражданлыҡ пафосы. Шағирҙарҙың Ватанға мөхәббәте һәм республика өсөн ғорурлығы. Ш. Бабич традицияларына нигеҙләнеү. Тыуған ерҙең матди һәм рухи байлыҡтарына айырым ҡараш.

**Башҡорт совет әҙәбиәте. Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте**

**Нәжип Иҙелбаев.** «Салауат ташы» хикәйәһе.

Салауат Юлаев образының фольклор һәм шиғри нигеҙе. Хикәйәлә ҡуйылма мотивтарҙың һәм фольклор жанры элементтарының роле.

**Жәлил Кейекбаев (1911-1968).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Яҙыусы, совет лингвист-тюркологы, филология фәндәре докторы. Урал тураһында ҡобайыр.

Ж .Кейекбаев ижадында ҡобайыр жанры. Жанр структураһының үҙенсәлеге. Уның фольклор һәм әҙәби традициялар менән бәйләнеше. Авторлыҡ позицияһында патриотик аспект һәм лирик символика.

**Салауат Юлаев.** «Юлай менән Салауат» эпосы (өҙөк).

«Юлай менән Салауат» эпосында халыҡ хәтере. Киң эпик фонда ваҡиғаларҙың һәм образдарҙың дөйөмләштерелгән образы. Тарихи фон, ваҡиғалар һәм образдарҙы реалистик һүрәтләү күпселекте тәшкил итә. Пугачев етәкселегендәге яйыҡ казактарының ихтилалы һәм уның манифесы, Салауаттың Пугачевҡа ҡушылыуы; баш күтәреүселәрҙең яза биреү отрядтары менән һуғышы; Салауатты ҡулға алыу, язалау һәм мәңгелек һөргөнгә оҙатыу. Рус һәм башҡорт халҡының батша хөкүмәтенә, социаль һәм милли иҙеүгә ҡаршы бергәләп көрәшеүе.

**Мирас Иҙелбаев (1945).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Яҙыусы, филология фәндәре докторы. «Төш» повесы (өҙөк). Тарихи-документаль эссе жанры. Фәнни тикшеренеүҙәрҙең, авторҙың уйланыуҙарының роле, уларҙың эске бәйләнеше һәм башҡа художестволы компоненттар менән үҙ-ара йоғонтоһо. Бәләкәй Салауат, уның атаһының образы, уларҙың ҡатмарлылығы һәм күп яҡлылығы, социаль-әхлаҡи мәғәнәһе. Художество деталдәренең роле. Гөлсафияның төшө, уның функцияһы һәм символик мәғәнәһе.

*Әҙәбиәт теорияһы:* художестволы образ төшөнсәһе.

**Рәми Ғарипов.** «Салауат батыр», «Әсәм ҡулдары» тигән шиғырҙары.

Шағирҙың биографияһы. Туған тел матурлығын данлау, туған телгә ҡарата ихтирам тәрбиәләү. Тыуған ергә, тәбиғәткә, әсәйгә, тыуған халҡына, тарихына ҡарата һөйөү.

**Кәтибә Кинйәбулатова**. «Уҡытыусым» шиғыры.

**Лира Яҡшыбаева (1947).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. «Уҡытыусы – ул белем биреүсе лә, икенсе әсәй ҙә...» хикәйәһе. Хикәйәнең мораль-әхлаҡи проблемаһы. Ғаилә конфликты. Иғтибар уҡытыусы образына йүнәлтелгән. Уҡытыусының әхлаҡи ныҡлығы һәм күңел матурлығы, уның ҡыҙҙың тормошондағы роле.

**Рауил Шаммас (1930).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Башҡортостан Республиканың халыҡ шағиры (1921). «Уҡытыусыға» тигән шиғыр.

**Фәрит Иҫәнғолов (1928-1983).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. «Уҡытыусы Ғүмәров» хикәйәһе. Йәш уҡытыусының эшмәкәрлеге. Балалар менән эшләү теләге ҙур. Уҡыу йылы башына тиклем бәйләнеште яйға һалыуы. Буласаҡ синыфына иғтибарлы мөнәсәбәт. Уҡыусыларҙың проблемалары менән танышыу. Уҡыусыларға ихтирам күрһәтеү.

**Башҡорт совет әҙәбиәте. Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте**

**Ҡадир Даян (1910-1975).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Драматург, шағир, яҙыусы. «Шайморатов генерал» шиғыры. Легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры образы. Тыуған илгә һөйөү тойғоһо, ҡаты һынауҙарҙа уның өсөн яуаплылыҡ.

**Әнүәр Бикчәнтәев (1913-1989).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Башҡорт совет яҙыусыһы һәм сценарист. «Бөркөт һауала үлә» повесы (өҙөк). Повестағы реалистик тенденция. Образдар системаһы. Өфө балалар колонияһында үҫмерҙең ҡатмарлы, ҡапма-ҡаршы тормош осоро. Геройҙың эске донъяһының характер үҙенсәлектәре һәм эволюцияһы. Киҫкен ғәҙеллек, ил өсөн ҙур һынауҙар йылдарында тәрән илһөйәрлек тойғоһо. Геройҙың Бөйөк Ватан һуғышындағы батырлығы.

**Рәүеф Насиров (1935-2014).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Яҙыусы, журналист. «Ил балаһы Шакирйән» повесынан өҙөк. Р. Насиров әҙәбиәт тарихсыһы булараҡ. Тарихи дөрөҫлөккә иғтибарҙың көсәйеүе. Повестағы реалистик тенденция. А. Матросовтың яҙмышы. 1924 йылдың 5 февралендәге Учалы ҡала Советының загсында Шакирйән Юныс улы Мөхәмәтйәновтың тыуыуы тураһында яҙма. Архивтағы Шакирйәндең балалар фотоһы. СССР Юстиция министрлығының Бөтә Союз суд экспертизалары ғилми-тикшеренеү институтының һығымтаһы. Ауылдаштарының хәтирәләре һәм раҫлауҙары. Геройҙың эске, рухи көсө матурлығы. Уның тормошона бәйле ваҡиғалар, характер үҙенсәлектәре.

## 7-се класс

**Халыҡтың ауыҙ-тел ижады – хәҙерге башҡорт әҙәбиәте**

**Ирек Кинйәбулатов.** «Ҙур ышаныс Һеҙгә, Уҡытыусы!» шиғыры.

Төп тема – ил үҫешендә укытыусының роле, йәмғиәттә укытыусыларға һәм мәғариф эшенә ихтирам күрһәтеү. Уҡытыусының төплө белеме һәм өлгөлө әхлаҡи сифаттары.

**Әмир Әминев (1953).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Яҙыусы, публицист. «Инша» хикәйәһе. Геройҙың үҙенсәлектәре – ауыл малайының тирә-яҡ мөхитте аңлауы. Малайҙың тыуған тәбиғәте тураһында тәүге ижади шиғырҙары. Тәбиғәт күренештәрен тасуирлау аша кешенең рухи кәйефен, хәл-торошон сағылдырыу. Геройҙың юғары әхлаҡи, рухи камиллығы сығанаҡтары.

**Рәми Ғарипов.** «Тел» шиғыры.

**Рәсүл Ғамзатов (1923-2003).** «Туған тел» шиғыры (башҡорт теленә Рәми Ғарипов тәржемәһендә). Туған телгә һөйөү тойғоһон сағылдырыу. Унның байлығы һәм матурлығы тураһында. Туған тел – кешенең рухи таянысы. *Әҙәбиәт теорияһы:* фольклор, тарихи йырҙар.

**Йырҙар.**Йырҙар халыҡ ауыҙ-тел ижады төрҙәренең береһе булараҡ. Көйҙәренең характерына ҡарап, башҡорт халыҡ йырҙарының икегә бүленеүе: оҙон йырҙары һәм ҡыҫҡаса йырҙар. Йырҙарҙың тематикаһы. «Урал», «Эскадрон», «Азамат», «Салауат», «Любизар», «Ҡаһым түрә», «Икенсе әрме», «Салауат телмәре» тарихи йырҙары. Баструкка ябылған, һөргөнгә ебәрелгән кешеләр тураһында йырҙар һәм хикәйәттәр: «Буранбай», «Бейеш». Кантондар тураһындағы йырҙар: «Ҡолой кантон», «Абдулла ахун», «Тәфтиләү». Был йырҙарҙа халыҡтың ҡарашының ҡапма-ҡаршылығы.

**Риүәйәттәр һәм легендалар**

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауыр яҙмышы хаҡында риүәйәттәр һәм йырҙар: «Зөлхизә», «Таштуғай», «Ғилмияза». Легендаларҙың риүәйәттән айырмаһы. Легендаларҙа төп образдар. Легендалар тематикаһы. Топонимик легендалар, тарихи легендалар, көнкүреш легендалары. «Ерәнсә сәсән һәм хан» әкиәте. Әкиәттең йөкмәткеһе. Ерәнсә сәсән образы. Милли характерҙың сәсәндәр образында кәүҙәләнеше: аҡыллылыҡ, тәрән аҡыл менән эш итеү, телмәр образлылығы.

*Әҙәбиәт теорияһы:* риүәйәт, легенда.

**Мифтахетдин Аҡмулла (1831-1895).** Биографияһы. «Башҡорттарым, укыу кәрәк!», «Дуҫлыҡ», «Нәфсе», «Аттың ниһен маҡтайһың?», «Нәсихәттәр» шиғырҙары. Халыҡты мәғрифәтселеккә саҡырыу. Унның шиғриәтенең төп идеяһы һәм йөкмәткеһе. Халыҡ педагогикаһының сағылышы, социаль мотивтар. Шағирҙың сатираһы. Шиғырҙарыныың идея-эстетик йөкмәткеһе. Башҡорт әҙәбиәтендә Мифтахетдин Аҡмулла ижадының тотҡан урыны.

**Мәжит Ғафури.** «Үҙем һәм халҡым», «Мин ҡайҙа?», «Гөлдәр баҡсаһында» шиғырҙарында мәғрифәтселек идеялары. «Һарыҡты кем ашаған?», «Ат менән эт» **мәҫәлдәре**. Жанр үҙенсәлектәре. Мәҫәлдәр теленең образлылығы. Унның мәҫәлдәрен И.А. Крылов мәҫәлдәре менән сағыштырыу. Йөкмәткеһе, поэтик телмәре, шиғыры, жанр үҙенсәлеге буйынса

мәҫәл структураһын анализлау. И.А. Крылов һәм М. Ғафури мәҫәлдәренең күсмә мәғәнәһе, хәҙерге заманда уларҙың функциональ роле.

**Башҡорт әҙәбиәте XIX быуат – XX быуат башы. Башҡорт совет әҙәбиәте**

**Василий Зефиров.** «Йәнтүрә» хикәйәһе. 1812 йылғы Ватан һуғышы ваҡиғалары. Рәсәйҙә йәшәүсе төрлө халыҡтарҙың Наполеон армияһына ҡаршы азатлыҡ көрәше. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының үҙҙәренең ирҙәре менән французтарға ҡаршы һуғышта ҡатнашыуы тураһында мәғлүмәттәр.

**Шәйехзада Бабич.** «Көтәм», «Ҡурайҡайға», «Салауат батыр» шиғырҙары. «Башҡорт халҡына көйлө хитап» шиғыры (өҙөк). Шиғриәттең үҙенсәлектәре: халыҡсанлыҡ, ябайлыҡ, шиғыр төҙөлөшөнөң еңеллеге.

**Дауыт Юлтый (1893-1938).** Тормошо һәм ижады. «Тимеркәй фәлсәфәһе» хикәйәһе. Ябай кешенең фажиғәле яҙмышын, эске донъяһын, уйланыуҙарын, хыялдарын һүрәтләү. Тимеркәй образы. Сәми ҡарт образы. ауыл байы Ҡотлоярҙың кешелекһеҙлеге.

**Һәҙиә Дәүләтшина (1905-1954).** Тормошо һәм ижады. «Айбикә» повесы. Ауылды социалистик үҙгәртеүҙә әүҙем ҡатнашыусы ҡатын-ҡыҙ образы. Хикәйәләү теленең байлығы. Образдарға характеристика.

*Әҙәбиәт теорияһы:* әҙәби әҫәрҙәрҙә образ, әҙәби әҫәрҙә персонаждарҙың холоҡ-фиғелен асыу саралары.

**Башҡорт совет әҙәбиәте. Рус әҙәбиәте**

**Рәшит Нигмәти.** Тормошо һәм ижады. «Йәмле Ағиҙел буйҙары» поэмаһы. Үҙәк образ – Ағиҙел йылғаһының Тыуған илде кәүҙәләндереүе, ярҙары буйында булған бөтә тарихтарға шаһит булыуы. Башҡорт халҡының тарихы, бәхетле киләсәк өсөн көрәше. Поэмала кешеләрҙе һәм тәбиғәтте һүрәтләү үҙенсәлектәре. Персоналдарҙың эске торошо. Халыҡ ижады традициялары. Тел һәм һүрәтләү саралары.

**Мостай Кәрим.** «Тормош миҙгелдәре» китабынан «Ап-аҡ мөғжизә» хикәйәһе. Дуҫҡа тоғролоҡ. Аҡсал образы. Хайуандарға һөйөү һәм иғтибар тәрбиәләү. «Айгөл иле» драмаһы. Драманың йөкмәткеһе, темаһы, идеяһы, образдары. Геройҙар исемлеге төҙөлдө. Сюжетты художестволы эшкәртеү үҙенсәлектәре. Драма теле.

*Әҙәбиәт теорияһы:* сюжет һәм композиция, образдар системаһы.

**Михаил Шолохов (1905-1984).** Башҡорт теленә Сабир Шәрипов тәржемәләгән «Кеше яҙмышы» хикәйәһе. Уның яҙылыу тарихы – хикәйәнең нигеҙендә реаль ваҡиғалар ятыуы. Һуғыш темаһы. Кеше рухының көсө, тормош мәғәнәһен эҙләү. Әҫәрҙең композицияһы – хикәйә эсендә хикәйә.

**Ғайса Хөсәйенов (1928-1921).** Тормошо һәм ижады. Башҡортостан Республиканың халыҡ яҙыусыһы (2008), яҙыусы, ғалим, әҙәбиәт белгесе, филология фәндәре докторы, БР

Фәндәр академияһы академигы. «Һуңғы тарпан», «Ете ырыу» хикәйәттәре, «Алдар батыр» ҡиссаһы. Тыуған ерҙең батырҙары образы. Тарихи ысынбарлыҡ.

**Яныбай Хамматов (1925-2000).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. «Бөртөкләп йыйыла алтын» романынан «Ғәйзулла» өҙөгө. Башҡортостан ерендәге XX быуат көнкүреше картиналары, империалистик һуғыш алды, поэманың характерын һәм идеяһын аңлау өсөн уларҙың әһәмиәте. Идея-тематик йөкмәтке, үҙәк образдар, стилистик-тел үҙенсәлектәре. Халыҡтың донъяны мифологик күҙаллауы. Хикәйәләү тураһында төшөнсә.

**Рамаҙан Өмөтбаев (1924-1997).** Тормошо һәм ижады. «Атлы башҡорт» повесынан өҙөк. Легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының данлы юлы. Башҡорт яугире-кавалерисы һәм уның атының Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы яҙмышы. Совет яугирҙарының батырлығы, ватансылығы, фиҙаҡәрлеге, һуғыштың фажиғәле йылдарында ауырлыҡтар һәм шатлыҡтар.

8-се класс

**Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте**

**Рәшит Назаров (1944-2006).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. «Башҡорт» шиғыры.

**Абдулхаҡ Игебаев (1930-2016).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Башҡортостан Республиканың халыҡ шағиры (2010) «Башҡортостан» шиғыры. Тыуған ил, тыуған тәбиғәт тураһында шиғырҙар, тирә-йүнде ысын мәғәнәһендә ҡабул итеү. Кеше һәм тәбиғәт. Тыуған яҡ тәбиғәте картиналарын тасуирлау аша кешенең рухи кәйефен, хәл-торошон сағылдырыу. Башҡорт шағирҙарының тыуған тәбиғәтен ҡабул итеүендә уртаҡ һәм индивидуаль һыҙаттары.

**Хәким Ғиләжев (1923-1997).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Башҡорт шағиры һәм яҙыусыһы. «Башҡорт теле» шиғыры.

**Мәүлит Ямалетдинов (1947-2020).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Башҡорт шағиры, яҙыусы, журналист, йәмәғәт эшмәкәре, мөхәррир, сценарист. «Халҡым хазинаһы» шиғыры.

**Мәхмүт Хөсәйен (1923-1993).** «Башҡорт теле ғорур яңғырай» шиғыры. Халыҡ тормошон, милли характерҙы дөйөм проблема – халыҡтың үҙаңын асыу күҙлегенән сығып һүрәтләү. Халыҡ характерындағы ыңғай һыҙаттарҙы поэтикалаштырыу.

**Валентин Распутин (1937-2015).** «Француз теле дәрестәре» хикәйәһе (Әмир Әминев тәржемәһе). Повеста һуғыш осоро ауырлыҡтарын сағылдырыу. Йәш геройға хас белем, әхлаҡи тотороҡлоҡ, үҙ бәҫен тойоу. Уҡытыусының күңел йомартлығы, уның малай яҙмышындағы роле.

**Дини әҙәбиәт**

**Рауил Бикбаев.** «Хәҙистәр» шиғыры.

**Мәүлит Ямалетдинов.** Сүрәи «әл-Фатиха». Фатиха сүрәһе шиғыры. Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең әйткәндәрен поэтиклаштырыу һәм шиғриәттә Ҡөрьән мотивтарын художестволы сағылдырыу. Ҡөрьән сүрәләренең шиғри тәржемәләре. Доньяны асылына, кешенең рухи камиллығына төшөнөү.

**Шафиҡ Әминев-Тамъяни (1858-1936).** Башҡорт шағиры, сәсән-импровизатор. «Урал», «Башҡорт бабаларының тарихы» шиғырҙары.

Тыуған илен яҡлаған ир-егеттәрҙе данлау. Тел, стиль үҙенсәлектәре.

**Ғәли Ибраһимов (1919-1989).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Башҡорт яҙыусыһы һәм шағиры. «Кинйә» романы. Романдың яҙылыу тарихы. Пугачевтың көрәштәше Кинйә Арыҫланов образы. Башҡорт халҡының уларҙың ерҙәрен баҫып алыусыларға ҡаршы көрәше. Романдың художество үҙенсәлектәре. Роман теленең һәм стиленең үҙенсәлеге.

**Халыҡ ауыҙ-тел ижады.**

Әйтештәр. «Бер тигәс тә ни яман?», «Аҡмырҙа сәсәндең Ҡобағыш сәсән менән әйтеше».Ҡобайырҙар. «Ил тигәндең кеме юҡ», «Салауат батыр».

Әйтеш – ике аҡындың импровизациялы ярышы, ауыҙ-тел ижадының йыр поэзияһы формаһы. Ҡыллы музыка ҡоралдары аккомпанементы ҡулланып башҡарыла. Ауыҙ-тел әҙәбиәтенең төп жанры. Шиғри бәхәс процесы. Үҙеңдең ижади мөмкинлектәреңде, донъяға ҡараштарыңды асыу. Жанрҙың иң яҡшы өлгөләре – Һабрау йырауҙың Иҙеүкәй батыр менән, Ҡобағыш сәсәндең Аҡмырҙа сәсән менән, Ҡарас сәсәндең ҡаҙаҡ батыры Аҡса менән, Байыҡ сәсәндең ҡаҙаҡ аҡыны Бохара менән, Салауаттың яратҡан ҡыҙы Зөләйха менән шиғри бәхәстәре.

*Әҙәбиәт теорияһы:* әйтеш жанры, ҡобайыр.

**Яңыбай Хамматов.** «Төньяҡ амурҙары» романы.

Романдың яҙылыу тарихы. 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт ғәскәрҙәренең ҡаһарманлығын һүрәтләү. Төп геройҙар. романдың теле һәм стиле.

**Ғайса Хөсәйенов**. «Һуңғы тарпан» әҫәре. «Ете ырыу» хикәйәһе, «Алдар батыр» повесы. Тыуған ерҙең батырҙары образы. Тарихи ысынбарлыҡ.

**Булат Рафиҡов (1934-1998).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Башҡорт яҙыусыһы һәм шағиры, тәржемәсе, драматург, журналист. «Эйәрелгән ат» повесы.Салауат Юлаевтың, атаһы Юлайҙың, башҡа баш күтәреүселәрҙең Рогервик ҡәлғәһендә тотҡонлоҡтағы тормошо. Повесть геройҙарының рухи ныҡлығы. Салауаттың Тыуған илендә ҡалған ике улының яҙмышы.

**Рәшит Солтангәрәев (1935-1999).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Башҡорт яҙыусыһы, публицист. «Осто бөркөт» повесы.

**Мәүлит Ямалетдинов.** «Ҡотолоу юлҡайҙарын тапманым». повесы. Граждандар һуғышы ваҡиғалары. Комбриг Муса Мортазин образы. Батырлыҡты, Ватан алдындағы хәрби ҡаҙаныштарҙы, фажиғәле һәләк булыуҙы һүрәтләү.

**Башҡорт совет әҙәбиәте. Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте**

**Ғәлимов Сәләм (1911-1939).** Тормошо һәм ижады. «Шоңҡар» поэмаһы. Тема, поэманың идея йөкмәткеһе. Яңы кешенең ҡайтанан тыуыу темаһы. Төп геройҙар (Әхмәт, Гөлнур, яҙыусы, архитектор, капитан, Миңйән). Композицияның үҙенсәлеге һәм байлығы, тел үҙенсәлектәре, образлылыҡ.

**Баязит Бикбай (1909-1968).** Тормошо һәм ижады. «Ер» поэмаһы, «Ҡаһым түрә» драмаһы.

«Ер» поэмаһы – халыҡтарҙың азатлыҡ өсөн күп быуатлыҡ көрәше. Халыҡ һәм ер образын һүрәтләү. Лирик герой образы. Поэманың художество үҙенсәлектәре.

«Ҡаһым түрә» драмаһы. Башҡорттарҙың 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыуы. Драманың идея йөкмәткеһе. Рус һәм башҡорт халыҡтары араһында дуҫлыҡ. Халыҡ образы. Драманың төп конфликты. Композицион үҙенсәлектәр. Фольклор жанрҙары һәм элементтары функциялары.

**Зәйнәб Биишева.** Тормошо һәм ижады. «Һөнәрсе менән Өйрәнсек» хикәйәһе. Хикәйәнең төп геройҙары. Оҫта һәм өйрәнсек, бер ауылда үҫкән һәм йәшәгән ике күрше. Һөнәрсе һәм Өйрәнсеккә характеристика бирергә. Алдаҡтың асылыуы. Яҡшылыҡтың яуызлыҡты еңеүе.

**Мостай Кәрим**. Тормошо һәм ижады. Лирика. «Үлмәҫбай» поэмаһы. Поэманың яҙылыу тарихы. Һуғышта яу һәм кеше һүрәтләнеше. Поэмалағы халыҡ геройы. Автор-хикәйәләүсе образы. Поэмалағы шиғри үҙенсәлектәр, поэманың интонация төрлөлөгө. Башҡорт халыҡ ижады менән бәйләнеше. Юмор.Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында М.Кәрим ижады.

**Рәми Ғарипов.** Шағирҙың биографияһы. «Урал йөрәге», «Аманат» шиғырҙары. «Уйҙарым» ҡобайыры. Туған тел матурлығын данлау, туған телгә ҡарата ихтирам тәрбиәләү. Тыуған ергә, тәбиғәткә һөйөү.

**Рауил Бикбаев**, «Башҡортостан бында башлана», «Йүкәләрҙән һығылып бал тама» шиғырҙары. Тыуған ергә һөйөү, уның именлеге, тәбиғәтте һаҡлау, халыҡ яҙмышы өсөн борсолоу, кешеләр араһында дуҫлыҡ, тормошҡа аңлы мөнәсәбәт проблемалары.

**Роберт Паль (1938).** «Уралым» шиғыры. Уралдың матурлығын данлау. Кеше һәм тәбиғәт. Пейзажының үҙенсәлеге. Лирик геройҙың патриотик тойғолары.

**Талха Ғиниәтуллин (1925-1919).** «Мәтрүшкә еҫе», «Әсә һәм бала» хикәйәләре. Әҫәрҙәрҙә эске донъя сафлығын, ябай кешеләрҙең күңел күркәмлеген һүрәтләү. Һуғыш, ауыл кешеләренең ауыр тормошо, уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәре темаһы.

**Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте**

**Назар Нәжми.** «Аҡ шишмә», «Һинең ниндәй улыңмын мин» шиғырҙары. Башҡортостан образы һәм уның иҫтәлекле урындарын тасуирлау. Тыуған еребеҙ, тыуған ҡалаһыбыҙ һәм тыуған ауылыбыҙ образы. Тыуған ергә һөйөү тойғоһон һүрәтләү. Лирик герой образы.

**Әмир Әминев.** «Ҡытайгород» повесы. Ер мәсьәләһе. Менталитет, әхлаҡ, шәхес азатлығы-азатһыҙлығы, халыҡтың мәғлүмәтлелеге, ассимиляциялар, милли үҙенсәлекте, телде һәм мәҙәниәтте юғалтыу, Ватанды сит ил кешеләренә һатыу тураһында уйланыуҙар. Сатира. Антитеза алымы. Әҫәр сюжетын төҙөү үҙенсәлектәре.

**Ринат Камал (1954).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. «Таня-Таңһылыу» романы. Әҫәрҙең идея йөкмәткеһе. Төп тема. Туған телгә һөйөү, милләткә ихтирам тәрбиәләү. Әҫәрҙең жанр төҙөлөшө үҙенсәлектәре. Романдың төп образдары. Көнһылыу, Фәнисә, Петриҡка характеристика. Әҫәр геройының яҙмышы аша тотош халыҡтың яҙмышын сағылдырыу.

9-сы класс

**Халыҡтың ауыҙ-тел ижады**

Инеш. Нәфис әҙәбиәт – сәнғәт төрө. Нәфис әҙәбиәт – сәнғәт төрө. Художестволы әҙәбиәттең үҙенсәлеге. Сәнғәт төрҙәре менән сағыштырыу. Нәфис әҙәбиәттең күп планлылығы. Ике төп яғы: 1) уйлап сығарылған булыуы, «һүҙҙән тыш» ысынбарлыҡ образдары; 2) ғәмәлдә телмәр конструкциялары, һүҙ структуралары.

**Башҡорт халыҡ ижады. Ҡарһүҙҙәр. Йола поэзияһы**

Башҡорттарҙың ғаилә-көнкүреш йола мәҙәниәте – халыҡтың тарихи-генетик, рухи, иҡтисади-хоҡуки, идеологик тормошоноң мөһим бер өлөшө. Йола мәҙәниәтенең ғаилә-көнкүреш һәм тәбиғәт миҙгеле (календарь) йолаларына бүленеүе.

**Эпос. «Урал батыр»** эпосы». Шиғри үҙенсәлектәре һәм ритмикаһы. Тарихилығы, мифологик нигеҙе. Әхлаҡ проблемалары. Яҡшылыҡ менән яуызлыҡтың көрәше. Урал менән Шүлгәндең ике туғандың сағыштырма характеристикаһы. Баһадир образы тураһында халыҡ төшөнсәһе. Әкиәт деталдәренең роле. Илһөйәрлек һәм гуманистик мәғәнә.Эпостың мифологик нигеҙе. Халыҡ бәхете өсөн тәбиғәттең стихиялы көстәренә ҡаршы көрәш идеяһы. Кешенең үлемһеҙлеге һәм тәбиғәт темаһы. Халыҡ философияһы. Самрау батша һәм халыҡ йәмғиәт идеалдары булған. Фантастика һәм реализм элементтары. Урал батыр образы халыҡ идеалы булараҡ. «Урал батыр» эпосының донъя мәҙәниәтендә тотҡан урыны.

*Әҙәбиәт теорияһы:* эпос.

**«Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосы».** Башҡорт халҡының татар-монгол иҙеүенән азат итеү өсөн көрәшен сағылдырыу. Төп герой Иҙеүкәй образы, унда халыҡтың ғәҙел хаким тураһындағы хыялы кәүҙәләнеше. Эпостың шиғри үҙенсәлектәре. Батырлыҡты һәм фиҙаҡәрлекте данлау. Тыуған ерҙе азат итеү өсөн көрәш. Эпостың композицияһы. Тел һәм стиль.

**Йырау һәм сәсәндәр ижады**

Ауыҙ-тел әҙәбиәте – профессиональ һүҙ оҫталарының ижады. Уларҙың шиғри формала барлыҡҡа килеүе. Тәүге билдәләмәләрҙең барлыҡҡа килеүе – һынсы, баҡсы, йырау. Эпостарҙа, ҡобайырҙарҙа, йырау һәм сәсәндәр йырҙарында көнүҙәк темалар.

Ауыҙ-тел әҙәбиәтендә төп темалар: алыш, көрәш. Был теманың өс йүнәлеше: батырҙарҙы, ҡаһарманлыҡты, хәрби башлыҡтарҙы данлау; дошмандарға мөрәжәғәт итеү – уларҙы фашлау һәм көлөү; халыҡҡа мөрәжәғәт итеү. Тыуған ерҙәрҙе баҫҡынсыларҙан һаҡлау.

XIV–XVI быуаттағы йырауҙар ижады. Башҡорттар, ҡаҙаҡтар, ҡарағалпаҡтар һәм Нуғай халҡы өсөн Һабрау, Асан Ҡайғы, Ҡазтуған, Шалғыйыҙ йырауҙар ижады уртаҡ ҡаҙаныш булып иҫәпләнә. Төп проблемалар һәм идеялар.

**Ҡаҙтуған, Һабрау, Асан Ҡайғы. Шалғыйыҙ**. Тормошо һәм ижады.

Башҡорт әҙәбиәтенең Россия осоро. Сәсәндәр дәүере. Сәсән – башҡорт ауыҙ-тел һүҙе оҫтаһы. Профессиональ сәсәндәр-импровизаторҙар: Ерәнсә, Ҡобағош, Аҡмырҙа, Ҡарас, Байыҡ Айҙар, Мәхмүт, Буранбай, Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев, Ғәбит Арғынбаев, Мөхәмәтша Боранғолов.Ауыҙ-тел әҙәбиәте авторҙарының әҫәрҙәрҙе яҙма рәүештә бәйән итеүгә күсеүе, импровизаторлыҡ сифаттарының юғалыуы, булған ҡоролоштоң идеологияһына буйһоноуы.

**Салауат Юлаев.** Биография. С. Юлаевтың Крәҫтиәндәр һуғышындағы (1773 – 1775) роле һәм ҡатнашыуы. Поэтик ижады. «Яу», «Уҡ», «Зөләйха», «Тыуған илем», «Уралым», «Егеткә», «Тирмәмдә», «Йырҙарҙан», «Салауат телмәре» шиғырҙары. Мөхәббәт һәм пейзаж лирикаһы. Героик лирика. Телдән һөйләп яҙылған импровизациялар: «Юлһыҙ ерҙән юлдар ярып...», «Йүрүҙән, һин беҙҙең тыуған йылғаһы...», «Сәстәреңдең толом сулпылары...», «Ағиҙелкәй аға ҡая аралап...», «Һауаларҙа осҡан, ай, яғылбай...» һ.б.

Идея һәм йөкмәтке. Документаль-публицистик хаттар (хаттар, бойороҡтар һ.б.).

*Әҙәбиәт теорияһы:* тарихи шәхес һәм әҙәби герой, прототип, тарихи ваҡиға һәм художестволы әҫәр.

**XI – XVIII быуат башкорт әҙәбиәте**

Ҡол Ғәли. «Йософ вә Зөләйха» («Ҡиссаи Йософ»тан өҙөк). «Ҡиссаи Йософ» поэмаһының үҙенсәлектәре. Сюжеттың төҙөлөшө.

**Юрматы ырыуының шәжәрәһе. Үҫәргән ырыуы шәжәрәһе.** XVI–XVIII быуаттарҙағы башҡорт эпик функциональ әҙәбиәтендә шәжәрәнең урыны. Юрматы, Үҫәргән, Ҡарағай-Ҡыпсаҡ, Ҡара-Табын, Әйле, Бөрйән, Тамъян, Әйле ырыуы шәжәрәләре.

Документаль фактар. XVIII быуат уртаһында рус-башҡорт мөнәсәбәттәре үҫеше картинаһы.

**Батыршаның хаты.** Батыршаның хатында XVIII быуат урталарында рус-башҡорт мөнәсәбәттәре үҫешен сағылдырған фактар тупланған.

**XVIII быуат әҙәбиәте. Әҙәби йүнәлештәр**

Башҡорт әҙәбиәтендә ауыҙ-тел әҙәбиәтенең барлыҡҡа килеүе.

Йырау һәм сәсәндәрҙең ижады үҫеше. Дастандарҙың идея-тематик йөкмәткеһе. Шиғриәттең аноним ҡульяҙмаһы.

Т. Ялсығол әл-Башҡорди (1767–1838). Биографияһы. Сәйәхәттәр. Мәҙәни һәм әҙәби эшмәкәрлеге. Башҡорт һәм төрки-монгол ырыуҙарының, болғар хандарының шәжәрәләрен һүрәтләгән «Тәуарихи Болгарийа» китабы.

**Ғәбдрәхим Усман (1754-1834).** Ғәбдрәхим Усмандың (Утыҙ-Имәни) шиғриәте. Көнсығыш әҙәбиәте жанрҙарының өҫтөнлөгө: ғәзәл, хикмәт, мәрсиә, бәйет. Шағирҙың лингвистика, философия һәм теология буйынса фәнни хеҙмәттәре.

«Ғәүариф эз-заман» («Замана уҡымышлылары»), «Әбъйәти төрки фи-фазиләти ғилем» («Ғилемдең өҫтөнлөгө тураһында төркисә бәйеттәр»), «Тәнзиһел әфкәр фи нәсихәтел-әхйәр» («Фекерҙе пакландырыр изге өгөттәр») исемле шиғырҙар шәлкеме.

**XIX быуат – XX быуат башы башҡорт әҙәбиәте**

XIX быуаттың тәүге яртыһында әҙәбиәт. Яңы реалистик әҙәбиәт элементтары. Суфыйсылыҡ шиғриәте традициялары. XIX быуаттың икенсе яртыһында әҙәбиәт (1861 й. реформанан һуң). XIX быуаттың тәүге яртыһында Башҡортостанда һәм Рәсәйҙә ижтимағи тормош. Башҡорт йәмғәтселегендә мәҙәни-әҙәби хәрәкәт. Башҡорт шиғриәтендә дини-мистик йүнәлештәр һәм уның вәкилдәре. Мәғрифәтселек идеяһының үҫеше. Мәғрифәтселек торошо һәм уның әҙәби процесҡа йоғонтоһо. Мәғрифәтселек әҙәбиәте вәкилдәре М. Аҡмулла, М. Өмөтбаев. Рус әҙәбиәтенең башҡорт мәҙәни-әҙәби тормошон йәнләндереүҙәге роле. А. Пушкин, Л. Толстой, А. Чехов кеүек рус авторҙары ижадында башҡорттарҙың тормош-көнкүреше.

XIX быуаттың икенсе яртыһында мәҙәниәт. Башҡорт һәм рус мәҙәниәте, әҙәбиәте бәйләнеше. XIX быуаттың икенсе яртыһында башҡорт әҙәбиәтенең үҫеш тенденцияһы.

Әҙәби әҫәрҙәрҙә халыҡсан сюжеттар: **«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Алдар менән Зөһрә», «Бәхтиәрнәмә», «Буҙйегет».**

Т.С. Беляевтың «Куз-Курпяч, башҡорт телендә бер ҡурайсы тарафынан яҙылған һәм 1809 йылғы Рифей тауҙары үҙәндәрендә Рәсәй теленә тәржемә ителгән башҡорт повесы» версияһы. XIX быуат башындағы башҡорт әҙәбиәте ҡомартҡыһы. Сюжеттың ҡаҙаҡ, алтай халыҡтары эпостары менән бәйләнеше.

Конфликт. Романтик һәм реалистик тенденциялар.

Ғәли Соҡорой (1826-1889). Биографияһы. Шағирҙың шәжәрәһе. Шиғри яҙмалары. «Тәуарихи Болғарийа» ҡулъяҙмаһы. Шиғырҙары.

**Мифтахетдин Аҡмулла (1731-1895).** Биографияһы. «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!», «Дуҫлыҡ», «Нәфсе», «Аттың ниһен маҡтайһың?», «Урыным – зиндан» шиғырҙары.

Халыҡты мәғрифәтселеккә саҡырыу. Уның шиғриәтенең төп идеяһы һәм йөкмәткеһе. Халыҡ педагогикаһының сағылышы, социаль мотивтар. Шағирҙың сатираһы. Уның шиғырҙарының идея-эстетик йөкмәткеһе. Башҡорт әҙәбиәтендә Мифтахетдин Аҡмулланың ижадының тотҡан урыны.

**Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев (1841-1907).** Авторҙың биографияһы һәм ижтимағи эшмәкәрлеге. «Йомран иле», «Ҡайыш илә Йүкә», «Үткән заманда башҡорт ҡыҙҙарының элек оҙатылыуы» шиғырҙары. Шиғырҙары тематикаһы. Шиғри оҫталығы. «Ҡайыш илә Йүкә» шиғырындағы этнографик традициялар сағылышы. Образдарҙың аллегорик әһәмиәте. М. Өмөтбаев – публицист һәм тәржемәсе.

**Ризаитдин Фәхретдин (1859-1936).** Мәғрифәтсе-педагог, тарихсы, тел һәм әҙәбиәт белгесе. «Сәлимә» повесы. Сәлимә һәм шәкерттәр образдары. Әҫәрҙең теле һәм стиле. Мәғрифәтселек идеяһының сағылышы. «Әсмә» повесы. Повесть сюжеты. Образдар системаһы. Төп идеяһы. Башҡорт әҙәбиәтендә Р. Фәхретдин ижадының әһәмиәте.

**Сафуан Яҡшығолов (1871-1931).** Тормошо һәм ижады. «Дим буйында яҙғы таң», «Башҡорт хәлдәре», «Дим буйы» шиғырҙар йыйынтығы. Шағирҙың башҡорттарҙың хәле тураһында уйланыуҙары, ер, мәҙәниәт мәсьәләләре. Шағирҙың мәғрифәтселек ҡараштары. Хитап жанры традициялары.

*Әҙәбиәт теорияһы:* хитап.

**Фәткелкадир Сөләймәнов (1889-1976).** Биографияһы. Башҡорт хәрәкәтендә ҡатнашыуы. Ижадында башҡорттар темаһы сағылышы. «Башҡорт моңо» шиғыры. Туған халҡыбыҙҙың ауыр яҙмышы тураһында уйланыуҙары. «Башҡорт йәйләүендә» хикәйәһе.

XX быуат башындағы башҡорттарҙың тарихы һәм тормошо хаҡында хикәйәләр: «Ил өсөн», «Ҡасҡын», «Үләт». Фольклор мотивтары. Романтик элементтар.

«Тимербай ҡурайсы» хикәйәһе. Тимербайҙың фажиғәле яҙмышы. Пессимистик кәйефтәрҙең сәбәбе. «Салауат батыр» драмаһы. Азатлыҡ идеяһы. Салауат Юлаев хаҡында тәүге әҙәби әҫәр, уның башҡорт әҙәбиәтендәге әһәмиәте.

**XX быуат башы башҡорт әҙәбиәте. Башҡорт совет әҙәбиәте**

**Мәжит Ғафури.** «Себер тимер юлы йәки Милләттең хәле», «1906 йылдан 1907 йылға васыят», «1907 йылдың яуабы», «Бөтһөн һуғыш», Икмәк», «Ант», «Аждаһа», «Бир ҡулыңды» шиғырҙарында һәм «Шағирҙың алтын приискаһында», «Фәкирлектә үткән тереклек» повестарында мәғрифәтселек идеялары. Ҡалалағы һәм ауылдағы фәкир тормошто реаль һүрәтләү. «Ярлылар, йәки Өйҙәш ҡатын» хикәйәһе. Социаль тигеҙһеҙлекте, буржуаз йәмғиәттең әхлаҡи йөҙөн асыу.

Проза әҫәрҙәре: «Ҡара йөҙҙәр», «Тормош баҫҡыстары». Уҙған тормошто идеологик көрәш позицияһынан һүрәтләү. «Шағирҙың алтын приискыларында» повесы. Әҫәрҙең автобиографик характеры. Эшселәрҙең ауыр тормошоноң сағылыш табыуы. Образдар системаһы. Зиннәт, Мәжит, Фәйзулла, Шакир, Лотфулла кеүек шәкерттәрҙең белемгә ынтылышы. Приискылары хужалары Закир һәм Шакир Рәмиевтарҙың тупаҫлығы. Композицион үҙенсәлек, повесть сюжеты, контртраст алымының уңышлы ҡулланылышы. Телдең байлығы һәм автор стиле саралары.

**Шәйехзада Бабич.** «Халҡым өсөн!», «Кем өсөн», «Бер минут», «Көрәшеп үткәр ғүмереңде», «Көтәм», «Йәшәһен эшселәр!», «Ҡурайҡайға», «Башҡортостан», «Салауат батыр», «Көтмәҫтән», «Яҙғы йыр», «Башҡорт халҡына көйлө хитап», «Беҙ» шиғырҙары. Бабич – романтик. «Бер минут», «Әйҙә, милләт!», «Көрәшеп үткәр ғүмереңде» шиғырҙарының төп идеяһы. Бабич – сатирик. «Ҡандала» балладаһы. «Ғазазил» поэмаһы, «Китабеннас» эпиграммаһы. Идея йөкмәткеһе һәм художество формаһы. Бабич – шиғыр оҫтаһы. Шиғриәттең үҙенсәлектәре: халыҡсанлыҡ, ябайлыҡ, шиғыр төҙөлөшөнөң еңеллеге. Ш. Бабичтың башҡорт әҙәбиәтендәге урыны.

**Әҙәбиәт теорияһы һәм тарихы буйынса мәғлүмәттәр**

Әҙәбиәт һүҙ сәнғәте образы булараҡ. Әҙәбиәт һәм мифология. Әҙәбиәт һәм фольклор.

Художестволы образ. Персонаж. Әҙәби герой. Героик характер.

Төп һәм икенсе пландағы персонаждар. Лирик герой. Ваҡыт һәм арауыҡ образдары, тәбиғәт образдары, предмет образдары. Әҙәбиәттә «мәңгелек» образдар. Художестволы уйҙырма. Дөрөҫлөккә оҡшашлыҡ һәм фантастика.

Сюжет һәм композиция. Конфликт. Эске конфликт. Эпизод. Пейзаж. Портрет. Диалог һәм монолог. Эске монолог. Герой көндәлектәре, хаттары һәм төштәре. Лирик сигенеүҙәр. Эпилог. Лирик сюжет.

Авторлыҡ позицияһы. Әҫәрҙең атамаһы. Эпиграф. «Һөйләүсе» фамилиялар. Әҫәрҙең финалы.

Тематика һәм проблематика. Әҫәрҙең идея-эмоциональ йөкмәткеһе. Бейеклек һәм түбәнлек, матурлыҡ һәм килбәтһеҙлек, әҙәбиәттә фажиғә һәм мәрәкә. Юмор. Сатира.

Художестволы телмәр. Шиғриәт һәм проза. Тасуирлау саралары (эпитет, метафора, кәүҙәләндереү, сағыштырыу, гипербола, антитеза, аллегория). Символ. Гротеск. Художестволы деталь. Шиғыр төҙөлөшө системалары. Ритм, рифма. Строфа. Әҙәби төрҙәр һәм жанрҙар. Эпос. Лирика. Драма. Эпик жанрҙар (хикәйә, әкиәт, повесть, роман, шиғри роман). Лирик жанрҙар (ода, элегия, мөрәжәғәт, шиғри проза). Лиро-эпик жанрҙар (мәҫәл, баллада, поэма). Драма жанрҙары (драма, трагедия, комедия).

«ТУҒАН (БАШҠОРТ) ӘҘӘБИӘТЕ» ПРЕДМЕТЫ ПРОГРАММАҺЫН ҮЗЛӘШТЕРЕҮҘӘН ҺУҢ ПЛАНЛАШТЫРЫЛҒАН ҺӨҘӨМТӘЛӘР

Дөйөм белем биреүсе мәктәптә «Туған (башҡорт) әҙәбиәте» дәресен өйрәнеү уҡыусыларҙың шәхси, метапредмет һәм предмет һөҙөмтәләренә өлгәшеүенә йүнәлтелгән.

Шәхси һөҙөмтәләр

«Туған (башҡорт) әҙәбиәте» дәресен өйрәнеү һөҙөмтәһендә 5-9-сы кластарҙа уҡыусыларҙа түбәндәге шәхси һөҙөмтәләр формалаша:

***граждандар тәрбиәләү:***

-граждандың бурыстарын башҡарыуға һәм уның хоҡуҡтарын бойомға ашырыуға әҙерлек, башҡа кешеләрҙең хоҡуҡтарын, азатлыҡтарын һәм законлы мәнфәғәттәрен ихтирам итеү;

-ғаилә, белем биреү ойошмалары, урындағы берләшмә, тыуған яҡ, ил тормошонда, шул иҫәптән туған телдә яҙылған әҙәби әҫәрҙәрҙә сағылыш тапҡан хәлдәр менән сағыштырыуҙа әүҙем ҡатнашыу; экстремизмдың, дискриминацияның төрлө формаларын ҡабул итмәү;

-төрлө социаль институттарҙың кеше тормошондағы ролен аңлау; граждандың төп хоҡуҡтары, азатлыҡтары һәм бурыстары, полимәҙәни һәм күп конфессиялы йәмғиәттә шәхес-ара мөнәсәбәттәрҙең социаль нормалары һәм ҡағиҙәләре тураһында мәғлүмәтле булыу; шул иҫәптән туған телдә яҙылған әҙәби әҫәрҙәрҙәр миҫалдары нигеҙендә лә формалаштырыу;

-төрлө берлектәге эшмәкәрлеккә әҙерлек, үҙ-ара аңлашыуға һәм ярҙамға ынтылыу; мәктәп үҙидараһында әүҙем ҡатнашыу;

-гуманитар эшмәкәрлектә ҡатнашыуға әҙерлек (ярҙамға мохтаж кешеләргә булышлыҡ итеү; ирекмәнлек);

***илһөйәрлек тәрбиәһе биреү:***

-полимәҙәни һәм күп конфессиялы йәмғиәттә Рәсәйҙең граждանлыҡ берлеген, Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының башҡа туған телдәре рәтендә туған телдең ролен аңлау;

-«Туған (башҡорт) әҙәбиәте» уҡыу предметы контексында туған телде, Рәсәй Федерацияһының тарихын һәм мәҙәниәтен, тыуған төйәгеңдең, Рәсәй халыҡтарының мәҙәниәтен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу белдереү;

-туған телгә, Тыуған ил – Рәсәй ҡаҙаныштарына, фәнгә, сәнғәткә, хәрби батырлыҡтарға һәм халыҡтың хеҙмәт ҡаҙаныштарына, шул иҫәптән нәфис әҫәрҙәрҙә сағылыш тапҡандарға яҡшы мөнәсәбәт;

-Рәсәй символдарына, дәүләт байрамдарына, тарихи һәм тәбиғи мираҫҡа һәм һәйкәлдәргә, тыуған илдә йәшәгән төрлө халыҡтарҙың йолаларына ихтирам;

***рухи-әхлаҡи тәрбиә биреү:***

-әхлаҡи һайлау шарттарында әхлаҡи ҡиммәттәргә һәм нормаларға иҫәп тотоу;

-ҡылыҡ эҙемтәләрен аңлауҙы иҫәпкә алып, үҙеңдең тәртибеңде, телмәреңде, шулай уҡ башҡа кешеләрҙең тәртибен һәм ҡылыҡтарын әхлаҡи һәм хоҡуҡи нормалар ҡарашынан баһаларға әҙер булыу;

-асоциаль эштәрҙе әүҙем ҡабул итмәү;

-шәхси һәм йәмғәт киңлеге шарттарында шәхестең азатлығы һәм яуаплылығы;

***эстетик тәрбиә биреү:***

-төрлө сәнғәт төрҙәренә, үҙеңдең һәм башҡа халыҡтарҙың йолаларын һәм ижадына ҡарата һиҙгерлек;

-сәнғәттең эмоциональ йоғонтоһон аңлау; аралашыу һәм үҙ-үҙеңде сағылдырыу сараһы булараҡ художество мәҙәниәтенең мөһимлеген аңлау;

-аралашыу һәм үҙ-үҙеңде сағылдырыу сараһы булараҡ туған телдең мөһимлеген аңлау;

-илебеҙ һәм донъя сәнғәтенең ҡиммәттәрен, этник мәҙәни йолаларҙың һәм халыҡ ижадының ролен аңлау;

-төрлө сәнғәт төрҙәрендә үҙ-үҙеңде күрһәтеүгә ынтылыу;

***физик тәрбиә биреү, һаулыҡ һәм эмоциональ именлек мәҙәниәтен булдырыу:***

-тормош һәм уҡыу тәжрибәһенә таянып йәшәү ҡиммәттәрен аңлау;

-һаулыҡҡа яуаплы ҡараш һәм сәләмәт йәшәү рәүешенә урынлаштырыу (сәләмәт туҡланыу, гигиена ҡағиҙәләрен үтәү, тигеҙ шөғөлләнеү һәм ял режимы, даими физик әүҙемлек);

-физик һәм психик һаулыҡ өсөн зарарлы ғәҙәттәрҙең (алкоголь, наркотиктар ҡулланыу, тәмәке тартыу) эҙемтәләрен аңлау һәм ҡабул итмәү;

-хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәү, шул иҫәптән мәктәптәрҙә телгә белем биреү процесында интернет-мөхиттә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәү;

-стресс хәленә һәм үҙгәреүсән социаль, мәғлүмәти һәм тәбиғәт шарттарына яраҡлашыу һәләте, шул иҫәптән үҙ тәжрибәңде аңлап, артабан маҡсаттар ҡуйыу;

-үҙеңде һәм башҡаларҙы ғәйепләмәйенсә ҡабул итә белеү;

-башҡаларҙың эмоциональ торошон һәм хис-тойғоларҙы аңлай белеү, үҙ хәлеңде сағылдырыу өсөн, шул иҫәптән туған телдә яҙылған әҙәби әҫәрҙәрҙән миҫалдарға таянып, тел сараларын ҡуллана белеү;

-рефлексия күнекмәләренең формалашыуы, хаталаныуға үҙ хоҡуғыңды һәм башҡа кешенең шундай уҡ хоҡуғын таныу;

***хеҙмәт тәрбиәһе биреү:***

-технологик һәм социаль йүнәлештәге практик бурыстарҙы (ғаилә, мәктәп, ҡала, край сиктәрендә) хәл итеүҙә әүҙем ҡатнашыуға, бындай эшмәкәрлекте башлап ебәреү, планлаштырыу һәм үҙаллы үтәү һәләтенә эйә булыу;

-төрлө һөнәрҙәрҙе һәм хеҙмәтте ғәмәлдә өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу, шул иҫәптән өйрәнелгән предмет буйынса белемде ҡулланыу һәм филологтарҙың, журналистарҙың, яҙыусыларҙың эшмәкәрлеге менән танышыу; хеҙмәткә һәм хеҙмәт эшмәкәрлеге һөҙөмтәләренә ихтирам;

-шәхси һәм йәмәғәт мәнфәғәттәрен, ихтыяждарын иҫәпкә алып, белем биреүҙең индивидуаль траекторияһын төҙөү һәм тормош пландарын аңлы рәүештә һайлау;

-киләсәккә пландарың хаҡында һөйләй белеү;

***экологик тәрбиә биреү:***

-тирә-яҡ мөхит өлкәһендәге мәсьәләләрҙе хәл итеү, эштәрҙе планлаштырыу һәм уларҙың тирә-яҡ мөхит өсөн эҙемтәләрен баһалау өсөн социаль һәм тәбиғи фәндәр өлкәһендәге белемде ҡулланыуға йүнәлеш алыу;

-экология мәсьәләләренә үҙ ҡарашыңды анығ, аңлайышлы белдерә белеү;

-экологик мәҙәниәт кимәлен арттырыу, экологик проблемаларҙың глобаль характерын һәм уларҙы хәл итеү юлдарын аңлау;

-тирә-яҡ мөхиткә зыян килтергән, шул иҫәптән экологик проблемаларҙы күтәргән әҙәби әҫәрҙәр менән танышҡанда барлыҡҡа килгән ғәмәлдәрҙе әүҙем ҡабул итмәү;

-тирә-яҡ мөхиткә зыян килтергән ғәмәлдәрҙе әүҙем ҡабул итмәү;

-тәбиғи, технологик һәм социаль мөхиттең үҙ-ара бәйләнеше шарттарында граждан һәм ҡулланыусы булараҡ үҙенең ролен аңлау;

-экология йүнәлешендәге практик эшмәкәрлектә ҡатнашыуға әҙерлек;

***ғилми танып белеү ҡиммәттәре:***

-кешенең, тәбиғәттең һәм йәмғиәттең төп үҫеш законлыҡтары, кешенең тәбиғи һәм социаль мөхит менән үҙ-ара бәйләнештәре; тел үҫеше законлыҡтары тураһында заманса фәнни күҙаллауҙар системаһы эшмәкәрлегендә йүнәлеш алыу;

-донъяны танып белеү сараһы булараҡ тел һәм уҡыу мәҙәниәтен, китап уҡыу оҫталығын өйрәнеү;

-мәктәптә тел буйынса белем биреү үҙенсәлеген иҫәпкә алып тикшеренеү эшмәкәрлегенең төп оҫталығын үҙләштереү;

-тәжрибәне, күҙәтеүҙәрҙе, ҡылыҡтарҙы аңларға өйрәтеү һәм шәхси һәм коллектив именлеккә өлгәшеү юлдарын камиллаштырыуға ынтылыу;

***уҡыусыны социаль һәм тәбиғи мөхиттең үҙгәреүсән шарттарына яраҡлаштырыуҙы тәьмин иткән шәхси һөҙөмтәләр:***

-уҡыусыларҙың төркөмдәрҙә һәмберекмәләрҙә, шул иҫәптән профессиональ эшмәкәрлек буйынса, шулай уҡ башҡа мәҙәни мөхит кешеләре менән социаль үҙ-ара эш итеү сиктәрендәге төркөмдәрҙә, ғаиләлә, социаль тәжрибәне, төп социаль ролдәрҙе, йәмғәт тәртибе нормаларын һәм ҡағиҙәләрен, социаль йәшәү формаларын үҙләштереүе;

-уҡыусыларҙың билдәһеҙлек шарттарында үҙ-ара эш итеүгә һәләте, башҡаларҙың тәжрибәһенә һәм белеменә асыҡлыҡ;

-билдәһеҙлек шарттарында эшләргә, компетентлыҡ кимәлен практик эшмәкәрлек аша күтәрергә һәләтлелек, шул иҫәптән башҡа кешеләрҙән өйрәнә, уртаҡ эшмәкәрлектән яңы белем, башҡалар тәжрибәһенән оҫталыҡ туплау һәм компетенция ала белеү;

-образдарҙы асыҡлау һәм бәйләү күнекмәләре, яңы белемдәр булдырыу, шул иҫәптән быға тиклем билдәһеҙ булған төшөнсәләр, объекттар һәм күренештәр тураһында гипотезалар төҙөү, идеялар формалаштырыу һәләте, үҙ белемеңдең һәм компетенцияңдың етмәүен аңлау, үҙеңдең үҫешеңде планлаштырыу һәләте;

-тотороҡло үҫеш концепцияһы өлкәһендә төп төшөнсәләр, терминдар һәм күҙаллауҙар менән эш итә белеү; тәбиғәттең, йәмғиәттең һәм иҡтисадтың үҙ-ара бәйләнешен анализлау һәм асыҡлау, тирә-яҡ мөхиткә йоғонтоһон, саҡырыуҙарға, глобаль эҙемтәләргә өлгәшеү һәм уларҙы еңеп сығыуҙы иҫәпкә алып үҙ эшмәкәрлегеңде баһалау;

-стресс ситуацияһын аңлау һәләте, тормош, телмәр һәм уҡыу тәжрибәһенә таянып, булған үҙгәрештәрҙе һәм уларҙың эҙемтәләрен баһалау; стресс хәлен ҡаршы тороуҙы талап итеүсе саҡырыу булараҡ ҡабул итеү;

-стрес хәлен баһалау, ҡабул ителгән ҡарарҙарға һәм эштәргә төҙәтмәләр индереү; хәүеф-хәтәрҙе һәм эҙемтәләрҙе билдәләү һәм баһалау, тәжрибә формалаштырыу, килеп тыуған хәлдә ыңғай күренеш таба белеү; уңыш гарантиялары булмағанда ла эшләргә әҙер булыу.

Метапредмет һөҙөмтәләре

5-9-сы кластарҙа «Туған (башҡорт) әҙәбиәте» дәресен өйрәнеү һөҙөмтәһендә бала түбәндәге универсаль **танып белеү** эшмәкәрлегенә эйә була:

***төп логик эшмәкәрлек:***

-тикшерелгән факттарҙа, мәғлүмәттәрҙә һәм күҙәтеүҙәрҙә законлылыҡтарҙы һәм ҡаршылыҡтарҙы асыҡлау;

-законлылыҡтарҙы һәм ҡаршылыҡтарҙы асыҡлау өсөн критерийҙар тәҡдим итеү;

-ҡуйылған уҡыу бурысын хәл итеү өсөн кәрәкле мәғлүмәттең дефицитын асыҡлау;

-әҙәби процестарҙы тикшергәндә сәбәп-эҙемтә бәйләнештәрен асыҡлау; дедуктив һәм индуктив, оҡшашлыҡ буйынса һығымталарҙы файҙаланып, йомғаҡ яһау, үҙ-ара бәйләнештәр тураһында фараздар төҙөү;

-төрлө типтағы текстар, төрлө тел берәмектәре менән эшләгәндә варианттарҙы сағыштырып, оптималь вариантты билдәләп уҡыу бурысын хәл итеү ысулын үҙаллы һайлау;

***төп тикшеренеү эшмәкәрлеге:***

-тел белемен биреүҙә тикшеренеү ҡоралы булараҡ һорауҙарҙы файҙаланыу;

-хәлдең реаль һәм күңелгә ятышлы торошо араһындағы тап килмәүҙе теркәгән мәсьәләләрҙе билдәләү, эҙләнеүҙе һәм мәғлүмәттәрҙе үҙаллы билдәләү;

-үҙеңдең фекерҙең һәм башҡаларҙың фекерҙәренең дөрөҫлөгө тураһында фараздар әҙерләү, позицияңды, фекереңде дәлилләү;

- ш алгоритмын төҙөү һәм уны уҡыу бурыстарын хәл итеү өсөн файҙаланыу;

-тикшеренеү (эксперимент) барышында алынған мәғлүмәттең файҙаланылыуын һәм дөрөҫлөгөн баһалау;

-үткәрелгән күҙәтеү, тикшереү һөҙөмтәләре буйынса һығымталарҙы үҙаллы төҙөү;

-алынған һығымталарҙың һәм һығымталарҙың дөрөҫлөгөн баһалау ҡоралдарына эйә булыу;

-процестарҙың, ваҡиғаларҙың артабанғы үҫешен һәм уларҙың оҡшаш йәки оҡшаш хәлдәрҙәге эҙемтәләрен күҙалларға, шулай уҡ уларҙың яңы шарттарҙа һәм контекстарҙа үҫешеүе тураһында күҙаллауҙар яһау;

***мәғлүмәт менән эшләү:***

- әҡдим ителгән уҡыу бурысын һәм бирелгән критерийҙарҙы иҫәпкә алып, мәғлүмәт эҙләгәндә һәм һайлап алғанда төрлө алымдарҙы, ҡоралдарҙы һәм һорауҙарҙы ҡулланыу;

-текст, таблица, схемаларҙа күрһәтелгән мәғлүмәтте һайлап алыу, анализлау, интерпретациялау, дөйөмләштереү һәм системалаштырыу;

-тексты баһалау, унда булған мәғлүмәтте дөрөҫ ҡулланыу һәм үҙләштереү йәһәтенән уҡыу мәсьәләләрен хәл итеү маҡсатында төрлө аудирование һәм уҡыу төрҙәрен файҙаланыу;

-ҡуйылған маҡсаттарҙы иҫәпкә алып, бер йәки бер нисә сығанаҡтан мәғлүмәт алыу, дөйөмләштереү һәм системалаштырыу өсөн мәғәнәле уҡыуҙы ҡулланыу;

-төрлө мәғлүмәт сығанаҡтарында оҡшаш аргументтар (бер үк идеяны раҫлаған йәки кире ҡаҡҡан, версияны) табыу;

-мәғлүмәтте биреүҙең оптималь формаһын (текст, презентация, таблица, схема) үҙаллы һайларға һәм, коммуникатив йүнәлештән сығып, сиселгән мәсьәләләрҙе ҡатмарлы булмаған схема, диаграмма, башҡа графика һәм уларҙың комбинациялары менән иллюстрациялау;

-мәғлүмәттең ышаныслылығын уҡытыусы тәҡдим иткән йәки үҙаллы формалаштырылған критерийҙар буйынса баһалау;

-мәғлүмәтте хәтерҙә ҡалдырыу һәм системалаштырыу.

5-9-сы кластарҙа «Туған (башҡорт) әҙәбиәте» дәресен өйрәнеү һөҙөмтәһендә бала түбәндәге **коммуникатив** универсаль уҡыу эшмәкәрлегенә эйә була:

***аралашыу:***

-фекерҙәр ҡабул итергә һәм уларҙы формалаштырырға, аралашыу шарттарына һәм маҡсаттарына ярашлы хис-тойғоларҙы белдерерәү; диалогтарҙа һәм дискуссияларҙа, телдән монологик телмәрҙә үҙенде (үҙеңдең фекереңде) белдереү;

-вербаль булмаған аралашыу сараларын асыҡлау, социаль билдәләрҙең әһәмиәтен аңлау;

-бәхәсле хәлдәрҙең тәүшарттарын белеү һәм асыҡлау, конфликттарҙы йомшартыу, һөйләшеүҙәр алып барыу;

-башҡаларҙың ниәттәрен аңлау, әңгәмәсегә ихтирамлы ҡарау һәм дөрөҫ формала ҡаршы төшөү;

-диалог/фекер алышыу барышында тикшерелгән тема буйынса һорауҙар биреү һәм мәсьәләләрҙе хәл итеүгә йүнәлтелгән идеяларҙы әйтеү һәм аралашыу теләген һаҡлау;

-үҙ фекерҙәреңде башҡа диалогта ҡатнашыусыларҙың фекерҙәре менән сағыштырыу, позицияларҙың айырмаһын һәм оҡшашлығын асыҡлау;

-үткәрелгән анализ, тикшереү, проект һөҙөмтәләрен асыҡ күрһәтеү;

-презентация маҡсатын һәм аудиторияның үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, сығыш форматын үҙаллы һайлау һәм уға ярашлы, иллюстрация материалын файҙаланып, телдән һәм яҙма текстар төҙөү;

***берҙәм эшмәкәрлек:***

-анығ проблеманы хәл иткәндә команда һәм шәхси эштең өҫтөнлөгөн аңлау һәм файҙаланыу, ҡуйылған бурысты хәл иткәндә төркөмләп үҙ-ара эш итеү формаларын ҡулланыу кәрәклеген нигеҙләү;

-уртаҡ эшмәкәрлектең маҡсатын ҡабул итеү, уға ирешеү буйынса эште коллектив планлаштырыу һәм башҡарыу: ролдәрҙе бүлеү, һөйләшеп килешеү, уртаҡ эш барышын һәм һөҙөмтәһен тикшереү;

-бер нисә кешенең фекерен дөйөмләштерә белеү, етәкселек итергә, йөкләмәләр үтәргә, бойороҡ бирергә әҙер булыу;

-уртаҡ эште ойоштороуҙы планлаштырырға, үҙ ролеңде билдәләргә (үҙ-ара эш итеүҙә ҡатнашыусыларҙың өҫтөнлөктәрен һәм мөмкинлектәрен иҫәпкә алып), команда

ағзалары араһында бурыстарҙы бүлеү, эштең төркөм формаларында ҡатнашыу (фекер алышыуҙар, «мейе штурмлау» һәм башҡалар);

-эштәге үҙ өлөшөндө башҡарыу, үҙ йүнәлешең буйынса сифатлы һөҙөмтәгә өлгәшеү һәм команданың башҡа ағзаларының эшмәкәрлеге менән эш итеүҙе көйләү;

-дөйөм продуктҡа үҙ өлөшөндө индереү сифатын үҙ-ара эш итеүҙә ҡатнашыусылар билдәләгән критерийҙар буйынса баһалау;

-һөҙөмтәләрҙе тәүге бурыс һәм һәр команда ағзаһының һөҙөмтәләргә ирешеүгә индергән өлөшө менән сағыштырыу, яуаплылыҡ өлкәһен бүлешеү һәм төркөм алдында отчет бирергә әҙер булыуҙы күрһәтеү.

5-9-сы кластарҙа «Туған (башҡорт) әҙәбиәте» дәресен өйрәнеү һөҙөмтәһендә уҡыусы түбәндәге **регулятив (көйләүсе)** универсаль уҡыу эшмәкәрлегенә эйә була:

***үҙ-үҙен ойоштороу:***

-хәл итеү өсөн уҡыуҙағы һәм тормоштағы проблемаларҙы асыҡлау;

-ҡарарҙар ҡабул итеүҙең төрлө юлдарын эҙләү (шәхси, төркөмдә ҡарар ҡабул итеү, төркөм менән ҡарар ҡабул итеү);

-бурысты (йәки уның бер өлөшөн) хәл итеү алгоритмын үҙаллы төҙөү, булған ресурстарҙы һәм үҙ мөмкинлектәрендә иҫәпкә алып, уҡыу бурысын хәл итеү ысулын һайлау, тәҡдим ителгән ҡарарҙар варианттарын нигеҙләү;

-үҙаллы эш планын төҙөү, уны тормошҡа ашырыу барышында кәрәкле төҙәтмәләр индереү;

- һайлау һәм ҡарар өсөн яуаплылыҡ алыу;

***үҙконтроль:***

-үҙ-үҙеңде контролдә тотоуҙың (шул иҫәптән телмәрҙе контролдә тотоуҙың), үҙмотивацияның һәм рефлексияның төрлө ысулдарына эйә булыу;

-уҡыу ситуацияһына дөрөҫ баһа биреү һәм уны үҙгәртеү планын тәҡдим итеү;

-уҡыу бурысын хәл иткәндә килеп тыуыу ихтималлығы булған ауырлыҡтарҙы алдан күрә белеү һәм ҡарарҙы үҙгәреүсән шарттарға яраҡлаштырыу;

-эшмәкәрлек һөҙөмтәһенә ирешеү (эшләмәү) сәбәптәрен аңлатыу;

-аралашыу уңышһыҙлыҡтарының сәбәптәрен аңлау һәм уларҙы иҫкәртә белеү, алған телмәр тәжрибәһенә баһа биреү һәм аралашыу маҡсаттарын һәм шарттарын иҫәпкә алып үҙеңдең телмәреңде төҙәтеү;

-маҡсат һөҙөмтәһенең һәм аралашыу шарттарының тап килеүен баһалау;

***эмоциональ интеллект:***

-үҙеңдең һәм башҡаларҙың хис-тойғолары менән идара итеү һәләтен үҫтереү;

-хис-тойғолар сәбәптәрен асыҡлау һәм анализлау;

-телмәр хәлен анализлап, икенсе кешенең ниәттәрен һәм теләктәрен аңлау;

-хис-тойғоларҙы белдереү ысулын көйләү;

***үҙеңде һәм башҡаларҙы ҡабул итеү:***

-башҡа кешегә һәм уның фекеренә аңлы мөнәсәбәт;

-үҙеңдең һәм сит кешенең хаталаныуға хоҡуғын таныу;

-үҙеңде һәм башҡаларҙы ғәйепләмәйенсә ҡабул итеү;

-асыҡлыҡ күрһәтеү;

-эргә-тирәләге бар нәмәне контролдә тотоу мөмкин түгеллеген аңлау.

Предмет һөҙөмтәләре

5-9-сы кластарҙа «Туған (башҡорт) әҙәбиәте» фәнен өйрәнеүҙең төп предмет һөҙөмтәләре:

-формаль һәм рәсми булмаған шәхес-ара һәм мәҙәниәт-ара аралашыу шарттарында тирә-йүндәгеләр менән үҙ-ара һөҙөмтәле эш итеүҙе тәьмин иткән телмәр эшмәкәрлеге төрҙәрен (тыңлау, уҡыу, һөйләшеү һәм хат) камиллаштырыу;

-белем биреү һәм үҙеңде белеү процесында шәхестең интеллектуаль һәм ижади һәләттәрен үҫтереүҙә туған әҙәбиәттең ролен аңлау;

- художестволы текстар миҫалында туған телдең коммуникатив-эстетик мөмкинлектәренә төшөнөү;

-художестволы тексты, шул иҫәптән күп аспектлы анализлауҙың төрлө төрҙәрен башҡарыу оҫталыҡтарын булдырыу;

-әүҙем һәм потенциаль һүҙлек запасын байытыу, туған телдә фекерҙәрҙе һәм хис-тойғоларҙы ирекле белдереү өсөн аралашыу ситуацияһына һәм стиленә ярашлы телмәрҙә ҡулланылған грамматик саралар күләмен киңәйтеү;

-туған тел лексикаһының һәм фразеологияһының төп стилистик ресурстарын, әҙәби әҫәрҙәрҙе уҡығанда телмәр этикеты нормаларын үҙләштереү; телдән һәм яҙма фекер белдереү тәжрибәһен туплау; үҙ телмәреңде камиллаштырыуға ынтылыу;

-дөйөм кешелек ҡиммәте булараҡ тел мәҙәниәте өсөн яуаплылыҡ булдырыу.

**Кластар буйынса предмет һөҙөмтәләре**

5-се класс

Уҡыусы түбәндәгеләрҙе өйрәнә:

-һүҙ сәнғәтенең, әҙәби геройҙарҙың, пейзаждарҙың образлы тәбиғәтен аңларға; уҡыған әҙәби әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен белергә;

-башҡорт фольклорының (эпос, әкиәт, йомаҡ, мәҡәл, әйтем) һәм нәфис әҙәбиәтенең (хикәйә) төп жанрҙарын айырырға;

-проза тексының шиғри текстарҙан айырмаһын аңларға;

-*лирик герой* төшөнсәһенә эйә булырға;

-халыҡ йыры, таҡмаҡ, гимн жанрҙарының үҙенсәлектәрен белергә;

-шиғыр мелодикаһы тураһында мәғлүмәт алырға;

-текстарҙаҫы неологизмдары табырға;

-тылсымлы әкиәт, легенда, повесть жанрҙарының үҙенсәлектәрен асыҡларға;

- әҙәби әйтелеш нормаларын үтәп, әҫәрҙәрҙе (йәки фрагменттарҙы), шул иҫәптән яттан өйрәнгәндәрҙе тасуири уҡырға;

-һөйләүҙең төрлө төрҙәрен үҙләштерергә, уҡыған әҫәр буйынса һорауҙарға яуап бирергә, әҫәргә ҡарата үҙеңде мөнәсәбәтеңде белдерергә һәм йөкмәткеһен аңлау маҡсатында һорауҙар бирергә;

-әҫәрҙең темаһын һәм идеяһын (төп фекерен) билдәләргә;

-текста аллегория һәм метафора, синоним һәм омонимдарҙы табырға, уларҙың художество әһәмиәтен аңларға;

-аныҡ маҡсаттарға таянып, үҙаллы уҡыу өсөн ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәрен һайларға;

-ни өсөн һайлауыңды дәлиләп, үҙаллы уҡыған әҫәр тураһында һөйләргә;

-автор позицияһын аңлау;

-текста художестволы деталде, сағыштырыуҙы табырға;

-әҫәр геройҙарының эшмәкәрлеген һәм ҡылыҡтарын сағыштырып, уларҙы һүрәтләргә, портрет характеристикаһын бирергә һәм текста портреттарын табырға;

-художестволы әҫәрҙең (йәки фрагменттың) ябай планын төҙөргә;

-инша һәм нәфис әҙәбиәттең бәләкәй жанрҙары тибы буйынса телдән һәм яҙма формала ҙур булмаған текстар яҙырға;

-проза әҫәрен ролдәргә бүлеп тасуири уҡырға.

## 6-сы класс

Уҡыусы түбәндәгеләрҙе өйрәнә:

-әҙәби әҫәрҙе белеү һәм аңлау менән бәйле һорауға тулы яуап бирергә; туған телдең образлы сараларын ҡулланып, проза әҫәрҙәрен йәки уларҙың өҙөктәрен һөйләргә; диалог ҡора белергә;

-художестволы текстың мәғәнәле өлөштәрен айырып күрһәтергә, уҡылғандың планын һәм тезистарын төҙөргә; әҙәби әҫәрҙәрҙең эпизодтарын һәм уларҙың геройҙарын сағыштырырға;

-әҙәби әҫәрҙе анализларға: уның әҙәби төр һәм жанрҙарҙың береһенә ҡарағанлығын билдәләргә; теманы һәм идеяны аңларға һәм аныҡ итеп әйтеп бирергә, әхлаҡи пафосты асыҡларға, шулай уҡ сағыштырыу нигеҙендә геройҙарға характеристика бирергә;

-художестволы әҫәр темаһын асыуҙа теге йәки был персонаждың ролен асыҡларға;

-текст төйөнләнешен, кульминацияһын, сиселешен табырға;

-башҡорт шиғыр төҙөлөшөнөң (ритм һәм рифма) үҙенсәлектәрен аңлау;

-текстарҙа гиперболалар, эпитеттар, һынландырыуҙар табырға, уларҙың образдарҙы асыуҙағы ролен аңларға;

-поэма жанрының үҙенсәлектәрен билдәләргә;

-әҫәрҙәрҙең фантастик элементтарын билдәләргә;

-драма жанрын ҡылыҡһырларға;

-башҡорт фольклорының төп жанрҙарын айыра белергә, башҡорт яҙма әҙәбиәтенең нигеҙе булараҡ халыҡ ауыҙ-тел ижадының әһәмиәтен аңларға;

-туған әҙәбиәттең өйрәнелгән әҫәрҙәре менән бәйле телдән һәм яҙма фекерҙәр төҙөргә, әҙәби нормаларҙы иҫәпкә алып, туған телдә бәйләнешле телдән һәм яҙма текст төҙөргә;

-туған (башҡорт) әҙәбиәте дәреслегенә ингән әҫәрҙәргә үҙ мөнәсәбәтеңде булдырырға, уларҙың эстетик әһәмиәтен баһаларға;

-үҙаллы уҡыған әҫәрҙәргә баһалама яҙырға;

-башҡорт әҙәбиәтенең һәм мәҙәниәтенең рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрен рус һәм төрки халыҡтарҙың рухи-әхлаҡи ҡиммәттәре менән сағыштырып аңларға.

7-се класс

Уҡыусы түбәндәгеләрҙе өйрәнә:

-башҡорт фольклоры һәм яҙма әҙәбиәт буйынса өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең төп проблемаларын аңларға;

-тарихи йыр, хикәйәт жанрҙарын билдәләргә;

-әҫәрҙең конфликтын асыҡларға;

-үҙ халҡыңдың әхлаҡи идеалдары тураһында күҙаллауҙарҙы үҫтереү, милли характер тураһында күҙаллауҙар формалаштырыу өсөн нигеҙ булараҡ фольклор текстары, «Урал батыр» башҡорт эпосының әхлаҡи проблематикаһын билдәләргә;

-мәҫәл жанрын һүрәтләргә һәм мәҫәлдәрҙә ҡулланылған аллегорияларҙың асылын аңларға;

-халыҡ ауыҙ-тел ижады мотивтары буйынса ижад ителгән автор әҫәрҙәренең үҙенсәлеген билдәләргә;

-әҫәрҙәрҙән һылтанмаларҙы файҙаланып, һорауға телдән йәки яҙма яуап бирергә;

-әҙәби әҫәрҙәрҙең уларҙы ижад итеү дәүере менән бәйләнешен билдәләү, авторлыҡ позицияһын асыҡлау;

-*образ, герой, характер, конфликт, сюжет, композиция* төшөнсәләренең йөкмәткеһен дөрөҫ билдәләргә; әҙәби әҫәр геройының характерын объектив баһаларға;

-дәрестә дискуссияларҙа ҡатнашырға, асыҡ докладтар һәм хәбәрҙәр менән сығыш яһарға, ижади эштәр әҙерләргә;

-художестволы әҫәрҙәрҙән һәм тормоштан алған тәьҫораттар материалында инша яҙырға;

-китапхана фондтары, белешмә әҙәбиәт, һүҙлектәр, Интернет-ресурстар менән һөҙөмтәле файҙаланырға;

-әҫәрҙәрҙең әхлаҡи-философик, социаль-тарихи һәм эстетик проблематикаһына төшөнөүендә аңлатырға;

-фольклор әҫәрҙәре һәм яҙма әҙәбиәт әҫәрҙәре араһында тематика, проблематика, образдар кимәлендә (оҡшашлыҡ һәм айырмалыҡ принцибы буйынса) бәйләнеш урынлаштырырға;

-халыҡ ижадында сағылған башҡорт милли характер һыҙаттарын билдәләргә;

-текста сатирик һыҙаттарҙы күрергә;

-үҙ мөнәсәбәтеңде билдәләп, авторлыҡ позицияһын асыҡларға һәм уның нигеҙендә үҙеңә әһәмиәтле йүнәлештәр билдәләргә.

## 8-се класс

Уҡыусы түбәндәгеләрҙе өйрәнә:

-башҡорт сәсәндәр ижадының үҙенсәлектәрен, уның фольклор һәм яҙма әҙәбиәт менән бәйләнешен аңларға;

-башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәрендә асылған төп проблемаларҙы, уларҙа һүрәтләнгән ваҡиғаларҙың яҙылыу дәүере һәм хәҙерге заман менән бәйләнешен аңларға; өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең әхлаҡи-эстетик ҡиммәтен асыҡларға;

-романдың художество үҙенсәлектәрен, телдең һәм жанр стиленең үҙенсәлеген белергә;

-әҫәр геройҙарына мөнәсәбәтте дәлилләргә, геройҙарҙың ҡылыҡтарын аңлатырға, уларҙың үҙҙәрен тотошон, кисерештәрен, портреттарын, телмәрен сағыштырырға һәм баһаларға, автор баһаһын табырға;

-әҙәби әҫәрҙе анализларға: уның ҡайһы әҙәби төргә һәм жанрға ҡарағанлығын билдәләргә, әҙәби әҫәрҙең темаһын, идеяһын һәм пафосын аңларға һәм формалаштырырға, геройҙарға характеристика бирергә (шул иҫәптән бер йәки бер нисә әҫәр геройҙарын сағыштырыу нигеҙендә), сюжет һәм композиция элементтарын, телдең һынлы сәнғәт сараларын, әҫәрҙең идея-художество йөкмәткеһен асыуҙа уларҙың ролен билдәләргә;

-төрлө әҙәбиәт ғилеме мәғлүмәте сығанаҡтары менән эшләргә һәм уны эшкәртеүҙең төп алымдарын һәм презентациялауҙы белергә;

-текстарҙа антитеза алымын табырға;

-үҙ аллы уҡыу-тикшеренеү эшмәкәрлеген алып барырға һәм уның һөҙөмтәләрен төрлө формаларҙа (тикшеренеү эше, реферат, проект) яҙырға;

-бер жанрға ҡараған әҫәрҙәрҙә яҙыусыларҙың яҡын темаларҙы асыуында уртаҡлыҡты һәм айырмалыҡты күрергә;

-яҙыусы ижад иткән картиналарҙы (пейзаж, портрет, интерьер) тасуирларға;

-текстың һылтанмалы (цитатный) планын төҙөргә;

-һүҙҙең нәфис текстағы күп мәғәнәлелеген аңларға, яҙыусының портрет һүрәтләмәләрендә һәм персонаждарҙың телмәрендә ҡулланған сағыштырыуҙарҙың, эпитеттар һәм метафорҙарҙың функциональ ролен билдәләү нигеҙендә ваҡиғаларға ҡарата авторҙың мөнәсәбәтен асыҡларға.

## 9-сы класс

Уҡыусы түбәндәгеләрҙе өйрәнә:

-туған әҙәбиәтте милли, дөйөм Рәсәй һәм донъя мәҙәниәте күренеше, башҡорт халҡының рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрен һәм традицияларын һаҡлау һәм тапшырыу сараһы булараҡ аңларға;

-шәхси үҫеш һәм үҙ-үҙеңде камиллаштырыу өсөн туған телдә уҡыуҙың әһәмиәтен аңларға;

-туған әҙәбиәттең тарихи-әҙәби процесс булараҡ үҫеш законлыҡтарын рус һәм илебеҙҙәге башҡа халыҡтарҙың әҙәбиәттәре менән диалектик бәйләнештә аңларға;

-йола поэзияһының үҙенсәлектәрен белергә;

-төрлө жанрҙағы текстарҙың йөкмәткеһен һәм үҙенсәлеген аңлы рәүештә ҡабул итергә һәм баһаларға, уларҙы тикшереүҙә ҡатнашырға; геройҙарҙың ҡылыҡтарына дәлилле әхлаҡи баһа бирергә;

-шиғырҙа кәйефтең (интонацияның) үҙгәреүен күҙәтергә;

-персонаждарҙың эш-ғәмәлдәрендә сәбәп-эҙемтә бәйләнештәрен билдәләргә, иң әһәмиәтле художестволы деталдәрҙе, сюжет һәм композиция элементтарын, әҫәрҙең проблематикаһын һәм идея ниәтен, художество сараларын һәм уларҙың функцияларын билдәләргә;

-әҫәр геройҙарына мөнәсәбәтте дәлилләргә, геройҙарҙың үҙ-үҙен тотоу мотивтарын аңлатырға, уларҙың ҡылыҡтарын, кисерештәрен, портреттарын, телмәрен сағыштырырға һәм баһаларға;

-*прототип* төшөнсәһен белергә;

-хитап жанрының үҙенсәлектәрен айырып күрһәтергә;

-авторҙың геройҙарҙы, ваҡиғаларҙы баһалау формаларын, әҫәрҙең адресаты булараҡ «уҡыусы» менән үҙ-ара мөнәсәбәт характерын асыҡларға;

-художестволы әҫәр, рәссамдарҙың картиналарының репродукциялары, һүрәттәр, шулай уҡ шәхси тәжрибә нигеҙендә текст яҙырға, художество-ижади һәләттәрҙе үҫтерергә;

-тезислы план, конспект төҙөү, доклад әҙерләргә, аннотациялар, инша, эссе яҙырға, уҡыған әҫәргә, әҙәби-ижади эшкә баһа бирергә, алдан иғлан ителгән йәки үҙаллы һайланған әҙәби йәки публицистик темаға проекттар әҙерләргә;

-ҡыҙыҡһындырған әҙәбиәтте үҙ аллы һайларға, фекер алышыуҙа ҡатнашыу, аңлау һәм өҫтәмә мәғлүмәт алыу өсөн белешмә сығанаҡтарҙы файҙаланырға;

-әҫәрҙәрҙе объектив ҡабул итеү һәм баһалау маҡсатында бер йәки төрлө авторҙың өйрәнелгән һәм үҙ аллы уҡылған художестволы тексын, персонаждар образын, әҙәби күренештәрҙе һәм факттарҙы, сюжеттарҙы, темаларҙы һәм проблемаларҙы, жанрҙарҙы, стилдәрҙе, алымдарҙы, эпизодтарҙы, деталдәрҙе сағыштырырға;

-башҡорт әҙәбиәте әҫәрҙәрен Рәсәйҙең башҡа халыҡтары әҫәрҙәре менән сағыштырырға, уларҙың оҡшашлығын һәм милли үҙенсәлеген асыҡларға, уларҙы объектив баһаларға;

-әҫәрҙәрҙе анализлау процесында тормош һәм уҡыу тәжрибәһенә нигеҙләнгән үҙеңдең нигеҙле ҡарашыңды белдерергә;

-туған әҙәбиәт буйынса үҙ аллы уҡытыу-тикшеренеү һәм проект-тикшеренеү эшмәкәрлеген бойомға ашырырға, уның һөҙөмтәләрен дөрөҫ юлларға.

## ТЕМАТИК ПЛАНЛАШТЫРЫУ

Программаны тормошҡа ашырғанда уҡытыу-методик материалдары булған (мультимедиа программалары, электрон дәреслектәр һәм әсбаптар, электрон китапханалар, виртуаль лабораториялар, уйын программалары, цифрлаштырылған белем биреү ресурстары коллекциялары) электрон (цифрлаштырылған) белем биреү ресурстарын файҙаланыу мөмкинлектәре иҫәпкә алынырға тейеш (2-се ҡушымта).

Тематик планлаштырыуҙа темаларҙы өйрәнеүгә, ҡабатланыуға һәм төрлө ижади/тикшереү/контроль эштәренә бүленгән сәғәттәр һаны күрһәтелгән.

Бер класс сиктәрендәге темаларҙы өйрәнеү тәртибе үҙгәреүе ихтимал.

Уҡыусылар эшмәкәрлегенең төп төрҙәре һәр теманы тикшергәндә һанап үтелгән һәм уҡыуҙың планлаштырылған һөҙөмтәләренә өлгәшеүгә йүнәлтелгән.

### 5-се класс – 34 сәғәт.

Дөйөм сәғәттәр һаны – 34, шуларҙың 8 сәғәте – тикшереү эштәренә / проект эштәре һөҙөмтәләрен күрһәтеүгә, 1 сәғәте – резервҡа бүленә.

| Тематик блоктар, темалар | Төп йөкмәткеһе | Уҡыусылар эшмәкәрлегенең төп төрҙәренә характеристика |
|---|---|---|
| **ХӘҘЕРГЕ БАШКИРСКАЯ ӘҘӘБИӘТЕ (1 с.)** | | |
| Инеш. Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гимны менән таныштыу. (1 с.) | **Инеш.** Туған әҙәбиәт – халыҡтың милли теле – башҡорт теле – нәфис әҙәбиәт теле кеүек төшөнсәләрҙе асыҡлау. Телдән (яҙыу үҫешкәнгә тиклем) йәки яҙма рәүештә һүҙ ярҙамында тормошто сағылдырыусы сәнғәттең бер төрө булараҡ нәфис әҙәбиәт. Әҙәби әҫәр үҙәгендә кеше образы тороуы, ижтимағи үҫеш процесында уның матди һәм рухи тормошо. Борон, кешеләр яҙыу танымағанда, ижад телдән үҫешкәндә – Башҡорт халыҡ ижадын, фольклорҙы таратыусы таратыусы кешеләр булыуы, уларҙы сәсән исеме менән атауҙары. Яҙыу барлыҡҡа килеү менән яҙыусыларҙың да барлыҡҡа килеүе.<br>Нәфис әҙәбиәттән тыш, үҫемлектәр, | Йәмғиәт һәм дәүләт тормошонда, хәҙерге донъяла, кеше тормошонда туған әҙәбиәттең роле;<br>туған әҙәбиәтте өйрәнеү Республиканың һәм илдең тарихын һәм мәҙәниәтен яҡшыраҡ белергә мөмкинлек биреүен раҫлаған миҫалдар табыу (өйрәнелгәндәр сиктәрендә);<br>Башҡортостан Республикаһының дәүләт гимны тексын өйрәнеү һәм уны ҡулланыу ҡағиҙәләре; уҡытыусының уның барлыҡҡа килеүе, тәғәйенләнеше, йөкмәткеһе тураһында аңлатмаларын тыңлау; башҡа музыкаль әҫәрҙәрҙең билдәләре менән оҡшашлыҡтарын һәм айырмаларын билдәләү. |

| | | |
|---|---|---|
| | хайуандар донъяһы, тарихи ваҡиғалар, фәнни асыштар тураһында һөйләүсе фәнни-популяр китаптар булыуы. | |
| **XIX – XX БЫУАТ БАШЫ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ (7 с.)** | | |
| **Ризаитдин Фәхретдинов (1859–1936)**. Автор ижады хаҡында төп информация. Мәғрифәтсе, яҙыусы-ғалим, тарихсы, шәрҡиәтсе, дин әһеле һәм йәмәғәт эшмәкәре. Нәсихәттәр, «Белем».<br>**Мәжит Ғафури (1880–1934)**. Автор ижады хаҡында төп информация. Башҡорт АССР-ның халыҡ шағиры (1923), совет башҡорт һәм татар әҙәбитәттәре, поэзияһы классигы, фольклорсы, драматург. «Нурлы мәктәп» шиғыры.<br>**Рәшит Ниғмәти (1909–1959)**. Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡорт АССР-ның халыҡ шағиры (1959), башҡорт совет балалар яҙыусыһы, драматург, тәржемәсе. «Хәйерле юл һеҙгә!» шиғыры.<br>(1 с.). | Кеше тормошонда белемдең роле. Мәктәптә белем биреү һәм хеҙмәт тәрбиәһе темаһына мөрәжәғәт итеү. Яңы белемдәрҙе яҡты киләсәк менән арттырыу. Шиғырҙарҙа мәктәп һәм укытыусы образы. Йәйге каникулдар һәм әҫәрҙәрҙә уҡыуҙың беренсе көнөнөң һүрәтләнеше. Ватанға мөхәббәт темаһы, уҡыу һәм хеҙмәт темаһы.<br>*Әҙәбиәт теорияһы: лирик герой.* | «Нәсихәттәр»ҙе һәм шиғырҙарҙы тасуири уҡыу; әҫәрҙәрҙе тасуири укығанда хис-тойғоларҙы тапшырыу; текст буйынса һорауҙар билдәләү; дәреслек һәм укытыусы һорауҙарына яуап әҙләү;<br>текста эпитеттар, сағыштырыуҙар һәм һынланыштарҙың табыу, төп фекерҙе асыуҙа уларҙың ролен билдәләү; һүҙлектәр менән эшләү; фекерҙәр һәм эмоциялар ҡарашынан, һүрәтләнгән картиналары йәһәтенән бер темаға яҙылған шиғырҙарҙы сағыштырыу, дөйөм һәм үҙенсәлекле яҡтарын асыҡлау. |
| **Раил Байбулатов (1937-2002).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡорт яҙыусыһы, тәржемәсе, драматург һәм журналист. «Ағас һәйкәл» хикәйәһе. | Дуҫлыҡ һәм үҙ-ара мөнәсәбәт темаһы. Донъяға ике ҡараш: битарафлыҡ, йөрәкһеҙлек һәм гуманизм, изгелек, хикәйәнең йәш геройҙарының йәлләү хисе. Ғаиләлә балалар тәрбиәләү. Балаларҙың һәм ололарҙың үҙ-ара бәйләнешенең ҡатмарлылығы. Хәҙерге | Хикәйәне тасуири укыу, йөкмәткене үҙләштереү;<br>текст буйынса һорауҙар төҙөү, һорауҙарға яуаптар әҙерләү; әҫәрҙең темаһын һәм идеяһын билдәләү;<br>авторлыҡ позицияһын аңлатыу; образдар системаһын анализлау, укыусыларға иң яҡын булған образдарҙы асыҡлау; хикәйәне һөйләү. |

| | | |
|---|---|---|
| (2 с.) | тормоштоң актуаль проблемалары. Геройҙың хистәрен күрһәтеү, үҙ эшенде анализлау. Авторҙың кеше тормошонда белем һәм тәрбиә роле тураһындағы уйҙары. Хикәйә темаһы, сюжет, идея мәғәнәһе. Хикәйә исеменең мәғәнәһе. | |
| **Мостай Кәрим (1919-2005).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡорт АССР-ның халыҡ шағиры (1963), яҙыусы һәм драматург, йәмәғәт эшмәкәре. «Уҡытыусыма» шиғыры.<br>**Назар Нәжми (1918-1999).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡортстан Республикаһының халыҡ шағиры (1992), публицист, драматург, мемуарист. «Беренсе дәрес» шиғыры.<br>(1 с.) | Шәхес формалашыуҙа һәм үҫешендә тәүге уҡытыусының роле, беренсе дәрестең әһәмиәте. Белем, хөрмәт, яҡындарыңа мөхәббәт, мәңгелек ҡиммәттәр, әхлаҡи төшөнсәләр һәм оло тормошҡа аяҡ баҫырға ярҙам иткәндә уҡытыусылар күңеленең бер өлөшөн һалыуҙары өсөн шағирҙарҙың рәхмәт темаһы. | Шиғырҙарҙы тасуири уҡыу, йөкмәткеһен үҙләштереү, идеяны һәм теманы билдәләү; шиғырҙар буйынса һорауҙар төҙөү, һорауҙарға яуаптар әҙерләү; шиғырҙың художестволы-һүрәтләү сараларын ҡулланып уҡытыусыға характеристика биреү; Мостай Кәримдең һәм Назар Нәжмиҙең тормошо һәм ижады тураһында материалдар һайлап алыу; яңы белемдәрҙе дөйөмләштереү. |
| **Дауыт Юлтый (1893-1938).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡорт совет яҙыусыһы, драматург, журналист һәм йәмәғәт эшмәкәре. «Көҙ» шиғыры.<br>**Ғилемдар Рамазанов (1923-1993).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡорт совет шағиры, әҙәбиәт белгесе, тәржемәсе, филология фәндәре докторы. «Ураҡ өҫтө» шиғыры.<br>1 с.) | Тәбиғәттең матурлығы, ҡышҡа әҙерлек. Тәбиғәтте тасуирлау: төрлө төҫтәр берлеге, алтын япраҡтарҙың ғәжәйеп балҡыуы, көҙгө күктең һоро төҫ менән алмашыныуы, ҡурғаш ямғыр болоттары. Төнгө тынлыҡҡа иҫәбенә ҡыҫҡарыусы көн. Йылдың һәр миҙгеленең матурлығын сағылдырыу.<br>Игенсенең маҡтаулы һәм яуаплы хеҙмәте темаһы. Урып-йыйыу шатлығын тасуирлау. Кеше тормошонда икмәктең роле һәм урыны. Игенсенең хеҙмәтен поэтикалаштырыу.<br>*Әҙәбиәт теорияһы:* сағыштырыу. | «Көҙ» һәм «Ураҡ ваҡыты» шиғырҙарын тасуири уҡыу, теманы асыу, йөкмәткене үҙләштереү;<br>Текста эпитеттар, сағыштырыу һәм һүрәтләүҙәрҙе таба белеү, төп фекерҙе асыуҙа уларҙың ролен асыҡлау. |

| | | |
|---|---|---|
| **Али Карнай (1904-1943).** Яҙыусы хаҡында ҡыҫҡаса хикәйә. Башҡорт яҙыусыһы һәм тәржемәсеһе, журналист, хәрби корреспондент. «Урманда» повесы. «Турғай» хикәйәһе.<br>(2 с.) | Әҫәрҙәрҙә тәбиғәт образы. Тәбиғәт картиналарын тасуирлау аша авторҙың күңел торошон, кәйефен белдереү. Яҙыусының тәбиғәтте ҡабул итеүҙәге дөйөм һәм шәхси ҡарашы. Йөкмәткелә аллегория. Образдар, әҫәрҙәрҙең художестволы, персонаждарҙың характер үҙенсәлектәре. Йылан, Турғай һәм Ҡарға образдарында яҡшылыҡ һәм яуызлыҡ, мөхәббәт һәм нәфрәт, бер-береңә ярҙам итеү һәм көнләшеү, мәкерле һәм яҡты уйҙарҙың сағылышы. Тәбиғәттә, кеше күңелендәге матурлыҡтың ҙур ролен аңлау. Яҙыусының кеше һәм тәбиғәт бәйләнеше, уларҙың айырылғыһыҙлығы тураһында уйланыуҙары. Авторҙың художестволы образлылығының үҙенсәлектәре.<br>*Әҙәбиәт теорияһы: тасуирлау, аллегория.* | Хикәйә һәм повесть тексын уҡыу, аңлашылмаған һүҙҙәрҙе ҡысҡырып әйтеү; хикәйә һәм повесть тексында оҡшаған урынды уҡыу; текстың өҙөктәрен һайлап укыу һәм әңгәмә менән оҙата барыу; йөкмәткеһен анализлау; повестың йөкмәткеһе буйынса һорауҙар төҙөү һәм уларға яуаттар табыу; хикәйә һәм повестың йөкмәткеһе буйынса план төҙөү һәм уларҙы өлөштәргә бүлеү; образдарға ҡылыҡһырлама биреү; әҫәрҙәр тексында аллегория алымын табыу; хикәйәләү һәм тасуирлау үҙенсәлектәрен билдәләү; әҙәби әҙәрҙәр тексын һөйләү;<br>«Көҙгө урман» темаһына хикәйә төҙөү. |
| «Минең яраткан мәктәбем».<br>Проект, тикшеренеү эштәрен тәҡдим итеү.<br>1-се тикшереү эше.<br>(1 с.) | Проекттар, тикшеренеү эштәренең һөҙөмтәләре менән таныштырыу. | Тикшеренеү эштәре һөҙөмтәләрен класс алдында күрһәтеү; презентация маҡсатын иҫәпкә алып, сығыш форматын билдәләү, телдән һәм яҙма текстар төҙөү; үтелгән материалдарҙы һәм үҙ мөмкинлектәрендә иҫәпкә алып, мәсьәләләрҙе сисеү юлын үҙ аллы төҙөү, мультимедиа программаларын, электрон дәреслектәрҙе, электрон китапхана материалдарын файҙаланып, тәҡдим ителгән сиселеш варианттарын дәлилләү;<br>Эш планын үҙ аллы төҙөү, уны тормошҡа ашырыу барышында кәрәкле төҙәтмәләр индереү. |
| **БАШҠОРТ СОВЕТ ӘҘӘБИӘТЕ. ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ (8 с.)** | | |
| **Баязит Бикбай (1909-1968).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡорт шағиры, прозаик, драматург, либреттист. «Туған | Кеше һәм йәмғиәт тормошонда туған тел һәм рус телдәренең роле һәм әһәмиәте, уларҙың функциялары – социум йәшәйешенең мөһим яғы. Тел – рухи һәм мәҙәни | «Туған тел» һәм «Рус теле» шиғырҙарының идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү, тасуири укыу, текста эпитеттарҙы, сағыштырыуҙарҙы һәм һүрәтләүҙәрҙе табыу, төп фекерҙе асыуҙа уларҙың |

| | | |
|---|---|---|
| тел» шиғыры. «Рус теле» шиғыры.<br>(1 с.) | ҡиммәттәрҙе һаҡлаусы. Күренекле кешеләрҙең һүҙҙәрен килтереү һәм уларҙы шәхси байлыҡтан йәмғиәттең рухи байлығына әйләндереү. Милләт-ара аралашыу теле аша төрлө халыҡтарҙың үҙ-ара аңлашыуына ирешеү. | ролен билдәләү; тематиканы асыу; әҫәрҙәрҙең тексы буйынса һорауҙар төҙөү, һорауҙарға яуаптар әҙерләү. |
| **Рәми Ғарипов (1932-1977).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡортостан Республикаһының халыҡ шағиры (1992), тәржемәсе. «Туған тел» шиғиры.<br>**Ҡәҙим Аралбай (1941).** Башҡортостан Республикаһының халыҡ шағиры (2011). Авторҙың тормошо һәм ижады. «Башҡорт теле» шиғыры.<br>(1 с.) | Туған телебеҙҙең матурлығы һәм байлығы. Туған телгә хөрмәт һәм мөхәббәт. Йәмғиәт тормошонда, уҡыусыларҙың шәхесен формалаштырыуҙа, рухи байлыҡҡа, мәҙәниәткә йәлеп итеүҙә телдең роле. | Шиғырҙарҙы тасуири уҡыу, йөкмәткеһен, тематикаһын, идея нигеҙен үҙләштереү;<br>текст буйынса һорауҙар төҙөү, һорауҙарға яуаптар әҙерләү, аңлайышһыҙ һүҙҙәрҙе эҙләү һәм уларҙың мәғәнәһен аңлатыу; һәр шиғырҙың лирик геройын билдәләү һәм уларға ҡылыҡһырлама биреү, тасуирлау сараларын һәм художество деталдәрҙе анализлау, әҫәрҙә уларҙың ролен аңлатыу;<br>«Туған тел», «Башҡорт теле» шиғырҙарын яттан һөйләү. |
| **Фәрзәнә Аҡбулатова (1960).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡорт яҙыусыһы, журналист. «Атай икмәге» хикәйәһе.<br>(2 с.) | XX быуаттағы тормош-көнкүреш картиналары, уларҙың характерҙарҙы һәм хикәйә идеяларын аңлау өсөн әһәмиәте. Әҫәрҙең реалистик нигеҙе. Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында тылдағы балаларҙың һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауыр яҙмышы, уларҙың хыялдарын хикәйәләү. Изгелек, үҙ-ара аңлашыу идеяһы. Балалар һәм ололар мөнәсәбәттәре. Хикәйә геройҙарының рухи байлығы. Хикәйәлә балалар образы һәм уларҙы һүрәтләү үҙенсәлектәре. Кескәй геройҙарҙың сабырлығы һәм сыҙамлылығы. Балаларҙың эске, рухи матурлыҡ көсө. Хәл-ваҡиғаларға авторҙың мөнәсәбәте – авторҙың балалар яҙмышы өсөн ғазаптары. Кешегә ҡарата ҡыҙғаныу һәм хөрмәт кәрәклеген аңлау. Балаларҙы йәлләү хисе. Һәр бер кеше | Комментарий һәм әңгәмә менән хикәйә тексын уҡыу; хикәйәнең идея-тематик йөкмәткеһен билдәләү; әҫәрҙең йөкмәткеһе буйынса һорауҙар төҙөү; һорауҙарға яуаптар әҙерләү, персонаждарға тексҡа таянып ҡылыҡһырлама биреү; әҫәр өҙөгөн һайлап алып ҡыҫҡаса һөйләү; хикәйә геройҙарының телдән портретын һүрәтләргә мөмкин булған һүҙҙәрҙе табыу һәм уҡыу; персонаждарҙың яҙмышын элек уҡыған әҫәр геройҙары менән сағыштырыу;<br>хикәйәнең төп фекерен сағылдырған өҙөктө табыу; хикәйәнең төп ваҡиғаһы урынынан репортаж яһау. |

| | | |
|---|---|---|
| | шәхесенең ҡабатланмаҫлығы һәм ҡиммәте. Хикәйәнең гуманистик пафосы һәм уның исеменең мәғәнәһе. | |
| **Хәйҙәр Тапаҡов (1955).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Шағир, яҙыусы, публицист. «Бибинур «улусяй»» хикәйәһе.<br>(1 с.) | Хәҙерге ҡала тормошо. Ата-әсәләрҙе ауылдан ҡалаға күсереү. Быуындар бәйләнеше. Аталар һәм балалар проблемаһы. Туған телдең роле. Милли традицияларҙан һәм гөрөф-ғәҙәттәрҙән ситләшеү проблемаһы. | Хикәйәне тасуири уҡыу; әҫәрҙең йөкмәткеһе буйынса һорауҙар төҙөү; класташтарҙың һорауҙарына яуаптар әҙерләү; авторҙың хикәйәлә ҡуйған проблема тураһында әңгәмәлә ҡатнашыу; хикәйә атамаһының поэтик нигеҙен асыҡлау. |
| **Ризаитдин Фәхретдинов (1859-1936).** Автор биографияһы тураһында төп мәғлүмәт. Сығышы. Үҫеш йылдары. Тәүге Өфө осоро. Ырымбур осоро. Икенсе Өфө осоро. «Китап һәм уҡыу» «Нәсихәттәр» китабынан өҙөк.<br>**Мәжит Ғафури (1880-1934).** Автор биографияһы тураһында төп мәғлүмәт. «Балалар һәм китап» шиғыры.<br>**Яҡуп Ҡолмой (1918-1994).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Шағир һәм журналист. «Ҡыҙыҡлы китап» шиғыры.<br>**Нәжип Иҙелбаев (1912-1991).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Шағир, яҙыусы, драматург, тәржемәсе һәм журналист. «Иң яҡын дуҫ» шиғыры.<br>(1 с.) | Китапның бала тормошондағы роле. Китаптың баланың донъя тураһындағы ҡарашын киңәйтеү өсөн хеҙмәт итеүе. Китап – мәғлүмәт сығанағы һәм кешенең дуҫы. | Шиғырҙарҙы тасуири уҡыу, хис-тойғоларҙы тапшырыу; текст буйынса һорауҙар төҙөү; дәреслек һәм уҡытыусы һорауҙарына яуаптар; һүрәтләү сараларын табыу; һүҙлектәр менән эшләү;<br>бирелгән картиналар, уй-фекерҙәр һәм хис-тойғолар ҡарашынан сығып бер темаға яҙылған шиғырҙарҙы сағыштырыу, дөйөм һәм үҙенсәлекле яҡтарын асыҡлау;<br>кеше тормошонда китаптың ролен билдәләү. |
| **Динис Бүләков (1944-1995).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡорт яҙыусыһы һәм йәмәғәт | Халыҡтар берҙәмлеген хикәйәләү һәм Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында Ватанды азат итеү өсөн көрәш. Совет халҡының патриотизмы һәм | Хикәйәне тасуири уҡыу һәм уҡыған буйынса әңгәмә ҡороу; хикәйәнең планын һәм әҫәр йөкмәткеһе буйынса һорауҙар төҙөү; геройҙарҙың эш- |

| | | |
|---|---|---|
| эшмәкәре. «Яралы китап» хикәйәһе.<br>(2 с.) | рухи көсө. Әҫәрҙең идея-художестволы мәғәнәһе, реалистик үҙенсәлектәр, әҫәрҙең структураһы. | ҡылыҡтарын сағыштырыу нигеҙендә ҡылыҡһырлама биреү; теманы һәм идеяны билдәләү; теманы тормошсан ысынбарлыҡ менән сағыштырыу; Бөйөк Ватан һуғышы геройҙары һәм ҡатнашыусылары тураһында хәтер; үҙ позицияңды дәлилләү. |
| «Китап – белем шишмәһе». Проект, тикшеренеү эштәрен тәҡдим итеү.<br>2-се тикшереү эше.<br>1 с.) | Проекттар, тикшеренеү эштәренең һөҙөмтәләре менән таныштырыу. | Тикшеренеү эштәре һөҙөмтәләрен класс алдында күрһәтеү; презентация маҡсатын иҫәпкә алып, сығыш форматын билдәләү, телдән һәм яҙма текстар төҙөү; үтелгән материалдарҙы һәм үҙ мөмкинлектәреңде иҫәпкә алып, мәсьәләләрҙе сисеү юлын үҙ аллы төҙөү, мультимедиа программаларын, электрон дәреслектәрҙе, электрон китапхана материалдарын файҙаланып, тәҡдим ителгән сиселеш варианттарын дәлилләү;<br>эш планын үҙ аллы төҙөү, уны тормошҡа ашырыу барышында кәрәкле төҙәтмәләр индереү. |
| **БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ (8 с.)** | | |
| **«Урал батыр» эпосы**<br>(2 с.) | Башҡорт милли эпосы «Урал Батыр» – халыҡтың бөтмәҫ-төкәнмәҫ байлығы. Эпос геройының фиҙәкәрлеге һәм юғары выжданлылығы, уның донъя үҫешенә баһалап бөтөргөһөҙ өлөшө. Халыҡ бәхете өсөн көрәш идеяһын раҫлау. Эпостың әхлаҡ проблемаһы. Эпоста яҡшылыҡ һәм яуызлыҡтың көрәше. Ике бер туған Урал һәм Шүлгәнгә сағыштырма характеристика. Геройлыҡ тураһында халыҡ күҙаллауы. Патриотик һәм гуманистик мәғәнә.<br>Шиғыр үҙенсәлектәре һәм ритмикаһы. Тарихи һәм мифологик нигеҙ. Әкиәт деталдәренең роле.<br>*Әҙәбиәт теорияһы:* эпос. | Эпостан өҙөк уҡыу; геройҙарға, ваҡиғаларға, шиғри үҙенсәлектәргә һәм ритмикаға мөнәсәбәтеңде белдереү; үҙ ҡарашыңды дәлилләү; эпостың жанр үҙенсәлектәре тураһында әңгәмә; эпостың художестволы-һүрәтләү сараларын ҡулланып геройҙарға ҡылыҡһырлама биреү;<br>инша яҙғанда файҙаланырға мөмкин булған һүҙҙәрҙе һәм әйтемдәрҙе эпостан табыу;<br>тыуған төйәктең тарихи үткәне менән танышыу. |
| **Башкорт халык әкиәттәре**<br>(4 с.) | «Урал батыр», «Аҡъял батыр», «Алпамыша батыр», «Ҡамыр-батыр». Батыр образы | Әкиәттәр тексын уҡыу һәм абзацтың, әкиәт өҙөгөнөң төп мәғәнәүи һүҙҙәрен айырып күрһәтеү; |

| | | |
|---|---|---|
| | символикаһы. Ҡамыр батыр, Алпамыша батыр һәм уның дуҫтары. Әкиәттә һынау темаһы. Үҙ бәхетең һәм халҡың бәхете өсөн көрәш идеяһын раҫлау. Әкиәттәрҙең әхлаҡи проблемаһы.<br>«Аҙашҡан» сюжеттар. Әкиәт геройы һәм уның төрҙәре. Тылсымлы ярҙамсы һәм тылсымлы әйберҙәр, уларҙың тылсымлы әкиәттәрҙәге роле. Әкиәттәр теле. Фольклор әкиәтендә сәсән образы.<br>*Әҙәбиәт теорияһы:* композиция, сюжет (танышыу).<br>«Әминбәк» әкиәте. Төрлө һөнәрҙәр барлығы тураһында. Хеҙмәттең кеше тормошондағы әһәмиәте. Ата-әсәләрҙең улдарының һөнәр һайлауындағы роле һәм теләге. Әминбәктең фән һәм сәнғәт юлын һайлауы. Төрлө һөнәр эйәләренә хөрмәтле һәм изгелекле ҡараш тәрбиәләү.<br>*Әҙәбиәт теорияһы*: синонимнар, омонимнар.<br>«Ҡәмән менән Сәмән, картуф сәскән Сәлмән» әкиәте – өс бер туғанға сағыштырма характеристика Хеҙмәттең әһәмиәте тураһында халыҡ күҙаллауы. Халыҡҡа хеҙмәткә баһаһы. Әкиәттәрҙең әхлаҡи проблемаһы. «Өс» һаны – башҡорт фольклорының үҙгәрешһеҙ атрибуты.<br>«Айыу менән бал ҡорттары» әкиәте. Айыу менән кешенең бал ҡорттарына мөнәсәбәтен сағыштырыу. Ауыр минуттарҙа бер-береңә терәк булыу һәм ярҙам итеү. Изгелек һәм ғәҙеллек. Кешенең бал ҡорттарын ҡулға эйәләштереүе. Тәбиғәтте һаҡлау. | уҡылған материал буйынса һорауҙарға яуап биреү; әкиәт өҙөктәрен ҡыҫҡаса һәм һайлап алып һөйләү; әкиәттәрҙе ролдәргә бүлеп уҡыу; теманы һәм әкиәттәрҙең төп фекерен билдәләү;<br>хайуандар тураһындағы, көнкүреш һәм тылсымлы әкиәттәрҙең героик әкиәттәрҙән айырмаһын билдәләү;<br>персоналдарға халыҡ ижады тексынан өҙөктәр килтереп ылыҡһырлама биреү; әкиәттәрҙең әхлаҡи пафосын асыҡлау; художестволы алымдарҙы асыҡлау: гипербола, парлы һәм өс тапҡыр ҡабатланыусы эпитеттарҙы билдәләү. |

| | | |
|---|---|---|
| **Башҡорт халыҡ ижадының бәләкәй жанрҙары**<br>**Мәҡәлдәр. Әйтемдәр**<br>(1 с.) | Фольклорҙың бәләкәй жанрҙарының төрлөлөгө. Иң популяр фольклор жанрҙары булараҡ мәҡәл, әйтем, йомаҡ. Тематиканың байлығы һәм төрлөлөлөгө, мәҡәлдәр һәм әйтемдәрҙе телмәргә һәм художестволы текст әҫәрҙәренә индереү формалары һәм алымдары. Мәҡәлдәр фекер тамамланыуы йәһәтенән, һөйләмдә роле буйынса әйтемдәрҙән айырмалы булыуы. Башҡа фольклор жанрҙары менән бәйләнеш. Телмәрҙе фольклорҙың бәләкәй формалары менән даими байытыу процессы. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр темаһы. Мәҡәлдәрҙең һәм әйтемдәрҙең афористик һәм хикәйәләү характерлы булыуы. Әйтемдәр. Образлы уйҙар. Йомаҡтарҙың метафора, һүҙ уйынының төрө булыуы.<br>*Әҙәбиәт теорияһы:* әҙәби төшөнсәләр һәм терминдар: мәҡәл, әйтем, афоризм; мәҡәлдәрҙең, әйтемдәрҙең төп жанр үзенсәлектәрен билдәләү.<br>Йомаҡ<br>Йомаҡ – фольклорҙың бер жанры һәм зирәклекте, отҡортлоҡто билдәләүсе иң боронғо «текст» формаһы булараҡ. Йомаҡтар уйлап табыу процессының үҙенсәлектәре; фольклорҙа һәм хәҙерге әҙәбиәттә метафораның роле һәм йомаҡтарҙың урыны. Йомаҡ структураһының үҙенсәлектәре. Йомаҡ ҡойоу, яуабын табыу.<br>*Әҙәбиәт теорияһы:* метафора. | Мәҡәл һәм әйтемдәр араһындағы айырманы билдәләү; «мәҡәл», «әйтем» төшөнсәләрен үҙләштереү; йәнле һөйләү телмәрендә йомаҡтарҙы, мәҡәлдәрҙе һәм әйтемдәрҙе ҡулланыу;<br>башҡортса мәҡәл-әйтемдәрҙең йөкмәткеһенә ярашлы бәләкәй күләмле инша яҙыу; мәҡәл һәм әйтемдәр һүҙлектәрен ҡулланыу; йомаҡта күрһәтелгән билдәһеҙ объект билдәләрен айырып күрһәтеү, анализлау, асыҡланған билдәләрҙе берләштереү, улар араһында бәйләнештәр булдырыу, предмет йәки күренештең артыҡ билдәләрен берләштереү, абстрактлаштырыу, иҫбатлау формаһында материалды теҙеп биреү, билдәләрен асыҡлау, бәйләнештәрен дөйөмләштереү, йомғаҡлау;<br>йомаҡтар сисеү. |
| **Башҡорт халыҡ йырҙары. Таҡмаҡтар**<br>(1 с.) | Музыкаль-һүҙ сәнғәте формаһы булараҡ йыр. Халыҡ йырҙарының төрҙәре, уларҙың темалары. Такмаҡ йыр фольклорының бер төрө | Иҫкергән һүҙҙәр һүҙлеген төҙөү, йырҙар һәм таҡмаҡтар тексын аңлатыу;<br>йырҙарға хас булған художество алымдарҙы |

| | | |
|---|---|---|
| | булараҡ. Йыр һәм таҡмаҡтарҙа шиғыр һәм көй. Был жанрҙарҙың популярлығының сәбәптәре.<br>*Әҙәбиәт теорияһы:* шиғыр мелодикаһы. | асыҡлау; телдән һөйләү, йырҙар тексы буйынса һорауҙарға яуап биреү; үҙ фекереңде дәлилләү; йыр төрҙәрен характеристикалау; уларҙың тематикаһын билдәләү;<br>таҡмаҡтар һәм йыр жанры айырмаһын табыу;<br>халыҡ йырҙарын башҡарыусылар (А. Солтанов, С. Абдуллин, Ф. Килдейәрова, М. Хисмәтуллин, Р. Йәнбәков һәм башҡалар) аудиояҙмаһын тыңлау; таҡмаҡтар ритмын анализлау; ижади эш: уҡыусылар араһында таралған таҡмаҡтарҙы йыйыу; үҙ класыңдың тормошо хаҡында таҡмаҡтар яҙыу. |
| **XI – XVIII БЫУАТ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ (2 с.)** | | |
| **Салауат Юлаев (1754-1800).**<br>(2 с.) | Биографияһы. Башҡорт милли геройы (батыр) һәм шағир-сәсән 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиән һуғышында ҡатнашыусы, Емельян Пугачевтың көрәштәше. «Ҡайтып киләм», «Яуҙа яраланғас...», «Йырҙарҙан» шиғырҙары... Идея һәм йөкмәткеһе. Дүрт юллыҡ йырҙар. Халык ижадында һәм әҙәбиәттә Салауат образы. | Уҡытыусы уҡыған тексты тыңлау; шиғырҙар тексын аңлатмалар һәм әңгәмәләшеп уҡыу; уҡыған шиғырҙарҙың йөкмәткеһе буйынса үҙ аллы һорауҙар ҡуйыу; шағирҙың дәүере өсөн шиғырҙарҙың актуаллеген билдәләү; әҙәби әҫәрҙе ижади һөйләү (хикәйәсенең затын үҙгәртеү); Салауат Юлаевтың биографияһы һәм ижады тураһында материал йыйыу; «Салауат Юлаев – башҡорт әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе» тигән темаға инша яҙыу. |
| «Беҙҙең төбәктәге халыҡ ижады әҫәрҙәре».<br>Проект, тикшеренеү эштәрен тәҡдим итеү.<br>3-сө тикшереү эше.<br>(1 с.) | Проекттар, тикшеренеү эштәренең һөҙөмтәләре менән таныштырыу. | Тикшеренеү эштәре һөҙөмтәләрен класс алдында күрһәтеү; презентация маҡсатын иҫәпкә алып, сығыш форматын билдәләү, телдән һәм яҙма текстар төҙөү; үтелгән материалдарҙы һәм үҙ мөмкинлектәреңде иҫәпкә алып, мәсьәләләрҙе сисеү юлын үҙ аллы төҙөү, мультимедиа программаларын, электрон дәреслектәрҙе, электрон китапхана материалдарын файҙаланып, тәҡдим ителгән сиселеш варианттарын дәлилләү;<br>эш планын үҙ аллы төҙөү, уны тормошҡа ашырыу барышында кәрәкле төҙәтмәләр индереү. |
| **БАШҠОРТ СОВЕТ ӘҘӘБИӘТЕ. ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ (3 с.)** | | |

| | | |
|---|---|---|
| **Назар Нәжми (1918-1999).** Авторҙың тормошо һәм ижады. «Беренсе ҡар» шиғыры.<br>**Гөлфиә Юнысова (1948).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡортстан Республикаһының халыҡ шағиры (2015), тәржемәсе, драматург, журналист. «Ҡотло булһын Яңы йыл!» шиғыры.<br>**Сәрүәр Сурина (1957).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Шағирә, драматург, сценарист, журналист. «Ҡышты ҡаршылағанда» драмаһы.<br>**Хәсән Назар (1942).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡортстан Республикаһының халыҡ шағиры (2017), тәржемәсе, журналист. «Яуа ҡарҙар...» шиғыры.<br>(1 с.) | Шиғри телмәр. Шиғырҙың лиризмы. Шиғыр ритмы. Тәбиғәткә күҙәтеүсән эстетик, оптимистик ҡараш. Кеше һәм тәбиғәт. Тарих һәм хәҙерге заман. Тәбиғәттең үҙгәреүсән, күренер-күренмәҫ күренештәренә мөрәжәғәт итеү.<br>Тәбиғәт тылсымын шағирҙарҙың эпитеттарҙы, юлдарҙы һәм сағыштырыуҙарҙы ҡулланып һүрәтләүе.<br>*Әҙәбиәт теорияһы:* троптар, эпитет, сағыштырыу, ритм. | Әҫәрҙәрҙе тасуири уҡыу, әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен, тематикаһын, идея нигеҙен үҙләштереү;<br>текст буйынса һорауҙар төҙөү, һорауҙарға яуаптар әҙерләү, аңлашылмаған һүҙҙәр эҙләү һәм уларҙың мәғәнәһен аңлатыу; һәр шиғырҙың лирик геройын билдәләү һәм ҡылыҡһырлау; тасуирлау сараларын һәм художество деталдәрен анализлау, уларҙың әҫәрҙәге ролен аңлатыу. |
| **Рәми Ғарипов (1932-1977).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡортостан Республикаһының халыҡ шағиры (1992). «Башҡортостан» шиғыры.<br>**Ирек Кинйәбулатов (1938-2016).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡорт шағиры һәм прозаик. «Дуҫлыҡ төйәге» шиғыры.<br>**Рәшит Шәкүр (1937).** | Шиғырҙарҙың идея-тематик комплексы: тыуған Башҡортостан, сал Урал, әсә. Тыуған ер, тыуған ҡала һәм тыуған ауыл образдарының характеристикаһын төҙөү. Тыуған ергә мөхәббәт хисен һүрәтләү. Лирик герой образы. Әсә образының тыуған яҡтар менән бәйләнеше. | Шиғырҙарҙы тасуири уҡыу, йөкмәткене анализлау; һорауҙарҙы һәм уларға яуаптарҙы текст буйынса төҙөү; был текстың художестволы-һүрәтләү сараларын файҙаланып, шиғырҙың лирик геройына ҡылыҡһырлама биреү; шиғырҙарҙың тел һәм стилистик үҙенсәлектәрен билдәләү; шағирҙар ижадының художество үҙенсәлектәрен асыҡлау. |

| | | |
|---|---|---|
| Башкортстан Республикаһының халыҡ шағиры (2021), ғалим-тюрколог, топонимист, публицист, филология фәннәре докторы, йәмәғәт эшмәкәре. Авторҙың тормошо һәм ижады. «Урал батыр иле – сал Урал» шиғыры.<br>**Кәтибә Кинйәбулатова (1920-2012).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Шағирә, прозаик, тәржемәсе. «Әсә күңеле» шиғыры.<br>(1 с.) | | |
| **Мостай Кәрим (1919-2005).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡорт АССР-ның Халыҡ шағиры (1963). «Өс таған» повесынан өҙөктәр.<br>(1 с.) | Балалар тормошо һәм улар араһындағы дуҫлыҡты һүрәтләү. Әҫәрҙең идеяһы һәм образдары. Балалар күҙлегенән тәбиғәтте һаҡлау проблемаһы. | Тексты ҡысҡырып уҡыу; классиктың повесы буйынса төшөрөлгән «Өс таған» фильмын ҡарау; повесть һәм фильм сюжеттарын сағыштырыу, төп проблемаларҙы билдәләү. |
| «Тыуған илем – алтын бишек».<br>Проект, тикшеренеү эштәрен тәҡдим итеү.<br>4-се тикшереү эше.<br>(1 с.) | Проекттар, тикшеренеү эштәренең һөҙөмтәләре менән таныштырыу. | Тикшеренеү эштәре һөҙөмтәләрен класс алдында күрһәтеү; презентация маҡсатын иҫәпкә алып, сығыш форматын билдәләү, телдән һәм яҙма текстар төҙөү; үтелгән материалдарҙы һәм үҙ мөмкинлектәренде иҫәпкә алып, мәсьәләләрҙе сисеү юлын үҙ аллы төҙөү, мультимедиа программаларын, электрон дәреслектәрҙе, электрон китапхана материалдарын файҙаланып, тәҡдим ителгән сиселеш варианттарын дәлилләү;<br>эш планын үҙ аллы төҙөү, уны тормошҡа ашырыу барышында кәрәкле төҙәтмәләр индереү. |
| Резерв – 1 с. | | |

6-сы класс – 34 сәғәт.

Дөйөм сәғәттәр һаны – 34, шуларҙың 8 сәғәте – тикшереү эштәренә / проект эштәре һөҙөмтәләрен күрһәтеүгә, 1 сәғәте – резервҡа бүленә.

| Тематик блоктар, темалар | Төп йөкмәткеһе | Уҡыусылар эшмәкәрлегенең төп төрҙәренә характеристика |
|---|---|---|
| **ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ (8 с.)** | | |
| Инеш.<br>Башҡортостан Республикаһының Дәүләт флагы.<br>**Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина (1945).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Шағирә, яҙыусы, тәржемәсе. «Башҡортостан флагы» шиғыры.<br>(1 с.) | Инеш. Үтелгән материалды ҡабатлау. Башҡортостан Республикаһының Дәүләт флагы менән танышыу. | Уҡытыусының йәмғиәт һәм дәүләт тормошонда, хәҙерге донъяла, кеше тормошонда туған әҙәбиәттең роле тураһында хикәйәһен тыңлау; Башҡортостан Республикаһының дәүләт флагы тураһында видео ҡарау; уның барлыҡҡа килеүе, тәғәйенләнеше, йөкмәткеһе тураһында һөйләү; комментарий һәм әңгәмә менән шиғыр уҡыу; тәҡдим, тексты бәрәр һөйләмләп, сылбырлап уҡыу; уҡыған әҙәби әҫәр тураһында баһалама төҙөү. |
| **Сафуан Әлибаев (1941-2014).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡорт шағыры, балалар яҙыусыһы, тәржемәсе, журналист. «Мәктәп юлы» шиғыры.<br>**Ярулла Вәлиев (1921-1981).** Авторҙың тормошо һәм ижады. Башҡорт яҙыусыһы һәм журналист. «Беренсе көн» хикәйәһе.<br>**Яҡуп Ҡолмой.** «Мәктәп» шиғыры.<br>**Ризаитдин Фәхретдин.** «Мәктәп». «Нәсихәттәр» китабынан.<br>(2 с.) | Шиғырҙарҙың аң-белемгә, тәрбиәгә өндәүсе пафосы. Мәктәпкә юл – кеше тормошонда яуаплы этап. Мәктәптең яңы белем алыуҙағы роле тураһында идеяны кәүҙәләндереү. | Бирелгән шиғырҙарҙы һәм нәсихәтте ҡысҡырып уҡыу, идея-тематик йөкмәткене билдәләү;<br>әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһе буйынса һорауҙар төҙөү;<br>уҡытыусы уҡыған хикәйәне тыңлау;<br>һорауҙарға яуап, персонаждарға характеристика; хикәйәнең өҙөктәрен ҡыҫҡаса һәм һайлап алып һөйләү. |
| **Рауил Бикбаев (1938-2019).** Башҡортостан Республикаһының халыҡ шағиры (1992), әҙәбиәт | Телдең матурлығын, наҙлылығын, үҙенсәлеген поэтиклаштыра. Шағирҙарҙың тел үҙенсәлектәре. Халыҡтың мәҙәниәтен | Хәҙерге башҡорт әҙәби телен үҫтереүҙә шағирҙар һәм яҙыусылар ижадының ролен аңлатыу (өйрәнелгән сиктәрендә); Зәйнәб Биишева һәм Рауил Бикбаев |

| | | |
|---|---|---|
| белгесе, филология фәндәре докторы һәм йәмәғәт эшмәкәре. «Халҡыма хат» поэмаһынан өҙөк.<br>**Зәйнәб Биишева (1908-1996).** Башҡорт АССР-ның халыҡ яҙыусыһы (1990), шағирә, драматург, тәржемәсе. «Башҡорт теле» шиғыры.<br>**Ҡәҙим Аралбаев.** «Башҡорт ҡоролтайына» шиғыры.<br>(2 с.) | һәм гөрөф-ғәҙәттәрен шиғырҙарҙа сағылдырыу.<br>Туған тел – халыҡтың күп быуатлыҡ мираҫы. Башҡорт теленең күп төрлөлөгө, моңлолоғо һәм матурлығы. Лексиканың байлығы: фразеологизмдар һәм телмәр әйтелештәре, телдең бөйөклөгө һәм күп яҡлылығы. | ижадының башҡорт әҙәби телен формалаштырыуҙағы роле тураһында үҙ тексыңды булдырыу; әҙәбиәтте өйрәнеү илдең тарихын һәм мәҙәниәтен яҡшыраҡ белергә мөмкинлек биреүсе миҫалдар табыу (өйрәнелгән материалдар сиктәрендә); башҡорт милли теленең байлығын, үҙенсәлеген сағылдырған миҫалдарҙы, тәкдимдәрҙе йәки өҙөктәрҙе аңлатыу. |
| **Динис Бүләков (1944-1995).** «Ҡара икмәк» хикәйәһе.<br>(1 с.) | «Аҡбуҙ алышҡа сыға» китабынан балалар өсөн хикәйәләр һәм повестар. «Упҡын ситендә бейеү», «Саған япраҡ яңырта», «Эҫе ҡар». Балалар тормошон һүрәтләү. Үҫеп килеүсе быуындың әхлаҡи-этик үҙбилдәләнеше, үҙ урынын табыу проблемаһы. Ынтылыштарына характеристика, йәштәрҙең индивидуаль сифаттары, телмәр үҙенсәлеге. Д. Бүләковтың психологик оҫталығы. | Хикәйә уҡыу һәм уҡыған буйынса фекер алышыу; хикәйә планын һәм әҫәрҙең йөкмәткеһе буйынса һорауҙар төҙөү; ҡылыҡтарын сағыштырып геройҙарға ҡылыҡһырлама биреү; теманы һәм идеяны билдәләү; теманы тормош ысынбарлығы менән сағыштырыу, игенсе хеҙмәте тураһында әңгәмәләшеү; үҙ позицияңды дәлилләү. |
| **Гөлфиә Юнысова (1948).** «Ер улына», «Талы бөгөлөп тора» шиғырҙары.<br>**Фәниә Чанышева (1926-2018).** «Икмәк еҫе» шиғыры.<br>(1 с.) | Уйланыуға ҡоролған шиғырҙар. Ауыл көнкүрешен һәм тормошто һүрәтләү. Икмәк хаҡында борсолоу һәм тирә-йүнгә мөнәсәбәт, ысынбарлыҡты тойоу хистәрен белдереү. Игенсенең хеҙмәтенә хөрмәт һәм мөхәббәт хистәре. Үткән һәм хәҙерге менән бәйләнеш. Лирик геройҙың эмоциональ торошон күрһәтеүсе һүрәтләү саралары.<br>*Әҙәбиәт теорияһы:* тасуирлау, һүрәтләү, хикәйәләү. | Комментарий һәм әңгәмә менән тексты тасуири уҡыу, аңлашылмаған һүҙҙәрҙе билдәләү, йөкмәткене анализлау; шиғырҙарҙың йөкмәткеһен һөйләп биреү;<br>лирик герой образын билдәләү; был тексты художестволы-һүрәтләү сараларын файҙаланып, «ер улы»на ҡылыҡһырлама биреү; тасуирлау сараларын табыу һәм уларҙы ҡулланыуҙы аңлатыу. |
| **Әнүр Вахитов (1932-1984).**<br>Өс бөртөк бойҙай» хикәйәһе. | Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Яҙыусы, шағир, | Геройҙарҙың тәртибенә аңлатма биреү; аңлашылмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәһен асыҡлау; |

| | | |
|---|---|---|
| (1 с.) | әҙәбиәт белгесе, филология фәндәре кандидаты, тәржемәсе. «Өс бөртөк бойҙай», «Ир ҡанаты» хикәйәләре. Икмәккә ҡарата хөрмәт хистәре, балаларҙың Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы һәр бөртөккә һаҡсыл мөнәсәбәте. Икмәктең кеше тормошондағы мөһимлеген аңлау. Һуғыштан һуң кешеләрҙең изгелекле булыуын тасуирлау.<br>*Әҙәбиәт теорияһы: хикәйә жанры:* художестволы үҙенсәлектәре, хикәйә билдәләре. | үҙләштерелгән һүҙҙәргә рус синонимдарын һайлап алыу (был мөмкин булған осраҡта); яҙыусының художество оҫталығы үҙенсәлектәрен характеристикалау; хикәйә темаһын, проблемаларын билдәләү; төйөнләнеүҙе, кульминацияны, сиселеште табыу. |
| «Әсә теле – халыҡтың ҡиммәтле мираҫы».<br>Проект, тикшеренеү эштәрен тәҡдим итеү.<br>1-се тикшереү эше.<br>(1 с.) | Проекттар, тикшеренеү эштәренең һөҙөмтәләре менән таныштырыу. | Тикшеренеү эштәре һөҙөмтәләрен класс алдында күрһәтеү; презентация маҡсатын иҫәпкә алып, сығыш форматын билдәләү, телдән һәм яҙма текстар төҙөү; үтелгән материалдарҙы һәм үҙ мөмкинлектәрендә иҫәпкә алып, мәсьәләләрҙе сисеү юлын үҙ аллы төҙөү, мультимедиа программаларын, электрон дәреслектәрҙе, электрон китапхана материалдарын файҙаланып, тәҡдим ителгән сиселеш варианттарын дәлилләү;<br>эш планын үҙ аллы төҙөү, уны тормошҡа ашырыу барышында кәрәкле төҙәтмәләр индереү. |
| **ХАЛЫҠТЫҢ АУЫҘ-ТЕЛ ИЖАДЫ– ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ (8 с.)** | | |
| **«Урал батыр» эпосы, «Ҡариҙел»** легендаһы.<br>(3 с.) | Жанр булараҡ халыҡ эпосы. Фольклор эпостарының классификацияһы. Эпостың художестволы донъяһын булдырыуҙа художестволы шартлылыҡ һәм фантастиканың әһәмиәте.<br>Башҡорт халҡының героик һыҙаттарының эпостарҙа һынланышы. Урал батыр – кешенең иң яҡшы | Эпосты тасуири уҡыу, иҫкергән һүҙҙәр һүҙлеген төҙөү, легенда тексын комментарийлы уҡыу; ролдәргә бүлеп уҡыу, һөйләү, телдән хәбәр итеү, һүҙҙәрҙең һүҙлектән мәғәнәһен асыҡлау, тексты анализлау элементтары, эпостарға һәм легендаларға хас нәфис алымды асыҡлау; милли-мәҙәни компонентлы (ата-бабаларыбыҙҙың гөрөф-ғәҙәтләре, йолалары, көнкүреше, тарихи ваҡиғалар, мәҙәниәт |

| | | |
|---|---|---|
| | сифаттарын туплаусы (хеҙмәт һөйөүсәнлек, кешелеклелек, йомартлыҡ, физик көс). Ватанға һәм халыҡҡа фиҙәкәр хеҙмәт итеү, батырлыҡ, гәҙеллек, үҙ-үҙеңде хөрмәт итеү – батыр характерының төп һыҙаттары.<br>*Әҙәбиәт теорияһы:* тылсымлы әкиәттәр, гипербола, даими эпитеттар, легенда. | тураһында мәғлүмәт алып) фразеологик берәмектәрҙең мәғәнәһен аңлатыу (өйрәнелгән материал сиктәрендә), хәҙерге фразеологизмдарға ҡылыҡһырлама биреү, уларҙың килеп сығыуының сәбәбен аңлатыу, фразеологик берәмектәрҙе, мәҡәлдәрҙе, әйтемдәрҙе, ҡанатлы һүҙҙәрҙе һәм әйтемдәрҙе дөрөҫ ҡулланыу. |
| **Бәйеттәр**<br>(1 с.) | Халыҡ ижадының бер төрө булыу йәһәтенән бәйет. Темаһы һәм тарихи ерлеге. Бәйеттәрҙең үҙенсәлектәре. Поэтиклығы. Тематик айырмаһы. Бәйет шиғырының үҙенсәлеге. Бәйеттәрҙе яҙып алыу, башҡа жанрҙар кеүек, импровизация юлы менән сығарылыуы. «Герман һуғышы бәйеттәре», «Мәскәүҙән киттек, Берлинға еттек», «Дон далаларында» бәйеттәре.<br>бәйеттәр, архаизмдар, варваризмдар, диалетизмдар; таҡмаҡтар, *Әҙәбиәт теорияһы:* неологизмдар. | Бәйеттең барлыҡҡа килеүен, уның дини характерын асыҡлау; бәйет эстәлегенә аңлатма биреү;<br>үҙ төйәгеңдәге бәйет яҙыусыларҙы асыҡлау һәм табыу; бәйет өлгөләрен табыу; дәреслек параграфтары менән аналитик эш алып барыу, уҡытыусының һорауҙарына яуап биреү, терминдар менән эшләү. |
| **Таҡмаҡ. Көләмәс**<br>(1 с.) | «Егеттәр». Бөйөк Ватан һуғышында башҡорт егеттәренең батырлығы.<br>Фольклорҙың бәләкәй жанрҙарының береһе буларак көләмәс. Телмәрҙә һәм әҙәбиәттә көләмәстең популярлығы.<br>Төрлө жанрҙарны берләштергән әҫәрҙәр ижад итеүҙең сәбәптәре: әкиәт-йомаҡ, әкиәт-көләмәс. | Таҡмаҡтарҙың ритмын һәм көйөн билдәләү; мәктәптә һәм уҡыусылар араһында таралған таҡмаҡтарҙы яҙып алыу һәм дәрестә башҡарыу; мәктәп тормошона арналған таҡмаҡтар яҙыу; сылбырлап көләмәстәрҙе уҡыу; текст анализы элементтары менән көләмәстәрҙе һөйләү; үҙеңдең көләмәсеңде художестволы һөйләү; таҡмаҡ һәм көләмәс жанрҙары тураһында баһалама төҙөү. |
| **Ҡол Ғәли.** «Йософтоң матурлығы». Ҡиссанан өҙөк. Шәжәрә «Табын ҡәбиләһенең Ҡара Табын ырыуы шәжәрәһе». Шәжәрә | Йәмғиәттең ғәҙеллеген эҙләү. Саф, әскерһеҙ мөхәббәт. Яҡшылыҡ һәм яуызлыҡ көрәшенең бөтә кешелек өсөн уртаҡ, гуманистик идеялары. Ваҡиғаларҙы | Поэма тексын комментарий һәм әңгәмә менән уҡыу, аңлашылмаған һүҙҙәрҙе билдәләү һәм һүҙлек менән эшләү; әҙәби әҫәрҙе ҡыҫҡаса һөйләү; боронғо текстарҙың йөкмәткеһен ҡабул итеү; шәжәрә |

| | | |
|---|---|---|
| тураһында.<br>(1 с.) | дини-дидактик күҙлектән аңлатыу. Традицион сюжет. Образлылыҡтың тотороҡло формалары.<br>*Әҙәбиәт теорияһы:* Шәжәрә. | текстарын уҡыу; дәреслек параграфы менән аналитик эш, уҡытыусы һорауҙарына яуап биреү, терминдар менән эшләү. |
| **Шәйехзада Бабич (1895-1919).**<br>**Зәйнәб Биишева.** «Башҡортостан» шиғыры.<br>**Назар Нәжми.** «Башҡортостан» шиғыры.<br>(2 с.) | Ш. Бабичтың ижади юлы. Башҡорт әҙәбиәтендә Ш. Бабичтың урыны.<br>Шиғриәтенең үҙенсәлектәре: халыҡсанлыҡ, ябайлыҡ, шиғырҙары төҙөлөшөнөң еңеллеге.<br>Шиғырҙарҙың граждандылыҡ пафосы. Шағирҙарҙың Ватанға мөхәббәте һәм республика өсөн ғорурлығы. Ш. Бабич традицияларына нигеҙләнеү. Тыуған ерҙең матди һәм рухи байлыҡтарына айырым ҡараш. | Аудиояҙманы йәки уҡытыусының шиғыр уҡыу тыңлау;<br>текста өндәү, һорау, күп нөктәле , өтөрлө һ.б. һөйләмдәрҙе табыу һәм уҡыу;<br>текста иң матур (оҡшаған) урынды уҡыу; шиғырҙарҙы тасуири уҡыу; уҡыған әҙәби әҫәрҙең йөкмәткеһе буйынса үҙ аллы һорауҙар төҙөү; тыуған ерҙең матди һәм рухи байлығы тураһында әңгәмә. |
| Мин ҡайһы яғым менән «Урал батыр» эпосы геройына оҡшарға тырышыр инем...<br>Проект, тикшеренеү эштәрен тәҡдим итеү.<br>2-се тикшереү эше.<br>(1 с.) | Проекттар, тикшеренеү эштәренең һөҙөмтәләре менән таныштырыу. | Тикшеренеү эштәре һөҙөмтәләрен класс алдында күрһәтеү; презентация маҡсатын иҫәпкә алып, сығыш форматын билдәләү, телдән һәм яҙма текстар төҙөү; үтелгән материалдарҙы һәм үҙ мөмкинлектәренде иҫәпкә алып, мәсьәләләрҙе сисеү юлын үҙ аллы төҙөү, мультимедиа программаларын, электрон дәреслектәрҙе, электрон китапхана материалдарын файҙаланып, тәҡдим ителгән сиселеш варианттарын дәлилләү;<br>эш планын үҙ аллы төҙөү, уны тормошҡа ашырыу барышында кәрәкле төҙәтмәләр индереү. |
| **БАШҠОРТ СОВЕТ ӘҘӘБИӘТЕ. ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ (10 с.)** | | |
| **Нәжип Иҙелбаев.** «Салауат ташы» хикәйәһе.<br>(2 с.) | Салауат Юлаев образының фольклор һәм шиғри нигеҙе. Хикәйәлә ҡуйылма мотивтарҙың һәм фольклор жанры элементтарының роле. | Пар менән тексты сиратлап уҡыу;<br>теманы һәм идеяны билдәләү;<br>әҫәрҙәрҙең рухи-әхлаҡи һәм эстетик мәғәнәһен нигеҙләү һәм асыу;<br>хикәйә жанрының үҙенсәлекле билдәләрен үҙләштереү; |

| | | |
|---|---|---|
| | | әҫәрҙең төп фекерен (идеяһын) асыҡлау; текстҡа таянып, һылтанмалар (цитаталар) аша геройҙарға ҡылыҡһырлама биреү. |
| **Жәлил Кейекбаев (1911-1968).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Яҙыусы, совет лингвист-тюркологы, филология фәндәре докторы. Урал тураһында ҡобайыр. (1 с.) | Ж. Кейекбаев ижадында ҡобайыр жанры. Жанр структураһының үҙенсәлеге. Уның фольклор һәм әҙәби традициялар менән бәйләнеше. Авторлыҡ позицияһында патриотик аспект һәм лирик символика. | Комментарий һәм әңгәмә менән ҡобайырҙы уҡыу, аңлашылмаған һүҙҙәрҙе билдәләү, йөкмәткене анализлау; ҡобайырҙы аңлап һөйләү; Урал образын таныу һәм был текстың художестволы-һүрәтләү сараларын ҡулланып уның характеристикаһын тыуҙырыу; тасуирлау сараларын табыу һәм уларҙы ҡулланыуҙы аңлатыу. |
| **Салауат Юлаев.** «Юлай менән Салауат» эпосы (өҙөк). (2 с.) | «Юлай менән Салауат» эпосында халыҡ хәтере. Киң эпик фонда ваҡиғаларҙың һәм образдарҙың дөйөмләштерелгән образы. Тарихи фон, ваҡиғалар һәм образдарҙы реалистик һүрәтләү күпселекте тәшкил итә. Пугачев етәкселегендәге яйыҡ казактарының ихтилалы һәм уның манифесы, Салауаттың Пугачевҡа ҡушылыуы; баш күтәреүселәрҙең яза биреү отрядтары менән һуғышы; Салауатты ҡулға алыу, язалау һәм мәңгелек һөргөнгә оҙатыу. Рус һәм башҡорт халҡының батша хөкүмәтенә, социаль һәм милли иҙеүгә ҡаршы бергәләп көрәшеүе. | Тасуири уҡыу һәм уҡылған буйынса әңгәмә ҡороу; план төҙөү, әҫәрҙең йөкмәткеhе буйынса һорауҙар төҙөү; мөһим деталдәрҙе асыҡлау; тема һәм идеяны билдәләү; уҡытыусының йәки алдан әҙерләнгән уҡыусыларҙың дәрес темаһы буйынса хикәйәһен тыңлау (авторҙың биографияһы, авторҙың алдан өйрәнелгән әҫәрҙәренән өҙөктәр һ.б.). |
| **Мирас Иҙелбаев (1945).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Яҙыусы, филология фәндәре докторы. «Төш» повесы (өҙөк). (1 с.) | Тарихи-документаль эссе жанры. Фәнни тикшеренеүҙәрҙең, авторҙың уйланыуҙарының роле, уларҙың эске бәйләнеше һәм башҡа художестволы компоненттар менән үҙ-ара йоғонтоhо. Бәләкәй Салауат, уның атаһының образы, уларҙың ҡатмарлылығы һәм күп яҡлылығы, социаль-әхлаҡи мәғәнәhе. | Тексты ҡысҡырып уҡыу; текст өҙөктәрен һайлап уҡып, әңгәмәләшеү һәм абзацтың төп һүҙҙәрен, бөтә текстың төп мәғәнә өҙөгөн айырып күрһәтеү; текстың барлыҡҡа килеү сәбәбен асыҡлау; Салауатың бала саҡтан уҡ зирәклеген, ҡыйыулығын миҫалдар ярҙамында күрһәтеү; әҙәбиәттең башҡа жанрҙарында герой образын асыҡлау. |

| | | |
|---|---|---|
| | Художество деталдәренең роле. Гөлсафияның төшө, унын функцияһы һәм символик мәғәнәһе.<br>*Әҙәбиәт теорияһы:* художестволы образ төшөнсәһе. | |
| **Рәми Ғарипов.** «Салауат батыр», «Әсәм ҡулдары» тигән шиғырҙары.<br>(2 с.) | Шағирҙың биографияһы. Туған тел матурлығын данлау, туған телгә ҡарата ихтирам тәрбиәләү. Тыуған ергә, тәбиғәткә, әсәйгә, тыуған халҡына, тарихына ҡарата һөйөү. | Шиғырҙарҙы тасуири уҡыу, әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен, тематикаһын, идея нигеҙен үҙләштереү;<br>текст буйынса һорауҙар төҙөү, һорауҙарға яуаптар әҙерләү, аңлашылмаған һүҙҙәр эҙләү һәм уларҙың мәғәнәһен аңлатыу; һәр шиғырҙың лирик геройын билдәләү һәм характеристикалау; тасуирлау сараларын һәм художество деталдәрен анализлау, уларҙың әҫәрҙәге ролен аңлатыу. |
| **Кәтибә Кинйәбулатова**. «Уҡытыусым» шиғыры.<br>**Лира Яҡшыбаева (1947).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. «Уҡытыусы – ул белем биреүсе лә, икенсе әсәй ҙә...» хикәйәһе.<br>(1 с.) | Хикәйәнең мораль-әхлаҡи проблемаһы. Ғаилә конфликты. Иғтибар уҡытыусы образына йүнәлтелгән. Уҡытыусының әхлаҡи ныҡлығы һәм күңел матурлығы, унын ҡыҙҙың тормошондағы роле. | Шиғырҙарҙы һәм хикәйәне тасуири уҡыу; әҫәрҙәрҙе ҡыҫҡаса анализлау; әҫәрҙәрҙе тасуири уҡығанда хис-тойғоларҙы тапшырыу; текст буйынса һорауҙар билдәләү; дәреслек һәм уҡытыусы һорауҙарына яуаптар туплау; эпитеттар, сағыштырыуҙарҙы һәм башҡа һүрәтләмәләрҙе табыу, уларҙың төп фекерҙе асыуҙа ролен билдәләү; һүҙлек менән эшләү; һүрәтләнгән картиналар, уйҙар һәм хис-тойғолар йәһәтенән бер темаға яҙылған шиғырҙы һәм хикәйәне сағыштырыу, дөйөм һәм үҙенсәлекле яғын асыҡлау; шиғыр ритмын һәм рифмаларҙы асыҡлау, шиғырҙың аһәңлелеге тураһында фекер формалаштырыу; яратҡан уҡытыусының образын телдән һүрәтләү. |
| **Рауил Шаммас (1930).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Башҡортостан Республиканың халыҡ шағиры (1921). «Уҡытыусыға» тигән шиғыр.<br>**Фәрит Иҫәнғолов (1928-1983).** | Йәш уҡытыусының эшмәкәрлеге. Балалар менән эшләү теләге ҙур. Уҡыу йылы башына тиклем бәйләнеште яйға һалыуы. Буласаҡ синыфына иғтибарлы мөнәсәбәт. Уҡыусыларҙың проблемалары менән танышыу. Уҡыусыларға ихтирам | Шиғырҙы тасуири уҡыу; әҫәрҙәрҙе тасуири уҡығанда хис-тойғоларҙы тапшырыу; текст буйынса һорауҙар төҙөү; дәреслек һәм уҡытыусы һорауҙарына яуаптар әҙерләү; шиғыр тексында эпитеттар, сағыштырыуҙар һәм башҡа һүрәтләү сараларын табыу; төп фекерҙе асыуҙа уларҙың ролен билдәләү; |

| | | |
|---|---|---|
| Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. «Уҡытыусы Ғүмәров» хикәйәһе.<br>(1 с.) | күрһәтеү. | бирелгән картиналар, уй-фекерҙәр һәм хис-тойғолар күҙлегенән бер темаға яҙылған шиғырҙы һәм хикәйәне сағыштырыу, дөйөм һәм үҙенсәлекле яҡтарын асыҡлау. |
| «Ш. Бабичтың Башҡортостанға булған һөйөү көсө» авторҙың ижады миҫалында.<br>3Проект, тикшеренеү эштәрен тәҡдим итеү.<br>3-сө тикшереү эше.<br>(1 с.) | Проекттар, тикшеренеү эштәренең һөҙөмтәләре менән таныштырыу. | Тикшеренеү эштәре һөҙөмтәләрен класс алдында күрһәтеү; презентация маҡсатын иҫәпкә алып, сығыш форматын билдәләү, телдән һәм яҙма текстар төҙөү; үтелгән материалдарҙы һәм үҙ мөмкинлектәрендә иҫәпкә алып, мәсьәләләрҙе сисеү юлын үҙ аллы төҙөү, мультимедиа программаларын, электрон дәреслектәрҙе, электрон китапхана материалдарын файҙаланып, тәҡдим ителгән сиселеш варианттарын дәлилләү;<br>эш планын үҙ аллы төҙөү, уны тормошҡа ашырыу барышында кәрәкле төҙәтмәләр индереү. |
| **БАШҠОРТ СОВЕТ ӘҘӘБИӘТЕ. ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ (3 с.)** | | |
| **Ҡадир Даян (1910-1975).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Драматург, шағир, яҙыусы. «Шайморатов генерал» шиғыры.<br>(1 с.) | Легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры образы. Тыуған илгә һөйөү тойғоһо, ҡаты һынауҙарҙа уның өсөн яуаплылыҡ. | Уҡытыусы хикәйәһен тыңлау йәки генерал Миңлеғәле Минһаж улы Шайморатов тураһында фильмдан өҙөк ҡарау; шиғырҙы тасуири уҡыу; әҫәрҙең йөкмәткеһен, тематикаһын, идея нигеҙен үҙләштереү; шиғыр тексы буйынса һорауҙар төҙөү, һорауҙарға яуаптар әҙерләү, аңлайышһыҙ һүҙҙәрҙе эҙләү һәм уларҙың мәғәнәһен аңлатыу; шиғырҙың лирик геройын билдәләү һәм ҡылыһырлама биреү; экспрессив һүрәтләү һәм художестволы деталдәрҙе анализлау, уларҙың әҫәрҙәге ролен аңлатыу; «Шайморатов генерал» йырын тыңлау; генерал Шайморатов образын телдән һүрәтләү, шиғырҙы яттан һөйләү. |
| **Әнүәр Бикчәнтәев (1913-1989).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Башҡорт совет яҙыусыһы һәм сценарист. | Повестағы реалистик тенденция. Образдар системаһы. Өфө балалар колонияһында үҫмерҙең ҡатмарлы, ҡапма-ҡаршы тормош осоро. Геройҙың эске | Әҫәрҙәрҙе тасуири уҡыу һәм йөкмәткеһен үҙләштереү; һуңғы билдәле фактар нигеҙендә әҫәрҙең йөкмәткеһен анализлау; герой Александр Матросов тураһында тарихи дөрөҫлөктө асыҡлау |

| | | |
|---|---|---|
| «Бөркөт һауала үлә» повесы (өҙөк).<br>**Рәүеф Насиров (1935-2014).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Яҙыусы, журналист. «Ил балаһы Шакирйән» повесынан өҙөк.<br>(2 с.) | донъяһының характер үҙенсәлектәре һәм эволюцияһы. Киҫкен ғәҙеллек, ил өсөн ҙур һынауҙар йылдарында тәрән илһөйәрлек тойғоһо. Геройҙың Бөйөк Ватан һуғышындағы батырлығы.<br>Р. Насиров әҙәбиәт тарихсыһы булараҡ. Тарихи дөрөҫлөккә иғтибарҙың көсәйеүе. Повестағы реалистик тенденция. А. Матросовтың яҙмышы. 1924 йылдың 5 февралендәге Учалы ҡала Советының загсында Шакирйән Юныс улы Мөхәмәтйәновтың тыуыуы тураһында яҙма. Архивтағы Шакирйәндең балалар фотоһы. СССР Юстиция министрлығының Бөтә Союз суд экспертизалары ғилми-тикшеренеү институтының һығымтаһы. Ауылдаштарының хәтирәләре һәм раҫлауҙары. Геройҙың эске, рухи көсө матурлығы. Уның тормошона бәйле ваҡиғалар, характер үҙенсәлектәре. | (Шакирйән Мөхәмәтйәнов); герой тураһында телдән тулы яуап, уның ҡылыҡтарына әхлаҡи баһалау, геройға автор мөнәсәбәтен асыҡлау; әҫәрҙәрҙең төп ваҡиға урынынан яңы факттар менән репортаж төҙөү. |
| «Шакирйән Мөхәмәтйәнов хаҡында мин нимә беләм...».<br>Проект, тикшеренеү эштәрен тәҡдим итеү.<br>4-се тикшереү эше.<br>(1 с.) | Проекттар, тикшеренеү эштәренең һөҙөмтәләре менән таныштырыу. | Тикшеренеү эштәре һөҙөмтәләрен класс алдында күрһәтеү; презентация маҡсатын иҫәпкә алып, сығыш форматын билдәләү, телдән һәм яҙма текстар төҙөү; үтелгән материалдарҙы һәм үҙ мөмкинлектәрендә иҫәпкә алып, мәсьәләләрҙе сисеү юлын үҙ аллы төҙөү, мультимедиа программаларын, электрон дәреслектәрҙе, электрон китапхана материалдарын файҙаланып, тәҡдим ителгән сиселеш варианттарын дәлилләү;<br>эш планын үҙ аллы төҙөү, уны тормошҡа ашырыу барышында кәрәкле төҙәтмәләр индереү. |
| Резерв – 1 с. | | |

7-се класс – 34 сәғәт.

Дөйөм сәғәттәр һаны – 34, шуларҙың 8 сәғәте – тикшереү эштәренә / проект эштәре һөҙөмтәләрен күрһәтеүгә, 1 сәғәте – резервҡа бүленә.

| Тематик блоктар, темалар | Төп йөкмәткеһе | Уҡыусылар эшмәкәрлегенең төп төрҙәренә характеристика |
|---|---|---|
| **ХАЛЫҠТЫҢ АУЫҘ-ТЕЛ ИЖАДЫ – ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ (8 с.)** | | |
| **Ирек Кинйәбулатов.** «Ҙур ышаныс Һеҙгә, Уҡытыусы!» шиғыры. 5-6-сы кластарҙа үтелгән материалды ҡабатлау һәм системалаштырыу. . (1 с.) | Төп тема – ил үҫешендә уҡытыусының роле, йәмғиәттә уҡытыусыларға һәм мәғариф эшенә ихтирам күрһәтеү. Уҡытыусының төплө белеме һәм өлгөлө әхлаҡи сифаттары. | Шиғырҙы тасуири уҡыу; әҫәрҙәрҙе тасуири уҡығанда хис-тойғоларҙы күрһәтеү; текст буйынса һорауҙар төҙөү; дәреслек һәм уҡытыусы һорауҙарына яуаптар; шиғыр тексында эпитеттар, сағыштырыуҙар һәм һүрәтләү сараларын табыу; төп фекерҙе асыуҙа уларҙың ролен билдәләү; әҫәр үҙ эсенә алған тарих осорон билдәләү; әҙәби текста художество деталдәрен ҡулланыу үҙенсәлектәренә аңлатма биреү; һүҙлектәр, иҫкергән лексика һүҙлеге, сит ил һүҙҙәре һүҙлеге, фразеологик, мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге, ҡанатлы һүҙҙәр һәм әйтемдәр; уҡытыу-этимологик һүҙлектәрен ҡулланыу. |
| **Әмир Әминев (1953).** «Инша» хикәйәһе. (1 с.). | Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Яҙыусы, публицист. «Инша» хикәйәһе. Геройҙың үҙенсәлектәре – ауыл малайының тирә-яҡ мөхитте аңлауы. Малайҙың тыуған тәбиғәте тураһында тәүге ижади шиғырҙары. Тәбиғәт күренештәрен тасуирлау аша кешенең рухи кәйефен, хәл-торошон сағылдырыу. Геройҙың юғары әхлаҡи, рухи камиллығы сығанаҡтары. | Тексты ярым тауыш менән уҡыу; әҫәр геройҙарының һәм персонаждарының күңел торошона характеристика; замандың оҡшаш көнүҙәк проблемаларын асыҡлау; хикәйә тексында төп ваҡиғаға аңлатма биреү; хикәйә исеменең әһәмиәтен билдәләү. |
| **Рәми Ғарипов.** «Тел» шиғыры. **Рәсүл Ғамзатов (1923-2003).** «Туған тел» шиғыры (башҡорт | Туған телгә һөйөү тойғоһон сағылдырыу. Уның байлығы һәм матурлығы тураһында. Туған тел – | Уҡытыусы хикәйәһен йәки аудиояҙманы тыңлау, Рәми Ғарипов һәм Рәсүл Ғамзатовтың биографияһы тураһында презентация ҡарау; комментарий һәм |

| | | |
|---|---|---|
| теленә Рәми Ғарипов тәржемәһендә). (2 с.). | кешенең рухи таянысы. *Әҙәбиәт теорияһы:* фольклор, тарихи йырҙар. | әңгәмә менән шиғыр уҡыу; хәҙерге башҡорт әҙәби телен үҫтереүҙә шағирҙар һәм яҙыусылар ижадының роле тураһында хикәйә төҙөү (өйрәнелгән сиктәрендә); Рәми Ғарипов ижадының башҡорт милли телен үҫтереүҙәге роле тураһында үҙ тексыңды төҙөү, әҙәбиәтте өйрәнеү илдең тарихын һәм мәҙәниәтен яҡшыраҡ белергә мөмкинлек биреүен иҫбатлаған миҫалдар табыу (өйрәнелгән сиктәрендә); шиғырҙарҙа башҡорт теленең милли үҙенсәлеген, байлығын, тасуирлаусы миҫалдарҙы, тәҡдимдәрҙе йәки өҙөктәрҙе аңлатыу. |
| **Башҡорт халыҡ ижады. Йырҙар. Риүәйәттәр һәм легендалар** (2 с.) | Йырҙар халыҡ ауыҙ-тел ижады төрҙәренең береһе булараҡ. Көйҙәренең характерына ҡарап, башҡорт халыҡ йырҙарының икегә бүленеүе: оҙон йырҙары һәм ҡыҫҡаса йырҙар. Йырҙарҙың тематикаһы. «Урал», «Эскадрон», «Азамат», «Салауат», «Любизар», «Ҡаһым түрә», «Икенсе әрме», «Салауат телмәре» тарихи йырҙары. Баструкка ябылған, һөргөнгә ебәрелгән кешеләр тураһында йырҙар һәм хикәйәттәр: «Буранбай», «Бейеш». Кантондар тураһындағы йырҙар: «Ҡолой кантон», «Абдулла ахун», «Тәфтиләү». Был йырҙарҙа халыҡтың ҡарашының ҡапма-ҡаршылығы.<br>Ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауыр яҙмышы хаҡында риүәйәттәр һәм йырҙар: «Зөлхизә», «Таштуғай», «Ғилмияза». Легендаларҙың риүәйәттән айырмаһы. Легендаларҙа төп образдар. Легендалар тематикаһы. Топонимик легендалар, тарихи легендалар, көнкүреш легендалары. | Башҡорт фольклорында йыр жанрын билдәләү;<br>оҙон һәм ҡыҫҡа көйҙәрҙе айырыу; халыҡ йырҙары төрҙәрен белеү һәм үҙ аллы билдәләй белеү: тарихи йырҙар, тарихи көнкүреш йырҙары, ҡатын-ҡыҙҙарҙың фажиғәле тормошона арналған мөхәббәт хаҡында йырҙары; йырҙарҙың айырмалыҡтарын һәм художество үҙенсәлектәрен билдәләү; аудиояҙмала йырҙар тыңлау һәм текстарҙы тасуири уҡыу;<br>хис-тойғо һәм кисерештәр трансляцияһы аспектында уҡылғанды аңлау; тарихи экскурстар, эпик йырҙарға тарихи аңлатмалар төҙөү; үҙ-үҙен тотошо, ҡылыҡтары һәм тәртиптәре нигеҙендә лирик персонаждарға характеристика биреү; йырҙар теленә күҙәтеү яһау, эпитеттар, метафоралар һәм сағыштырыуҙарҙы табыу, уларҙың ролен аңлау; дәреслек бүлексәһе менән аналитик эш, уҡытыусы һорауҙарына яуап биреү, легенда, риүәйәттәр терминдарына төшөнөү, легенда, риүәйәттәр тураһында коллектив һөйләшеү. |

| | | |
|---|---|---|
| | «Ерәнсә сәсән һәм хан» әкиәте. Әкиәттең йөкмәткеһе. Ерәнсә сәсән образы. Милли характерҙың сәсәндәр образында кәүҙәләнеше: аҡыллылыҡ, тәрән аҡыл менән эш итеү, телмәр образлылығы.<br>*Әҙәбиәт теорияһы:* риүәйәт, легенда. | |
| **Мифтахетдин Аҡмулла (1831-1895).** Биографияһы. «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!», «Дуҫлыҡ», «Нәфсе», «Аттың ниһен маҡтайһың?», «Нәсихәттәр» шиғырҙары.<br>(2 с.) | Халыҡты мәғрифәтселеккә саҡырыу. Уның шиғриәтенең төп идеяһы һәм йөкмәткеһе. Халыҡ педагогикаһының сағылышы, социаль мотивтар. Шағирҙың сатираһы. Шиғырҙарыныың идея-эстетик йөкмәткеһе. Башҡорт әҙәбиәтендә Мифтахетдин Аҡмулла ижадының тотҡан урыны. | Уҡытыусының авторҙың биографияһы тураһында хикәйәһен тыңлау; аудиояҙманы йәки уҡытыусының бер шиғыр уҡыу тыңлау; шағирҙың шиғырҙарын ҡысҡырып, тасуири уҡыу; оҡшаған урындарын уҡыу; уҡыған әҙәби әҫәрҙең йөкмәткеһе буйынса үҙ аллы һорауҙар төҙөү; парҙар менән эшләү, төркөмләп тикшеренеү эше, шиғырҙарҙан өҙөктәргә комментарий биреү, тел үҙенсәлектәрен һәм тасуирлау сараларын асыҡлау; үҙ позицияңды нигеҙләү өсөн аргументтар һайлай белеү. |
| **Мәжит Ғафури.** «Үҙем һәм халҡым», «Мин ҡайҙа?», «Гөлдәр баҡсаһында» шиғырҙарында мәғрифәтселек идеялары.<br>«Һарыҡты кем ашаған?», «Ат менән эт» **мәҫәлдәре**.<br>(2 с.) | Жанр үҙенсәлектәре. Мәҫәлдәр теленең образлылығы. Уның мәҫәлдәрен И.А. Крылов мәҫәлдәре менән сағыштырыу. Йөкмәткеһе, поэтик телмәре, шиғыры, жанр үҙенсәлеге буйынса мәҫәл структураһын анализлау. И.А. Крылов һәм М. Ғафури мәҫәлдәренең күсмә мәғәнәһе, хәҙерге заманда уларҙың функциональ роле. | Әҫәрҙәр проблематикаһын һәм идея идея ниәтен билдәләү, геройҙарға ҡылыҡһырлама, йөкмәткеһенә үҙ ҡарашыңды белдереү, позицияны нигеҙләү; яҙыусы тураһында телдән хикәйә төҙөү;<br>сәхнәләштерелгән мәҫәлде ҡарау (видеояҙмала) һәм режиссерҙың ҡарарҙарын аңлау, актерҙарҙың уйнауын баһалау; әҫәрҙәрҙә темалар оҡшашлығын асыҡлау; мәҫәл ролдәре буйынса тасуири уҡыу; И.А. Крылов менән М. Ғафуриҙың таныш мәҫәлдәрен сағыштырыу, дөйөм һәм үҙенсәлекле урындарҙы асыҡлау, мәҫәлдәрҙә аллегория менән моралде табыу. |
| «Йырҙарҙа – халыҡ тарихы». Проект, тикшеренеү эштәрен тәкдим итеү.<br>1-се тикшереү эше.<br>(1 с.) | Проекттар, тикшеренеү эштәренең һөҙөмтәләре менән таныштырыу. | Тикшеренеү эштәре һөҙөмтәләрен класс алдында күрһәтеү; презентация маҡсатын иҫәпкә алып, сығыш форматын билдәләү, телдән һәм яҙма текстар төҙөү; эш планын үҙ аллы төҙөү, уны тормошҡа ашырыу барышында кәрәкле төҙәтмәләр индереү. |

| БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ XIX БЫУАТ – XX БЫУАТ БАШЫ. БАШҠОРТ СОВЕТ ӘҘӘБИӘТЕ (8 с.). | | |
|---|---|---|
| **Василий Зефиров.** «Йәнтүрә» хикәйәһе.<br>(1 с.) | 1812 йылғы Ватан һуғышы ваҡиғалары. Рәсәйҙә йәшәүсе төрлө халыҡтарҙың Наполеон армияһына ҡаршы азатлыҡ көрәше. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының үҙҙәренең ирҙәре менән французДарға ҡаршы һуғышта ҡатнашыуы тураһында мәғлүмәттәр. | Башҡорттарҙың халыҡ ижады үҙенсәлеген аңлау, уларҙы В. Зефировтың хикәйәһе менән сағыштырыу; хикәйәлә фольклор йолаларын һәм яҙма әҙәбиәт билдәләрен берләштереү миҫалын табыу; һылтанмалар килтереп, әҫәрҙең тексы буйынса һорауҙарға телдән яуаптар төҙөү; уҡылғанға шәхси мөнәсәбәтте сағылдырыу; әҫәрҙе тәкдим ителгән схема буйынса анализлау; белешмә әҙәбиәтте һәм Интернет ресурстарын файҙаланып, яҙыусының биографияһы тураһында өҫтәмә материал һайлау. |
| **Шәйехзада Бабич.** «Көтәм», «Ҡурайҡайға», «Салауат батыр» шиғырҙары. «Башҡорт халҡына көйлө хитап» шиғыры (өҙөк)<br>(2 с.). | Шиғриәттең үҙенсәлектәре: халыҡсанлыҡ, ябайлыҡ, шиғыр төҙөлөшөнөң еңеллеге. | Шиғырҙарҙы тасуири уҡыу; йөкмәткеһен үҙләштереү, идеяны һәм теманы билдәләү; шиғырҙар буйынса һорауҙар төҙөү һәм был һорауҙарға яуап табыу; Ш. Бабичтың тормошо һәм ижады тураһында материалдар һайлап алыу һәм яңы белемдәрҙе дөйөмләштереү; «Бабич» фильмын ҡарау. |
| **Дауыт Юлтый (1893-1938).** Тормошо һәм ижады. «Тимеркәй фәлсәфәһе» хикәйәһе<br>(2 с.). | Ябай кешенең фажиғәле яҙмышын, эске донъяһын, уйланыуҙарын, хыялдарын һүрәтләү. Тимеркәй образы. Сәми ҡарт образы. ауыл байы Ҡотлоярҙың кешелекһеҙлеге. | Хикәйәне тасуири уҡыу, тематиканы асыу, әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү; темаһын һәм идеяһын билдәләү, «Тимеркәй фәлсәфәһе» хикәйәһе буйынса һорауҙар һәм яуаптар төҙөү; фольклор элементтарын табыу һәм уларҙың ролдәрен билдәләү; Тимеркәй образына характеристика биреү; кире геройҙарҙы эҙләү һәм уларҙың характерлы һыҙаттарын билдәләү; әҫәрҙе һөйләү өсөн тезислы план төҙөү. |
| **Һәҙиә Дәүләтшина (1905-1954).** Тормошо һәм ижады. «Айбикә» повесы.<br>(3 с.) | Ауылды социалистик үҙгәртеүҙә әүҙем ҡатнашыусы ҡатын-ҡыҙ образы. Хикәйәләү теленең байлығы. Образдарға характеристика.<br>*Әҙәбиәт теорияһы:* әҙәби әҫәрҙәрҙә образ, әҙәби әҫәрҙә персонаждарҙың холоҡ-фиғелен асыу саралары. | Уҡытыусы хикәйәһен тыңлау йәки яҙыусының тормошо һәм ижады тураһында фильм ҡарау; әҫәрҙе тасуири уҡыу, идеяны табыу, повестың яҙылыу ваҡытын билдәләү; әҫәр тексы буйынса һорауҙар төҙөү; һорауҙарға яуаптар һайлау; киңәйтелгән план төҙөү һәм әҫәрҙең йөкмәткеһен һөйләп биреү; Һәҙиә Дәүләтшинаның фажиғәле яҙмышы тураһында телдән хикәйә төҙөү; |

| | | |
|---|---|---|
| | | әҫәр өҙөгөн ятҡа һөйләү (уҡытыусы һайлауы буйынса). |
| «Һ. Дәүләтшинаның ҡаһарман яҙмышы».<br>Проект, тикшеренеү эштәрен тәҡдим итеү.<br>2-се тикшереү эше.<br>(1 с.) | Проекттар, тикшеренеү эштәренең һөҙөмтәләре менән таныштырыу. | Тикшеренеү эштәре һөҙөмтәләрен класс алдында күрһәтеү; презентация маҡсатын иҫәпкә алып, сығыш форматын билдәләү, телдән һәм яҙма текстар төҙөү; үтелгән материалдарҙы һәм үҙ мөмкинлектәреңде иҫәпкә алып, мәсьәләләрҙе сисеү юлын үҙ аллы төҙөү, тәҡдим ителгән сиселеш варианттарын дәлилләү;<br>эш планын үҙ аллы төҙөү, уны тормошҡа ашырыу барышында кәрәкле төҙәтмәләр индереү. |
| **БАШҠОРТ СОВЕТ ӘҘӘБИӘТЕ. РУС ӘҘӘБИӘТЕ (10 с.)** | | |
| **Рәшит Ниғмәти.** Тормошо һәм ижады. «Йәмле Ағиҙел буйҙары» поэмаһы<br>(2 с.). | Үҙәк образ – Ағиҙел йылғаһының Тыуған илде кәүҙәләндереүе, ярҙары буйында булған бөтә тарихтарға шаһит булыуы. Башҡорт халҡының тарихы, бәхетле киләсәк өсөн көрәше. Поэмала кешеләрҙе һәм тәбиғәтте һүрәтләү үҙенсәлектәре. Персоналдарҙың эске торошо. Халыҡ ижады традициялары. Тел һәм һүрәтләү саралары. | Поэма тексын уҡыу һәм анализлау; әҫәрҙең образдар системаһын һәм композиция үҙенсәлектәрен асыу; поэманың лирик геройына характеристика; проблеманы аңлай белеү; фараз итеү; материалды структуралаштырыу; текста тасуирлауҙың шиғри сараларын билдәләү һәм уларҙың роле; уҡытыусының һайлауы буйынса поэманың өҙөктәрен яттан һөйләү, автор тойғоларын тауыш һәм интонация ярҙамында еткерә белеү. |
| **Мостай Кәрим.** «Тормош миҙгелдәре» китабынан «Ап-аҡ мөғжизә» хикәйәһе. Айгөл иле» драмаһы<br>(3 с.). | «Ап-аҡ мөғжизә» хикәйәһе. Дуҫҡа тоғролоҡ. Аҡсал образы. Хайуандарға һөйөү һәм иғтибар тәрбиәләү. «Айгөл иле» драмаһы. Драманың йөкмәткеһе, темаһы, идеяһы, образдары. Геройҙар исемлеге төҙөлдө. Сюжетты художестволы эшкәртеү үҙенсәлектәре. Драма теле.<br>*Әҙәбиәт теорияһы:* сюжет һәм композиция, образдар системаһы. | Хикәйәне уҡыу; әҙәби әҫәрҙе сылбыр буйлап һөйләү (берәр һөйләмләп); хикәйә сюжетының сиселешен табыу, тематиканы, проблематиканы һәм идея уйын билдәләү; драма геройҙары диалогын ролдәргә бүлеп уҡыу; тәбиғәтте һүрәтләү;<br>«Айгөл иле» драмаһының төп геройының хәл-торошо; геройҙарҙы һүрәтләү өсөн әҙәби әҫәр тексынан өҙөк һайлап алыу; геройҙарҙы асыу сараларын билдәләү (ҡылыҡ, портрет, пейзаж, автор баһаһы); тиҫтереңдең телмәр сығышын баһалау; авторҙың позицияһын асыҡлау һәм интерпретациялау. |
| **Михаил Шолохов (1905-1984).** | «Кеше яҙмышы» хикәйәһенең яҙылыу | Хикәйәнең сюжетына ҡылыҡһырлама биреү, уның |

| | | |
|---|---|---|
| Башҡорт теленә Сабир Шәрипов тәржемәләгән «Кеше яҙмышы» хикәйәһе<br>(1 с.). | тарихы – хикәйәнең нигеҙендә реаль ваҡиғалар ятыуы. Һуғыш темаһы. Кеше рухының көсө, тормош мәғәнәһен эҙләү. Әҫәрҙең композицияһы – хикәйә эсендә хикәйә. | тематикаһын, проблематикаһын һәм идея ниәтен тикшереү; геройҙарға характеристика биреү өсөн әҙәби әҫәр тексынан өҙөктәр һайлап алыу; геройҙарҙы асыу сараларын билдәләү (ҡылыҡ, портрет, пейзаж; авторҙың телмәрен асыҡлау һәм интерпретациялау); тиҫтеренең телмәр сығышын баһалау. |
| **Ғайса Хөсәйенов (1928-1921).** Тормошо һәм ижады. Башҡортостан Республиканың халыҡ яҙыусыһы (2008), яҙыусы, ғалим, әҙәбиәт белгесе, филология фәндәре докторы, БР Фәндәр академияһы академигы. «Һуңғы тарпан», «Ете ырыу» хикәйәттәре, «Алдар батыр» ҡиссаһы.<br>(2 с.) | Тыуған ерҙең батырҙары образы. Тарихи ысынбарлыҡ. | Башҡорт әҙәбиәтененең тарихи хәрәкәте булараҡ әҙәби процесҡа характеристика, уның төп нигеҙен билдәләү; әҙәбиәт тарихы һәм әҙәби тәнҡит тураһында төшөнсәләр формалаштырыу; Ғ. Хөсәйеновтың хикәйәләрен һәм повестарын уҡыу һәм баһалама биреү (рецензиялау); теманы, төп конфликтты һәм проблематиканың көнүҙәклеген, әҫәрҙәр идеяһын асыҡлау; образдарға характеристика биреү. |
| **Яныбай Хамматов (1925-2000).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. «Бөртөкләп йыйыла алтын» романынан «Ғәйзулла» өҙөгө<br>(2 с.). | Башҡортостан ерендәге XX быуат көнкүреше картиналары, империалистик һуғыш алды, поэманың характерын һәм идеяһын аңлау өсөн уларҙың әһәмиәте. Идея-тематик йөкмәтке, үҙәк образдар, стилистик-тел үҙенсәлектәре. Халыҡтың донъяны мифологик күҙаллауы. Хикәйәләү тураһында төшөнсә. | Романдан өҙөктө тасуири уҡыу; идея-тематик йөкмәткене билдәләү; йөкмәтке буйынса һорауҙар яҙыу; парҙар йәки төркөмдәр буйынса һорауҙар бүлеү; яуаптарҙы анализлау; башҡорттарҙың тәбиғәт байлыҡтарына мөнәсәбәтен асыҡлау; Интернетта башҡорттарҙың мифологияһы тураһында мәғлүмәт эҙләү; дәреслек бүлексәләре менән аналитик эш итеү, уҡытыусының һорауҙарына яуаптар әҙерләү, терминдар менән эшләү. |
| «Мостай Кәримгә бағышлана...».<br>Проект, тикшеренеү эштәрен тәҡдим итеү.<br>3-сө тикшереү эше.<br>(1 с.) | Проекттар, тикшеренеү эштәренең һөҙөмтәләре менән таныштырыу. | Тикшеренеү эштәре һөҙөмтәләрен класс алдында күрһәтеү; презентация маҡсатын иҫәпкә алып, сығыш форматын билдәләү, телдән һәм яҙма текстар төҙөү; эш планын үҙ аллы төҙөү, уны тормошҡа ашырыу барышында кәрәкле төҙәтмәләр индереү. |
| **Рамаҙан Өмөтбаев (1924-1997).** Тормошо һәм ижады. «Атлы башҡорт» повесынан өҙөк | Легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының данлы юлы. Башҡорт яугире-кавалерисы һәм уның атының | Әҫәрҙе тасуири уҡыу; йөкмәткеһе буйынса һорауҙар төҙөү; дәреслек бүлексәләре менән аналитик эш, художестволы тексты комментарийлы уҡыу, |

| | | |
|---|---|---|
| (2 с.). | Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы яҙмышы. Совет яугирҙарының батырлығы, ватансылығы, фиҙаҡәрлеге, һуғыштың фажиғәле йылдарында ауырлыҡтар һәм шатлыҡтар. | уҡытыусының лекцияһын тыңлау һәм уның планын төҙөү; Бөйөк Ватан һуғышы осоронда башҡорт атлыларының ҡаһарманлығы тураһында хикәйә төҙөү; был темаға ирекле әңгәмә. |
| Резерв – 1 ч. | | |

8-се класс – 34 сәғәт.

Дөйөм сәғәттәр һаны – 34, шуларҙың 8 сәғәте – тикшереү эштәренә / проект эштәре һөҙөмтәләрен күрһәтеүгә, 1 сәғәте – резервҡа бүленә.

| **Тематик блоктар, темалар** | **Төп йөкмәткеһе** | **Уҡыусылар эшмәкәрлегенең төп төрҙәренә характеристика** |
|---|---|---|
| **ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ (8 с.)** | | |
| **Рәшит Назаров (1944-2006).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. «Башҡорт» шиғыры.<br>**Абдулхаҡ Игебаев (1930-2016).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Башҡортостан Республиканың халыҡ шағиры (2010) «Башҡортостан» шиғыры<br>(1 с.). | Тыуған ил, тыуған тәбиғәт тураһында шиғырҙар, тирә-йүнде ысын мәғәнәһендә ҡабул итеү. Кеше һәм тәбиғәт. Тыуған яҡ тәбиғәте картиналарын тасуирлау аша кешенең рухи кәйефен, хәл-торошон сағылдырыу. Башҡорт шағирҙарының тыуған тәбиғәтен ҡабул итеүендә уртаҡ һәм индивидуаль һыҙаттары.<br>Абдулхаҡ Игебаев – мөхәббәт, йәшлек романтикаһына дан йырлаусы лирик шағир. Шиғырҙарына көй яҙған. Уның йырҙары ҙур популярлыҡ менән файҙалана: «Беренсе мөхәббәт», «Йәшермәсе, иркәм», «Күңел йәшлекте һағына», «Тыуған яҡ», «Ләйсән» һәм башҡалар. Ул 30-ҙан ашыу шиғри йыйынтыҡ авторы.<br>Шағирҙарҙың туған телгә һөйөүе. Шағирҙар телдең бөйөклөгөн күрһәтә. | Шиғырҙарҙы тасуири уҡыу һәм йөкмәткеһен үҙләштереү; теманы һәм төп идеяны билдәләү;<br>һорауҙар төҙөү һәм текст буйынса һорауҙарға үҙ аллы яуап биреү; Рәшит Назаровтың һәм Абдулхаҡ Игебаевтың тормошо һәм ижады тураһында яңы материалдар йыйыу;<br>шағирҙарҙың башҡорт әҙәбиәте тарихындағы ролен билдәләү, уларҙың яңылыҡтарын билдәләү; художестволы һүрәтләү сараларын һәм уларҙың шиғырҙарҙағы ролен анализлау. |

| | | |
|---|---|---|
| **Хәким Ғиләжев (1923-1997).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Башҡорт шағиры һәм яҙыусыһы. «Башҡорт теле» шиғыры.<br>**Мәүлит Ямалетдинов (1947-2020).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Башҡорт шағиры, яҙыусы, журналист, йәмәғәт эшмәкәре, мөхәррир, сценарист. «Халкым хазинаһы» шиғыры.<br>**Мәхмүт Хөсәйен (1923-1993).** «Башҡорт теле ғорур яңғырай» шиғыры.<br>(1 с.) | Халыҡ тормошон, милли характерҙы дөйөм проблема – халыҡтың үҙаңын асыу күҙлегенән сығып һүрәтләү. Халыҡ характерындағы ыңғай һыҙаттарҙы поэтикалаштырыу. | Әҫәрҙәр проблематикаһын һәм идея ниәтен билдәләү; геройҙарға ҡылыҡһырлама; йөкмәткеһенә үҙ ҡарашыңды белдереү; үҙ ҡарашыңды дәлилләү; туған тел тураһында телдән хикәйә төҙөү; әҫәрҙәрҙә темалар уртаҡлығын асыҡлау. |
| **Валентин Распутин (1937-2015).** «Француз теле дәрестәре» хикәйәһе (Әмир Әминев тәржемәһе).<br>(1 с.) | Повеста һуғыш осоро ауырлыҡтарын сағылдырыу. Йәш геройға хас белем, әхлаҡи тотороҡлоҡ, үҙ бәҫен тойоу. Уҡытыусының күңел йомартлығы, унын малай яҙмышындағы роле. | Тикшерелгән әҫәрҙең дөйөм кешелек йөкмәткеһен асыу; хикәйә темаһын, идеяһын, композиция үҙенсәлектәрен билдәләү; хикәйәнең символик исемен, төп геройҙарҙың образ үҙенсәлектәрен асыҡлау; әҫәрҙе анализлау, композиция элементтарының ролен билдәләү; хикәйәнән өҙөктө тасуири уҡыу. |
| **Дини әҙәбиәт**<br>**Рауил Бикбаев.** «Хәҙистәр» шиғыры.<br>**Мәүлит Ямалетдинов.** Сүрәи «әл-Фатиха». Фатиха сүрәһе шиғыры.<br>(1 с.) | Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең әйткәндәрен поэтиклаштырыу һәм шиғриәттә Ҡөрьән мотивтарын художестволы сағылдырыу. Ҡөрьән сүрәләренең шиғри тәржемәләре. Доньяны асылына, кешенең рухи камиллығына төшөнөү. | Төп теманы һәм идеяны билдәләү; йөкмәткене үҙләштереү; әҫәрҙе тасуири уҡыу; текст буйынса һораүҙар төҙөү, уларға яуаптар әҙерләү; дәрес темаһы буйынса укытыусы хикәйәһен тыңлау. |
| **Шафиҡ Әминев-Тамъяни (1858-1936).** Башҡорт шағиры, сәсән-импровизатор. «Урал», «Башҡорт | Тыуған илен яҡлаған ир-егеттәрҙе данлау. Тел, стиль үҙенсәлектәре. | Тикшерелгән әҫәрҙең аныҡ тарихи һәм дөйөм кешелек йөкмәткеһен асыу; теманы, идеяны, әҫәр композицияһының үҙенсәлектәрен билдәләү; |

| | | |
|---|---|---|
| бабаларының тарихы» шиғырҙары (1 с.). | | әҫәрҙәрҙең символик исемен, төп геройҙарҙың образ үҙенсәлектәрен асыҡлау; әҫәрҙән өҙөктө тасуири уҡыу. |
| **Ғәли Ибраһимов (1919-1989).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Башҡорт яҙыусыһы һәм шағиры. «Кинйә» романы (3 с.). | Романдың яҙылыу тарихы. Пугачевтың көрәштәше Кинйә Арыҫланов образы. Башҡорт халҡының уларҙың ерҙәрен баҫып алыусыларға ҡаршы көрәше. Романдың художество үҙенсәлектәре. Роман теленең һәм стиленең үҙенсәлеге. | Романды уҡыу, уның йөкмәткеһен үҙләштереү; маҡсатынан сығып, текст буйынса һорауҙар төҙөү һәм ентекле яуаптар әҙерләү; сюжет характеристикаһы, әҫәрҙең тематикаһын, проблематикаһын, идея-эстетик йөкмәткеһен билдәләү; план төҙөү; абзацтың төп һүҙҙәрен, бөтә текстың төп мәғәнәһен белдергән өҙөгөн табыу; төп геройҙарға ҡылыҡһырлама, геройҙарҙың ыңғай һәм кире сифаттарын асыҡлау; ҡыҫҡаса һөйләү һәм ентекле һөйләү серҙәрен өйрәнеү;<br>Кинйә Арыҫлановтың һәм уның көрәштәштәренең яҙмышы һәм батырлыҡтары тураһында хикәйә; образдарҙы сағыштырыу, уларҙың тәртибен баһалау; романда фольклор мотивтарын билдәләү; дәреслек бүлексәһе менән аналитик эш, уҡытыусының һорауҙарына яуап биреү, терминдар менән эшләү; шул осорҙоң тарихи шәхестәре тураһында коллектив диалог. |
| «Ғәли Ибраһимов трилогияһында Кинйә Арыҫланов образы»<br>Проект, тикшеренеү эштәрен тәҡдим итеү.<br>1-се тикшереү эше.<br>(1 с.) | Проекттар, тикшеренеү эштәренең һөҙөмтәләре менән таныштырыу. | Тикшеренеү эштәре һөҙөмтәләрен класс алдында күрһәтеү; презентация маҡсатын иҫәпкә алып, сығыш форматын билдәләү, телдән һәм яҙма текстар төҙөү; эш планын үҙ аллы төҙөү, уны тормошҡа ашырыу барышында кәрәкле төҙәтмәләр индереү. |
| **ХАЛЫҠ АУЫҘ-ТЕЛ ИЖАДЫ. ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ (8 с.)** | | |
| Әйтештәр. «Бер тигәс тә ни яман?», «Аҡмырҙа сәсәндең Ҡобағыш сәсән менән әйтеше».<br>Ҡобайырҙар. «Ил тигәндең кеме | Әйтеш – ике аҡындың импровизациялы ярышы, ауыҙ-тел ижадының йыр поэзияһы формаһы. Ҡыллы музыка ҡоралдары аккомпанементы ҡулланып башҡарыла. | Ҡобайырҙарҙы тасуири уҡыу; әйтештәрҙе ролдәргә бүлеп уҡыу; сәсәндәрҙең импровизацияларында тематик йүнәлештәрҙе, төп конфликтты һәм проблематиканың көнүҙәклеген, ҡобайырҙар һәм |

| | | |
|---|---|---|
| юҡ», «Салауат батыр» (2 с.). | Ауыҙ-тел әҙәбиәтенең төп жанры. Шиғри бәхәс процесы. Үҙеңдең ижади мөмкинлектәреңде, донъяға ҡараштарыңды асыу. Жанрҙың иң яҡшы өлгөләре – Һабрау йыраүҙың Иҙеүкәй батыр менән, Ҡобағыш сәсәндең Аҡмырҙа сәсән менән, Ҡарас сәсәндең ҡаҙаҡ батыры Аҡса менән, Байыҡ сәсәндең ҡаҙаҡ аҡыны Бохара менән, Салауаттың яратҡан ҡыҙы Зөләйха менән шиғри бәхәстәре. *Әҙәбиәт теорияһы:* әйтеш жанры, ҡобайыр. | әйтештәр идеяларын билдәләү; башҡорт әҙәбиәтенең тарихи хәрәкәте булараҡ әҙәби процессҡа характеристика биреү, уның нигеҙен билдәләү; әҙәбиәт тарихы һәм әҙәби тәнҡит тураһында төшөнсәләр формалаштырыу; «пафос» төшөнсәһен үҙләштереү. |
| **Яныбай Хамматов.** «Төньяҡ амурҙары» романы. (2 с.). | Романдың яҙылыу тарихы. 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт ғәскәрҙәренең ҡаһарманлығын һүрәтләү. Төп геройҙар. романдың теле һәм стиле. | Романды тасуири уҡыу; идея-тематик йөкмәткене билдәләү; романдың йөкмәткеһе буйынса һорауҙар яҙыу; парҙар йәки төркөмдәр буйынса һорауҙар бүлеү; һорауҙарға яуаптар әҙерләү; яуаптарҙы анализлау; әҫәрҙәрҙә фольклор элементтарын һәм мотивтарын табыу; интернетта башҡорттарҙың Гёте менән осрашыуы тураһында материалдар эҙләү; дәреслек бүлексәһе менән аналитик эш итеү, уҡытыусы һорауҙарына яуап биреү; шул замандың тарихи шәхестәре тураһында коллектив диалог. |
| **Ғайса Хөсәйенов**. «Һуңғы тарпан» әҫәре. «Ете ырыу» хикәйәһе, «Алдар батыр» повесы. (1 с.) | Тыуған ерҙең батырҙары образы. Тарихи ысынбарлыҡ. | Хикәйәне тасуири уҡыу, уның йөкмәткеһен үҙләштереү; маҡсатынан сығып, текст буйынса һорауҙар төҙөү һәм уларға яуап табыу; сюжетҡа, тематикаға, проблематикаға, хикәйәнең идея-эмоциональ йөкмәткеһенә характеристика; хикәйәнең планын төҙөү; төп геройҙарға характеристика биреү, геройҙарҙың ыңғай һәм кире сифаттарын асыҡлай белеү; ентекле һөйләү; әҫәрҙең яҙмышы һәм Алдар батыр ҡаһарманлыҡтары тураһында бәйән итеү; әҫәрҙә фольклор элементтарын һәм мотивтарын билдәләү; повесть йөкмәткеһен ҡыҫҡаса һөйләп |

| | | |
|---|---|---|
| | | биреү. |
| **Булат Рафиҡов (1934-1998).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Башҡорт яҙыусыһы һәм шағиры, тәржемәсе, драматург, журналист. «Эйәрелгән ат» повесы (2 с.). | Салауат Юлаевтың, атаһы Юлайҙың, башҡа баш күтәреүселәрҙең Рогервик ҡәлғәһендә тотҡонлоҡтағы тормошо. Повесть геройҙарының рухи ныҡлығы. Салауаттың Тыуған илендә ҡалған ике улының яҙмышы. | Б. Рафиҡов әҫәрҙәренең яҙылыу тарихы менән танышыу; әҫәрҙе тасуи уҡыу; әҫәрҙең жанр һәм композиция үҙенсәлеген билдәләү; мөһим темалар һәм проблемалар тураһында монолог, диалог рәүешендә фекер йөрөтөү; роман сюжет нигеҙҙәрен һәм геройҙарының характерҙарын, эпик хикәйәләүҙең киңлеген билдәләү; геройҙарға ҡылыҡһырлама, художестволы тасуирлау сараларының ролен билдәләү; Салауат Юлаевтың яҙмышы һәм уның ғаиләһе тураһында хикәйә төҙөү. |
| **Рәшит Солтангәрәев (1935-1999).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. Башҡорт яҙыусыһы, публицист. «Осто бөркөт» повесы.<br>**Мәүлит Ямалетдинов.** «Ҡотолоу юлҡайҙарын тапманым» повесы.<br>(1 с.). | Граждандар һуғышы ваҡиғалары. Комбриг Муса Мортазин образы. Батырлыҡты, Ватан алдындағы хәрби ҡаҙаныштарҙы, фажиғәле һәләк булыуҙы һүрәтләү | Муса батыр тураһындағы повестарҙы тасуири уҡыу; идея-тематик йөкмәткене билдәләү; йөкмәтке буйынса һорауҙар төҙөү; һорауҙарға яуаптар әҙерләү, яуаптарҙы анализлау; интернетта Муса Мортазин ҡулға алынғандан һуң уның балаларының яҙмышы тураһында материалдар эҙләү; дәреслек бүлексәһе менән аналитик эш, уҡытыусы һорауҙарына яуап биреү, терминдар менән эшләү; шул осорҙоң тарихи шәхестәре тураһында коллектив диалог. |
| «Муса Мортазин эҙҙәре буйлап»<br>Проект, тикшеренеү эштәрен тәҡдим итеү.<br>2-се тикшереү эше.<br>(1 с.) | Проекттар, тикшеренеү эштәренең һөҙөмтәләре менән таныштырыу. | Тикшеренеү эштәре һөҙөмтәләрен класс алдында күрһәтеү; презентация маҡсатын иҫәпкә алып, сығыш форматын билдәләү, телдән һәм яҙма текстар төҙөү; эш планын үҙ аллы төҙөү, уны тормошҡа ашырыу барышында кәрәкле төҙәтмәләр индереү. |
| **БАШҠОРТ СОВЕТ ӘҘӘБИӘТЕ. ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ (10 с.)** | | |
| **Ғәлимов Сәләм (1911-1939).** Тормошо һәм ижады. «Шоңҡар» поэмаһы<br>(1 с.) | Тема, поэманың идея йөкмәткеһе. Яңы кешенең ҡайтанан тыуыу темаһы. Төп геройҙар (Әхмәт, Гөлнур, яҙыусы, архитектор, капитан, Миңйән). Композицияның үҙенсәлеге һәм байлығы, тел үҙенсәлектәре, образлылыҡ. | Поэманы тасуири уҡыу; класташтарҙың тасуири уҡыуын телдән баһалау, актёрҙарҙың уҡыуы; таныш булмаған һүҙҙәрҙе эҙләү, һүҙлектәр һәм белешмә әҙәбиәт ярҙамында уларҙың әһәмиәтен билдәләү; поэманың сюжетын һөйләү; һорауҙарға телдән һәм яҙма яуаптар; коллектив диалогта ҡатнашыу; поэма |

| | | |
|---|---|---|
| | | геройҙарының ҡылыҡтарына әхлаҡи баһа биреү; геройҙарға характеристика биреү. |
| **Баязит Бикбай (1909-1968).** Тормошо һәм ижады. «Ер» поэмаһы, «Ҡаһым түрә» драмаһы<br>(3 с.). | «Ер» поэмаһы – халыҡтарҙың азатлыҡ өсөн күп быуатлыҡ көрәше. Халыҡ һәм ер образын һүрәтләү. Лирик герой образы. Поэманың художество үҙенсәлектәре.<br>«Ҡаһым түрә» драмаһы. Башҡорттарҙың 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыуы. Драманың идея йөкмәткеһе. Рус һәм башҡорт халыҡтары араһында дуҫлыҡ. Халыҡ образы. Драманың төп конфликты. Композицион үҙенсәлектәр. Фольклор жанрҙары һәм элементтары функциялары. | Интернет ресурстарын һәм белешмә әҙәбиәтен файҙаланып, яҙыусы тураһында мәғлүмәттәр эҙләү; яҙыусы тураһында сығыш әҙерләү һәм уның тураһында телдән һөйләү; поэманы тасуири уҡыу, драманы ролдәргә бүлеп уҡыу; һорауҙарға телдән яуап биреү (шул иҫәптән һылтанмаларҙы файҙаланып);<br>коллектив диалогта ҡатнашыу; әҫәрҙәргә һорауҙар төҙөү; геройҙарға ҡылыҡһырлама биреү;<br>авторлыҡ позицияһын сағылдырыуҙың төрлө формаларын анализлау; әҙәбиәт ғилеме терминдары һүҙлеге менән эшләү; проблемалы һорауға телдән һәм яҙма яуап төҙөү. |
| **Зәйнәб Биишева.** Тормошо һәм ижады. «Һөнәрсе менән Өйрәнсек» хикәйәһе<br>(2 с.). | Хикәйәнең төп геройҙары. Оҫта һәм өйрәнсек, бер ауылда үҫкән һәм йәшәгән ике күрше. Һөнәрсе һәм Өйрәнсеккә характеристика бирергә. Алдаҡтың асылыуы. Яҡшылыҡтың яуызлыҡты еңеүе. | Әҫәрҙе уҡыу; әҫәрҙең сюжетын, уның тематикаһын, проблематикаһын, идея-эмоциональ йөкмәткеһен тикшереү; геройҙарҙы әхлаҡи яҡтан баһалау; персонаждарҙы сағыштырыу һәм уларҙың сағыштырма характеристикаһы планын төҙөү; геройҙарға яҙма сағыштырма характеристика төҙөү; сюжет элементтарын асыҡлау; һылтанмалы (цитатный) план төҙөү, дәреслектең бүлексәһе менән аналитик эш, уҡытыусының һорауҙарына яуап биреү; терминдар менән эш; замандаштың әхлаҡи тәртибе тураһында коллектив диалогта ҡатнашыу. |
| **Мостай Кәрим**. Тормошо һәм ижады. Лирика. «Үлмәҫбай» поэмаһы<br>(1 с.) | Поэманың яҙылыу тарихы. Һуғышта яу һәм кеше һүрәтләнеше. Поэмалағы халыҡ геройы. Автор-хикәйәләүсе образы. Поэмалағы шиғри үҙенсәлектәр, поэманың интонация төрлөлөгө. Башҡорт халыҡ ижады менән бәйләнеше. Юмор.<br>Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында | Шиғырҙарҙы, поэманы тасуири уҡыу; йөкмәткене үҙләштереү, идеяны һәм теманы билдәләү; әҫәрҙәр буйынса һорауҙар төҙөү, һорауҙарға яуаптар төҙөү; Мостай Кәримдең тормошо һәм ижады тураһында яңы материал һайлау, алған яңы белемдәрҙе дөйөмләштереү; «Йәшәйһе бар» шиғырын һәм драманан өҙөктө яттан һөйләү; ««Үлмәҫбай» |

| | | |
|---|---|---|
| | М.Кәрим ижады. | поэмаһында халыҡ юморы һәм сатираһы» тигән темаға ҡыҫҡа инша яҙыу. |
| **Рәми Ғарипов.** Шағирҙың биографияһы. «Урал йөрәге», «Аманат» шиғырҙары. «Уйҙарым» ҡобайыры<br>(1 с.). | Туған тел матурлығын данлау, туған телгә ҡарата ихтирам тәрбиәләү. Тыуған ергә, тәбиғәткә һөйөү. | Шиғырҙарҙы тасуири уҡыу; әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен, тематикаһын, идея нигеҙен үҙләштереү; һорауҙарға яуаптар әҙерләү, аңлашылмаған һүҙҙәрҙе эҙләү һәм уларҙың мәғәнәһен аңлатыу; һәр шиғырҙың лирик геройын билдәләү һәм характерлау; тасуирлау сараларын һәм художество деталдәрен анализлау, әҫәрҙә уларҙың ролен аңлатыу; Рәми Ғариповтың тормошо һәм ижады тураһында яңы материал һайлау, яңы белемдәрҙе дөйөмләштереү. |
| **Рауил Бикбаев**, «Башҡортостан бында башлана», «Йүкәләрҙән һығылып бал тама» шиғырҙары<br>(1 с.). | Тыуған ергә һөйөү, уның именлеге, тәбиғәтте һаҡлау, халыҡ яҙмышы өсөн борсолоу, кешеләр араһында дуҫлыҡ, тормошҡа аңлы мөнәсәбәт проблемалары. | Әҫәрҙәрҙе тасуири уҡыу, йөкмәткеһен үҙләштереү, идеяны һәм теманы, идея нигеҙен билдәләү; һорауҙы текст буйынса төҙөү, һорауҙарға яуаптар әҙерләү, аңлашылмаған һүҙҙәр эҙләү һәм уларҙың мәғәнәһен аңлатыу; һәр шиғырҙың лирик геройын билдәләү һәм характерлау; тасуирлау сараларын һәм художество деталдәрен анализлау, уларҙың әҫәрҙәге ролен аңлатыу. |
| **Роберт Паль (1938).** «Уралым» шиғыры.<br>**Талха Ғиниәтуллин (1925-1919).** «Мәтрүшкә еҫе», «Әсә һәм бала» хикәйәләре<br>(1 с.) | «Уралым» шиғыры. Уралдың матурлығын данлау. Кеше һәм тәбиғәт. Пейзажының үҙенсәлеге. Лирик геройҙың патриотик тойғолары.<br>«Мәтрүшкә еҫе», «Әсә һәм бала» хикәйәләре. Әҫәрҙәрҙә эске донъя сафлығын, ябай кешеләрҙең күңел күркәмлеген һүрәтләү. Һуғыш, ауыл кешеләренең ауыр тормошо, уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәре темаһы. | Әҫәрҙәрҙе тасуири уҡыу; әҫәрҙең сюжетына, уның тематикаһына, проблематикаһына, идея-эмоциональ йөкмәткеһенә характеристика; геройҙарҙы әхлаҡи яҡтан баһалау; персонаждарҙы сағыштырыу һәм уларҙың сағыштырма характеристикалары планын төҙөү; дәреслектең бүлексәһе менән аналитик эш, уҡытыусы һорауҙарына яуаптар, терминдар менән эш итеү; Т. Ғиниәтуллиндың (А. Генатуллин) ижады тураһында коллектив диалог. |
| Үлмәҫбай поэмаһында М. Кәримдең сатирик оҫталығы»<br>Проект, тикшеренеү эштәрен тәҡдим итеү. | Проекттар, тикшеренеү эштәренең һөҙөмтәләре менән таныштырыу. | Тикшеренеү эштәре һөҙөмтәләрен класс алдында күрһәтеү; презентация маҡсатын иҫәпкә алып, сығыш форматын билдәләү, телдән һәм яҙма текстар төҙөү; эш планын үҙ аллы төҙөү, уны тормошҡа ашырыу |

| | | |
|---|---|---|
| 3-сө тикшереү эше. (1 с.) | | барышында кәрәкле төҙәтмәләр индереү. |
| **ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ (3 с.)** | | |
| **Назар Нәжми.** «Аҡшишмә», «Һинең ниндәй улыңмын мин» шиғырҙары (1 с.) | Башҡортостан образы һәм уның иҫтәлекле урындарын тасуирлау. Тыуған еребеҙ, тыуған ҡалаһыбыҙ һәм тыуған ауылыбыҙ образы. Тыуған ергә һөйөү тойғоһон һүрәтләү. Лирик герой образы. | Шиғырҙарҙы тасуири уҡыу, йөкмәткене анализлау; текстар буйынса һорауҙар төҙөү һәм уларға яуап биреү; лирик герой образына характеристика; Өфөгә арналған «Өфө – гүзәл баш ҡалам» йырын яттан һөйләү; шиғырҙарҙың тел һәм стилистик үҙенсәлектәрен билдәләү; Назар Нәжмиҙең тормошо һәм ижады тураһында яңы материал һайлау, яңы белемдәрҙе дөйөмләштереү. |
| **Әмир Әминев.** «Ҡытайгород» повесы (1 с.) | Ер мәсьәләһе. Менталитет, әхлаҡ, шәхес азатлығы-азатһыҙлығы, халыҡтың мәғлүмәтлелеге, ассимиляциялар, милли үҙенсәлекте, телде һәм мәҙәниәтте юғалтыу, Ватанды сит ил кешеләренә һатыу тураһында уйланыуҙар. Сатира. Антитеза алымы. Әҫәр сюжетын төҙөү үҙенсәлектәре. | Повесты уҡыу; идея-тематик йөкмәткене билдәләү; повеста күтәрелгән төп проблемаларҙы билдәләү; йөкмәтке буйынса һорауҙар төҙөү; һорауҙарҙы парҙар йәки төркөмдәр буйынса бүлеү; яуаптарҙы анализлау;<br>Әмир Әминевтың ижады тураһында коллектив диалог. |
| **Ринат Камал (1954).** Авторҙың биографияһы һәм ижады тураһында төп мәғлүмәт. «Таня-Таңһылыу» романы (1 ч.) | Әҫәрҙең идея йөкмәткеһе. Төп тема. Туған телгә һөйөү, милләткә ихтирам тәрбиәләү. Әҫәрҙең жанр төҙөлөшө үҙенсәлектәре. Романдың төп образдары. Көнһылыу, Фәнисә, Петриҡҡа характеристика. Әҫәр геройының яҙмышы аша тотош халыҡтың яҙмышын сағылдырыу. | Әҫәрҙе тасуири уҡыу; идея-тематик йөкмәткеһен билдәләү; романдың йөкмәткеһе буйынса һорауҙар төҙөү; парҙар йәки төркөмдәр буйынса һорауҙар бүлеү; һорауҙарға яуаптар әҙерләү; яуаптарҙы анализлау; дәреслек бүлексәләре менән аналитик эш, уҡытыусының һорауҙарына яуаптар биреү; романдың көнүҙәк проблемалары тураһында коллектив диалог;<br>образдарға сағыштырма планда ҡылыҡһырлама биреү; текст һылтанмаларын (цитаталарын) ҡулланып план төҙөү; Интернет селтәрендә яҙыусының ижады тураһында материал эҙләү. |
| «Беҙҙең яҡташтар Тыуған илде һаҡланылар»<br>Проект, тикшеренеү эштәрен | Проекттар, тикшеренеү эштәренең һөҙөмтәләре менән таныштырыу. | Тикшеренеү эштәре һөҙөмтәләрен класс алдында күрһәтеү; презентация маҡсатын иҫәпкә алып, сығыш форматын билдәләү, телдән һәм яҙма текстар төҙөү; |

| | | |
|---|---|---|
| тәҡдим итеү. 4-се тикшереү эше. (1 с.) | | эш планын үҙ аллы төҙөү, уны тормошҡа ашырыу барышында кәрәкле төҙәтмәләр индереү. |
| Резерв – 1 с. | | |

9-се класс – 34 сәғәт.

Дөйөм сәғәттәр һаны – 34, шуларҙың 8 сәғәте – тикшереү эштәренә / проект эштәре һөҙөмтәләрен күрһәтеүгә, 1 сәғәте – резервҡа бүленә.

| **Тематик блоктар, темалар** | **Төп йөкмәткеһе** | **Уҡыусылар эшмәкәрлегенең төп төрҙәренә характеристика** |
|---|---|---|
| **ХАЛЫҠТЫҢ АУЫҘ-ТЕЛ ИЖАДЫ (8 с.)** | | |
| Инеш. Нәфис әҙәбиәт – сәнғәт төрө (1 с.). | Нәфис әҙәбиәт – сәнғәт төрө. Художестволы әҙәбиәттең үҙенсәлеге. Сәнғәт төрҙәре менән сағыштырыу. Нәфис әҙәбиәттең күп планлылығы. Ике төп яғы: 1) уйлап сығарылған булыуы, «һүҙҙән тыш» ысынбарлыҡ образдары; 2) ғәмәлдә телмәр конструкциялары, һүҙ структуралары. | Уҡытыусы аңлатыуын тыңлау; иптәштәренең сығыштарын анализлау; дәреслек менән үҙ аллы эшләү; фәнни-популяр әҙәбиәт менән эшләү; йәмғиәт һәм дәүләт тормошонда, хәҙерге донъяла, кеше тормошонда туған әҙәбиәттең ролен билдәләү. |
| **Башҡорт халыҡ ижады. Ҡарһүҙҙәр. Йола поэзияһы** (1 с.). | Башҡорттарҙың ғаилә-көнкүреш йола мәҙәниәте – халыҡтың тарихи-генетик, рухи, иҡтисади-хоҡуки, идеологик тормошоноң мөһим бер өлөшө. Йола мәҙәниәтенең ғаилә-көнкүреш һәм тәбиғәт миҙгеле (календарь) йолаларына бүленеүе. | Фольклор әҫәрҙәрен тасуири уҡыу, уларға аңлатма биреү; уҡыу процесында уҡығандарға ҡарата шәхси мөнәсәбәтте белдереү; телдән хәбәр итеү, уҡыған текст буйынса һорауҙарға яуап биреү; ижади эш башҡарыу, үҙ фекереңде дәлилләп әйтеү; дәреслек менән аналитик эш, уҡытыусы һорауҙарына яуап биреү, терминдар менән эшләү. |
| **Эпос «Урал батыр»** эпосы» (2 с.). | Шиғри үҙенсәлектәре һәм ритмикаһы. Тарихилығы, мифологик нигеҙе. Әхлаҡ проблемалары. Яҡшылыҡ менән яуызлыҡтың көрәше. Урал менән Шүлгәндең ике туғандың сағыштырма характеристикаһы. Баһадир образы | Эпосты аңлатып уҡыу; иҫкергән һүҙҙәр һүҙлеген төҙөү; эпостың мифологик нигеҙен, төп идеяһын, кеше ҡиммәте һәм үлемһеҙлек идеяһын билдәләү һәм аңлау; халыҡ философияһын һәм педагогикаһын тәрән аңлауҙы һәм индереүҙе анализлау; Урал һәм |

| | | |
|---|---|---|
| | тураһында халыҡ төшөнсәһе. Әкиәт деталдәренең роле. Илһөйәрлек һәм гуманистик мәғәнә.<br>Эпостың мифологик нигеҙе. Халыҡ бәхете өсөн тәбиғәттең стихиялы көстәренә ҡаршы көрәш идеяһы. Кешенең үлемһеҙлеге һәм тәбиғәт темаһы. Халыҡ философияһы. Самрау батша һәм халыҡ йәмғиәт идеалдары булған. Фантастика һәм реализм элементтары. Урал батыр образы халыҡ идеалы булараҡ. «Урал батыр» эпосының донъя мәҙәниәтендә тотҡан урыны.<br>*Әҙәбиәт теорияһы:* эпос. | Шүлгән образдарын сағыштырма характеристика; һөйләү, телдән хәбәр итеү; дәреслек бүлексәһе менән аналитик эш; эпостың донъя күләмендә урынын билдәләү. |
